## ӘХИӘР ХӘКИМ

# ДАЛА МОҢО




Яҙыҡ эштең аҙағы хәйерле булмауы билдәле. Аҡъял хажи менән Йәләлетдин ханзада быға тиҙ үк ышандылар.

Ғәскәр башлыҡтарына ҡарауыл төмәнен алдағы тамашаға әҙерләргә бойороҡ бирелгәс тә, ханзада “Айыу өңө”нә китте.

— Бөйөк хан ауырый, түшәктә ята. Уның янына һис кем индермәй, — тип идарасы Бикмәт Йәләлетдинден юлына арҡыры басты.

Табиб та шуны ҡабатланы.

— Танымайһығыҙмы ни, мин хандың улы, тулы хоҡуҡлы варисымын! Китегеҙ юлдан! — тип сығырынан сығып ярһып, ханзада уларҙы ситкә ҡыҫырыҡланы. Улай ҙа табибтың иларҙай булып инәлеүенә итектәрен ишек төбөндә сисеп ҡалдырҙы.

Хан йоҡлай ине шикелле. Йәләлетдин, шылт иткән тауыш сығармайынса, ятаҡханаға барып инде лә, ваҡытһыҙ килеүенә үкенеп ҡуйҙы.

Ә хан һис көтмәгәндә:

— Ә-ә, һинме был, улым? Ҡана, яҡыныраҡ килеп ултыр, — тип айбандырмаһынмы уны. Тауышы кәрһеҙ, тын алышы ауыр ине. Шуға ҡарамаҫтан, йүткереүен баҫырға тырышып: — Эйе... ниндәй... елдәр ташланы?.. Им-имен...лекме? — тине өҙөм-йортом.

— Һин өндәшмә, атай, тыңла ғына! Башҡала имен, борсолма... Бойорғаныңса, үҙең теләгән тамашаға әҙербеҙ... — тип ханзада ошо хаҡта һөйләргә ауыҙын асып өлгөрмәне, хан ҡаж-ҡож йүткерә башланы.

Ниһайәт, сәсәтмәһе ебәрә төшкәс:

— Ҡуй, ҡуй, был хәлемдә... Бикмәт менән хәбәрләшә тор... Баш

---

Аҙағы. Башы 3-сө һанда.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 121 29.07.02, 17:42

күтәргәс саҡырырмын, — тине лә ауырыуҙан да нығыраҡ тәҡәтен алған хәстәренә көсөтө: — Ғәскәр!.. ғәскәр!..

— Эйе, ул яҡтан бер ноҡсан да юҡ, атай. Булғарға, Сулманға түмәндәрҙе барларға, яуға әҙерлектәрен тикшерергә ебәрелгән хәрбиҙәр ҡайтты. Һәр ерҙә тәртип һаҡлана, һуғыш уйындары, төрлө күнекмәләр үткәрелеп тора. Урыҫтарҙан хәүеф юҡ, — тип теҙҙе Йәләлетдин.

— Мәғҡул! Ә Иҙел тамағында... бигерәк тә Хажитарханда?..

— Унда ла именлек. Тикшереүселәр бик ҡәнәғәт булып ҡайтты. Ҡала кирмәне нығытыла икән. Унда дошман яуы түгел, ҡош та осоп инә алмаҫ, тиҙәр.

— Эй, бынау... йүтәл йөҙәтте, — тип шыбырланы хан. — Тамаҡтан быуа ла ала хәйерһеҙең... Башым ярылып бара... Юғиһә Хажитарханға үҙем барып, бер еләп ҡайтыр инем дә бит... ҡайҙа инде!

— Быныһы артыҡ, атай! Аяҡтарың да һыҙлағас, анау тиклем алыҫ юлға нисек сыҙарһың? Эйәрҙә йөрөрлөк түгелһең... Ышанһаң, мин барырмын, бойор ғына!

— Юҡ! — тип ҡырт киҫте хан, себен ҡыуалаған һымаҡ, ҡул һелтәп. — Һинең өҫтә башҡала! Күҙ яҙҙырмай күҙәтеп торорға тейешһең ундағы хәлдәрҙе. Эйе, һис кемгә ышанма, ханзада, шик уятырҙай кешеләрҙе, бола-фетнә ояларын юҡ итергә хәрәкәт ҡыл!..

— Баш өҫтө, атай, бөйөк хан! Бөтөнөһө әйткәнеңсә булыр...

Байтаҡ ваҡыт өндәшмәне хан. Тамағын ипләгәс, боролоборaҡ ятты ла:

— Бар, улым, хеҙмәтеңдә бул! Минең ауырыуымды бер кем белмәһен... Эйе, иртәгә Аҡъял хажи килһен, — тип Йәләлетдингә китергә ҡушып, ҡул болғаны.

Башҡалаға ҡайтҡас, ханзада үҙ һарайына инеп торманы, туп-тура Олуғ әмир идараһына китте. Хан менән осрашыуы тураһында бәйнәбәйнә һөйләп бирҙе лә:

— Бер бәләнән ҡотолоп торабыҙ, ағай, — тип ҡәнәғәтлек белдерҙе. Ауыр ҡамсыһы, йоҡлаған йылан һымаҡ, алдында ята ине.

— Тимәк, Аллаһы тәғәлә хуп күрмәй ул теләгән тамашаны. — Хәҙрәт тә ҡаршы. Ут менән уйнайһығыҙ, тип һуҡрана. Ә хандың ғәскәрҙе ҡайғыртыуы урынлы ла, ваҡытлы ла. Беҙгә лә һабаҡ. — Аҡъял хажиҙың иңе яҙылды, ҡараш яҡтырҙы.

— Бының раҫ, Олуғ әмир! Ҡараул төмәнен кире һүрмәйек, һуғыш уйынын мотлаҡ үткәрергә кәрәк. Ғәскәрҙе халыҡҡа ла күрһәтербеҙ, — тип Йәләлетдин йөҙрөгөн һелтәне.

— Һыйҙы туҡтатып торорға тура килер. Хан Сарайға ҡайтһын әле, күҙ күрер, — тине лә Олуғ әмир, ханзадаға бер бит ҡағыҙ тотторҙо. — Бер ҡабым иткә ҡарағанда, ошоһо ҡиммәт ҡала халҡына, — тип өҫтәне.

— Ай-һай, хан хуплар микән быны?

— Хуплар, хуплар! Башҡаланың тышҡы диуарҙарын йүнәтергә, нығытырға кәрәк бит, ханзада. Кем эшләй быны? Әлбиттә, ҡала халҡы! Хан фарманы менән һалым әҙ булһа ла кәметелгәс, кешеләр ҡарышмаҫ, күндәмерәк эшләр. Фарманды иртәгә үк “Айыу өңө”нә алып барып, ханыбыҙҙан ҡул ҡуйҙырам, Алла бойорһа...

— Һинең аҡылың алдында баш эйергә генә ҡала миңә, Олуғ әмир! Ханды күндерһәң инде... Атайым үҙе лә һине саҡырҙы әле... Ә мин киттем. Ханаҡаға һуғылаһым бар. Ҡарт төлкө Абрар шәйех уҙынып китте. Нык ҡына киҫәтеп, ҡурҡытып ҡуйырға кәрәк уны.

— Ҡуй, ҡуй, ауыҙыңдан ел алһын! Гонаһ ҡылыу анһат, тәүбә итеү ҡыйын, ханзада. Алла бәндәһе менән ипле һөйләшеү лазым. Был эште миңә ҡалдыр, — тине Аҡъял, төнәгән ханаҡала булыуын йомоп. — Һинең иңеңде ауырыраҡ вазифалар иҙә. Дәрәжәң дә юғары, ваҡланма! — тип Олуғ әмир уны оҙатып ҡалды.

Уйлауынса, үҙ һүҙле, ғорур ханзаданың һалпы яғына һалам ҡыҫтырыу артыҡ түгел ине...

“Айыу өңө”нә ниңә саҡырылыуын аныҡ ҡына белмәгәс, ул төрлөсә фараз ҡылды, ә үҙ йомошон, хандың кәйефенә ҡарап, йә әйтергә, йә әйтмәҫкә фекер төйнәне.

Хан, өҫтөнә йылы сапан кейеп, муйынын йомшаҡ шарф менән урап, тәҙрә төбөндә ултыра ине. Бүлмә тынсыу.

Аҡъял хажиҙың сәләменә хан көтмәгәнсә асыҡ тауыш менән яуап бирҙе, ҡулын үҙ янындағы ултырғысҡа һуҙып:

— Ултыр, ултыр, Олуғ әмир, көткәйнем! — тип йөҙөн сырылтты. Йылмайыуы шул инде.

— Аллаға шөкөр, хәлең арыу күренә, бөйөк хан! — Аҡъял уға баш эйҙе.

— Уныһы табибтар эше, сирсырхауҙы һөйләп ваҡыт әрәм итмәйек... Ғәскәр тураһында һорарға саҡырҙым мин һине.

— Кисерә күр, ғәли йәнәп, Йәләлетдин ханзада һөйләгән икән бит инде? — тип иңен тартты Аҡъял.

— Ә миңә һинең һүҙең кәрәк!

— Ихтыярың, бөйөк хан. Ләкин мин ханзада бәйән иткәнде генә ҡабатлай алам. Ул бөтөнөһөн ышаныслы кешеләребеҙҙең хәбәренә таянып, өҫтәмәй ҙә, кәметмәй ҙә һөйләгән... Хәйер, түбәндәрҙең ҡайҙа урынлашыуы, яуға әҙерлеге тураһында үҙем дә һиңә хисап биргәйнем. Ике аҙна элек кенә...

— Йәләлетдингә ышанырға ярай, тиһең инде?

— Әлбиттә, әлбиттә, ғәли йәнәп! — тине Аҡъял хажи, баш ҡағып. — Һәләтле сардар булып килә ул. Белеп эш итә!

— Был хәбәрең — йөрәгемә май. Рәхмәт, Олуғ әмир! — Хандың ҡарашы яҡтыра бирҙе, тауышы ла көр яңғыраны.

"Шөкөр, бер һикәлтәне уҙҙыҡ..." — тип уйлап, фарманды сығарып өлгөрмәне Олуғ әмир, хандың сырайы ҡабат һүнде, ултырғыс терһәклектәрен ҡыҫҡан бармаҡ быуындары ағарып китте.

— Теге шағирҙы алып килерһең тип көткәйнем мин, хажи. Дастан яҙыр, тигәйнең бит. Яҙҙымы? Уҡып ишеттерһен ине! — Хандың күҙе осҡонланып ҡуйҙы, иренен кинәйәле йылмайыу бөрөштөрҙө. — Ниңә өндәшмәйһең?

— Нисек яуап бирергә аптырабыраҡ ҡалдым, ғәли йәнәп. Эш былай... — тине Аҡъял, ағарынып.

— Аптырарһың шул! Ҡулыңдағы ҡошто бикләп тота алмағас ни... Осҡан түгелме һуң ул, ә? — тип һаман сәнесте хан.

— Шулайға оҡшай.

— Һинең һүҙеңде йыҡмаҫ өсөн, бынан китергә рөхсәт иткәйнем бит мин уға. "Ситлектәге ҡош һайрамай. Ҡалаға ҡайтып, үҙ иркендә йәшәһә, яҙышыр", — тигәйнең.

— Кем уйлаған... Һис юғы, ҡайҙа китеүе билгеһеҙ. — Шағирҙың Мысыр тарафтарына юлланыуын белһә лә, быны ханға әйтмәҫкә булды Аҡъял хажи. — Ашаған еренә мал да ҡайта, ғәли йәнәп, — тип сикләнде.

— "Рухи азатлыҡ" тип теше төштө ятраҡан шағирыңдың. Шуны эҙләп киткәндер. Ә беҙ, Олуғ әмир, ҡартаябыҙ, ахырыһы. Күп нәмәгә күҙебеҙ етмәй.

— Кәмһенмә! Һинең күҙең дә, зиһенең дә үткер булыу арҡаһында мәмләкәтебеҙ таш ҡая кеүек ныҡ тора, бөйөк хан, — тип уны тынысландырыу яғын ҡайғыртты Аҡъял. Һарыуы баҫылмайынса, фарман тураһында ишетергә лә теләмәҫ.

— Ярай, онотайыҡ теге байғошто. Унең ҡайғыһымы, донъя буталғанда... Ә һинең, хажи, тел осоңда ниндәйҙер һүҙең барға оҡшай. — Хан уға ҡаш аҫтынан тексәйеп ҡарап торҙо ла: — Әйт, күңелеңдә көҙөк ҡалмаһын! — тип баш ҡаҡты.

Һүҙҙе һалымға бәйле фармандан башларға ярамай ине. Тәүҙә хандың кәйефен йомшартырлыҡ түшәк йәйергә кәрәк ине.

Хан иһә, ҡапыл сәсәтмәһе тотоп, йүткерергә кереште.

— Уф... уф... һушты... алды... — тине, көскә тын алып. — Ятмай булмаҫ...

Шунда уҡ бүлмәгә күсә Бикмәт менән табиб килеп керҙеләр. Ниндәйҙер шыйыҡ дарыу эсереп ятҡырғас, хандың йүтәле баҫыла төштө. Аҡъял хажи иһә, бындайҙа етди һүҙ ҡуҙғатыуҙы урынһыҙ һанап, аяғүрә торған килеш: "Әллә шым ғына сығып китергәме?" — тип икеләнеп ҡалды. Табиб та, ишеккә ымлап, уға һөҙөп ҡараны.

— Һин ултыр... ултыр, Олуғ әмир!... — Хан тамаҡ ҡырып, тауышын



04.2002 2 ÷àñòü.p65 123 29.07.02, 17:42

иплəргə тырышты. — Һүҙҙе... тамамлап... ҡуйған хəйерле...

— Һине борсомаҫҡа ине. Тыныслан əле. Бəлки серем итеп алырһың. Йылынып ҡына ятып...

— Кəртəлəмə, хажи!.. Тыңлайым, — тине хан, тауышы асыла биреп.

— Кисерə күр, бөйөк хан, мин ошо көндəрҙə башҡаланың тышҡы диуарҙарын ҡарап əйлəндем. Сүккəн, хатта ныҡ ҡына емерелгəн урындары байтаҡ. Нығытырға кəрəк... Һаҡлыҡтан инде, — тип бер тында əйтеп һалды Аҡъял хажи.

— Бəлле, бик тə ваҡытлы эш уйлағанһың! — Хан, баш ҡағып, ҡəнəғəтлек белдерҙе. — Һуң... Быға минең ризалыҡ кəрəкме ни?

— Был эш ҡала халҡының иңенə төшəсəк, ғəли йəнəп. Тимəк, хан фарманы нигеҙендə атҡарылырға тейеш. — Аҡъял ҡуйынынан ҡағыҙҙар сығарҙы. — Фарманды əҙерлəнем мин. Ҡул ҡуйыуың менəн...

— Ҡуям, ҡуям! Ҡана, өҫтəлде яҡыныраҡ килтер, ҡəлəм бир.

Аҡъял фарманды ҡуйынына тыҡты, ə хан быны менəн генə хушһынманы əле:

— Тағы ниндəй ҡағыҙҙар килтерҙең? Күрһəт, сер булмаһа, — тип көлөмһөрəне.

— Һинең иғтибарыңа лайыҡлы түгел улар. Ваҡ-төйəк эш ҡағыҙҙары... Ярай, миңə китергə ижазат бир, бөйөк хан. Фарман буйынса, ҡаланы аяҡҡа баҫтырырға тейешмен мин!

— Фарманһыҙ ғына хəл ҡылынаһы тағы бер мəшəҡəт бар, — тип хан Аҡъялды туҡтатты. — Дəрүиштəрҙе ҡаланан ҡыуырға ваҡыт, Олуғ əмир. Абрар шəйех тирəһендə шикле əҙəмдəр мыжғый икəн. Хəстəрлə ошоно!

— Баш өҫтө, ғəли йəнəп, əйткəнеңсə ҡылырмын! — тип, ниһайəт, хан менəн хушлашыр форсат етеүен аңлап, Аҡъял хажи башҡалаға ҡайтып китте. Һалым тураһында һүҙ ҡуҙғатмауы өсөн иһə үҙен маҡтап ҡуйҙы. "Ҡана, диуарҙарҙы ипкə-һапҡа килтерə башлайыҡ əле. Күренеп тора, ҡала был эште күтəреп алмаясаҡ. Ана шунда инде хан, сараһыҙҙан, халыҡҡа ташлама яһарға күнəсəк..."

Ə Абрар шəйехте һис кисекмəҫтəн Сарайҙан сығарып ебəрергə кəрəк ине. Ҡарт дəрүиш үҙе лə быға əҙер инде. Олуғ əмир менəн төн йөҙөндə осрашып һөйлəшкəс тə, сəфəргə төйнəнə башланы.

Ике-өс көн эсендə ханаҡа бушап ҡалды. Дəрүиштəр төрлөһө төрлө юлдар менəн ҡибла тарафына йүнəлде.

Шəйехтең ниəте Таһранға китеү ине. Үҙенə юлдаш итеп ышаныслы мөриттəренəн йəш дəрүиште алды. Аҡъял уларға төндə Иҙел аръяғына сығырға ярҙамлашты, һəр икеһен атҡа атландырып оҙатты.

## 6

Шағир Ҡаһирəгə килеү менəн Сарайҙан Абрар шəйех биреп ебəргəн хатты тəғəйен ителгəн кешеһенə тапшырырға тейеш ине. Моғайын, шул уның бындағы иң тəүге танышы булыр ҙа əле.

Каруанһарайҙа урынлашып, йыуынып-таҙарынып, əҙ генə ял иткəс, ул үҙенə кəрəкле кеше тураһында белеште лə ҡалаға сығып китте.

Баҡһаң, хатты алаһы Исрафил исемле кеше лə дəрүиш, Сарайҙағы Абрар шəйех менəн бер үк Наҡшбəндия[1] мəҙһəбенең тарафдары икəн. Ап-аҡ һаҡал-мыйыҡлы, үткер ҡарашлы ҡарт. Иҫəнлек-һаулыҡ һорашҡас, артыҡ һүҙ ҡуйыртып тормайынса, ул хатты ҡуш ҡуллап ҡабул итеп, тəүҙə маңлайына, унан күкрəгенə тейҙереп алды ла ҡабаланмай ғына уҡырға кереште. Уҡый-уҡый ҙа "һым-һым" тип йылмайып, нисəмə мең саҡырымдағы илдəн килгəн мосафирға йылт итеп ҡарап ҡуя.

— Алтын Урҙа мəмлəкəтенең күренекле шағиры икəнһең!.. — Шəйех, һынын турайтып, тантана-

[1]Наҡшбəндия – Урта быуаттарҙа суфыйҙар мəҙһəбен ойоштороусы Хужа Баһауддиндың тəхəллусы "Наҡшбəнд" (Нағыш оҫтаһы, рəссам) һүҙенəн шул мəҙһəбтең исеме булып киткəн. Шəреҡ илдəренең бик күп мəшһүр шағирҙары, ғалимдары уның тарафдары була.

лы төҫкә керҙе. — Бының өҫтөнә, тоғро дуҫым вә йәшлектәге шәриғемдең[2] фатихаһын алып килгәнһең. Иншалла, арзуҙарың[3] ғәмәлгә ашыр. Хуш килдең, Сәйф Сараи! — тип шағирҙы ҡосаҡлап алды.

Йөҙөм, әфлисун, тағы ниндәйҙер ят еләк-емеш ҡуйылған өҫтәл янына ултырғас, боҙҙай һалҡын емеш һуттары эскән арала, дәрүиш Сарайҙағы дуҫының һаулығы, шөғөлдәре, шәкерттәре, ҡаланың хәл-әхүәле тураһында ентекләп һорашырға кереште. Был яҡлап танһығы ҡанғас, Сәйфтең үҙе, ижады, алдағы ниәттәре хаҡында белеште.

— Ғәфү ит, тәҡсир, һиңә мәшәҡәт тыуҙырҙым, — тине шағир, ысынлап та уңайһыҙлыҡ кисереп.

— Борсолма, һинең кеүек аҫыл затҡа хөрмәт күрһәтеү, ярҙам итеү — ҙур ҡыуаныс миңә! Ҡана, Аллаһы тәғәлә биргән ризыҡтарҙан ауыҙ итә тор. Тиҙҙән беҙҙең илдең итле тәғәмдәрен килтерерҙәр. Һин ашыҡма, бөгөнгә минең ҡунағым булырһың. Ә киләсәктә ҡайҙа йәшәрең, ни ҡылырың Алла ихтыярында. Шөкөр, бында һинең яҡташтарың әҙ түгел. Араларында юғары мансаб биләгәндәре лә бар. Шуларҙың береһе менән таныштырырмын, ят итмәҫ шәт.

— Һәйбәт булыр ине. Рәхмәт, яҡшылығыңды онотмам... — Шағир баш эйҙе, әҙ генә уйланып торҙо ла: — Әгәр ҙә имканиәт тыуһа, ҡыпсаҡ иленән сыҡҡан Насриддин ән-Насыри тигән шағирҙы күрергә ине, — тип юлда саҡта уҡ төйнәгән ниәтен әйтте.

Ҡапыл шәйехтең ҡарашы һүнде, башы эйелде. Аптыраулы төҫтә ҡулдарын йәйеп ебәрҙе лә, өндәшә алмайынса, тамағын ҡылтылдатты. Байтаҡ ыҙалանғас, ҡарлыҡҡанырaҡ тауыш менән:

— Эй, туған! Эй, хөрмәтле Сәйф! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Тәҡдирҙән уҙмыш юҡ шул... Ишетмәгәнһең, ахырыһы. Үкенескә, Насриддиндың яҡты донъянан китеүенә өс йыл бит инде. Яҡын дуҫтар, фекерҙәштәр инек, йәл...

— Уф Алла, белмәгәйнем, тәҡсир... — Сәйф, күҙенә төйөлгән йәште һөртөп, маңлайын уның ҡулбашына терәне.

— Ни сара! — тине шәйех Исрафил, үкһеүен йотоп. — Бәндә, тыумаҡтан ҡалмағас, үлмәктән дә ҡалмай. Уның донъялыҡтағы мәнзиле[4] күҙ менән ҡаш араһы ғына... Саф күңелле, айыҡ аҡыллы, ғәҙел кеше ине Насриддин.

— Йәне ожмахта булһын. — Шағир, ауыҙ эсенән доға уҡып, битен һыпырҙы.

— Иншалла, шулай булыр, — тип хужа ла уға ҡушылды. Бынан аҙаҡ һүҙҙе икенсегә күсерҙе: — Һине таныштыраһы кеше — Мысыр иленең күренекле заттарынан, солтаныбыҙҙың тоғро арҡаҙашы.

— Исем-шәрифтәре кем һуң уның? — тип Сәйфтең түҙемһеҙлек белдереүенән шәйех ҡабат теремекләнеп китте:

— Һай, эттәгенәһе, әйтмәнемме ни әле?! — тине лә маңлайына сәпәп ҡуйҙы. — Хәтер тигәнең... Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди ул әмирҙең исеме. Атамаһынан уҡ күренеп тора: мәрхүм дуҫым кеүек, һеҙҙең яҡтарҙағы башҡорт ҡәүеменән инде. Урал, Иҙел тарафтарынан күсеп килгән төркиҙәргә бик тә иғтибарлы, мөғтәбәр инсан. Аллаға тапшырып, иртәгә үк таныштырырмын...

Әммә Ғилметдин әмир менән осрашыуҙы кисектерергә тура килде, сөнки ул Нил үрендәге алыҫ мөхафазаға[5] дәүләт йомошо менән киткән булып сыҡты.

Сәйф быға артыҡ бошонманы, таныш түгел ҡаланың иҫтәлекле урындарын тамаша ҡылып йөрөнө.

Ҙур ҡаланың йәшәү айышын, тын алышын баҙарҙан да асыҡ сағылдырған көҙгө юҡтыр. Быны ул күп тапҡыр һынаған.

Иң ҙур баҙар үҙәккә яҡын ғына икән. Уға алып бараһы киң урамдың ике яғына төрлө дөкәндәр, эре-

---

[2]Шәриҡ – һабаҡташ.
[3]Арзу – теләк, өмөт.
[4]Мәнзил – туҡтап китеү ваҡыты.
[5]Мөхафаза – Мысырҙа административ-территориаль берәмек.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 125 29.07.02, 17:42

ле-ваҡлы оҫтаханалар теҙелгән. Ни генә эшләмәйҙәр бында! Фил һөйәгенән йорт әйберҙәре яһайҙар, зәркәндәр усаҡ көйрәтеп, бәләкәс кенә сүкештәрен сыңлатып, ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәрен сүкеп сығара, тегенселәр кейем тегә, әҙерҙәрен ҡылдан нәҙек көмөш ептәр менән нағышлай, йәнәштә төрлө төҫтәге йөн йомғаҡтарын тағатып, келәм-балаҫ һуғалар. Артабан быяласылар, балсыҡтан һауыт-һаба ҡойоусылар, таштай ҡаты таҡталарҙы юнып-шымартып, өҫтәл, ултырғыс, кәштә кеүек йорт монаяттары яһаусылар. Оҫта һөнәрселәрҙең ҡулына күҙ эйәрмәй. Нисәмә йөҙ кеше бил яҙмай эшләй, сөнки уларҙың хеҙмәте — тереклектәренең нигеҙе.

Баҙар майҙанына барып ингәс, Сәйф бер мәлгә хатта аҙанып ҡалды. Ары һуғылып, бире ҡағылып, шау-гөр килеп йөрөгән баҙарҡандар араһынан йырып үтерлек түгел. Шуныһы ғәжәп, текләберәк ҡараһаң, алыусынан һатыусы күплеге күҙгә ташлана.

Сауҙа уңған ерҙә ҡыйҡыу-һөрән айырыуса көслө. Һатыусы менән алыусының алып-биреп һатыулашыуына тикәй тамаша эҙләп йөрөгән эшлекһеҙҙәр, усаҡҡа ҡороһары ташлаған һымаҡ, ҡомар өҫтәп ебәрә. Уларҙы етди ҡиәфәтле, тос йөҙроҡло аралашлыҡ итеүселәр ситкә ҡыҫырыҡлағас ҡына, сауҙа ипкә килә. Сауҙаның ғәҙеллеген мохтасибтар күҙәтә.

Баҙар геүләй, сөгөрмәкләнеп ҡайнай. Төрлө яҡтан килтерелгән байлыҡтың күплеге иҫ китмәле. Сауҙагәр әһеленең өҫ-башына, ҡиәфәтенә ҡарап, уларҙың ҡайһы илдәрҙән икәнлеген төҫмөрләргә мөмкин. Чин, Һиндостан яҡтарынан, Таһран, Бағдад, Нишапурҙан башлап, мәғриб илдәренә тиклемге һәр ерҙең хеҙмәт, һөнәрселек емештәре тау-тау өйөлөп ята. Йәнең теләгәнен һайлап ал.

Этелеп-төртөлөп, тирләп-бешеп йөрөгәс, Сәйфтең баҙарҙан буш ҡул сыҡҡыһы килмәне. Ул бер нисә китап һатып алды. Ә бүтән кәрәк-ярағын аҙаҡ, йәшәр урын тапҡас хәстәрләр. Шулай уйлап, ул Астара сауҙагәре Әбүбәкергә күңеленән рәхмәт уҡыны. Күн янсыҡтағы динарҙарҙың сиреге лә сарыфланмағайны әле. Тәүге мәлдә мохтажлыҡ кисермәҫ, ә алдағыһы, шәйех әйткәнсә, Аллаһы тәғәлә ихтыярында.

Баҙарҙан сыҡҡас, шағир Нил буйына табан атланы. Юлайҡан, унынсы быуат аҙаҡтарында уҡ төҙөлгән әл-Әзхар, әл-Хәким мәсеттәре янында туҡталып, баш эйеп уҙҙы. Улар Астара, Дәмәшеҡ, әл-Искәндәриә ҡалаларындағы мәсеттәргә оҡшамағандар. Ҙур дүрткел бина түбәһенең уртаһынан алтын менән көпләнгән ярымшар шәкелендәге һырлы көмбәҙ ҡалҡып тора, ике манара кәмендә илле аршын бейеклеккә үрләгән. Йәнә шуныһына ла иғтибар итте Сәйф: мәсеттәр янынан үтеп-һүтеп йөрөгән кешеләр, мотлаҡ бер дәҡикә генә туҡталып, ауыҙ эсенән доға уҡып, биттәрен һыйпап уҙа. Халыҡтың диндарлығына ишара инде был.

Бынан аҙаҡ шағир ун өсөнсө быуатта солтан Ҡалауын төҙөткән биниһая бейек ҡәлғәне таң ҡалып урап сыҡты. Каруанһарайға ул ярайһы уҡ арып, һыуһап ҡайтты. Ун беренсе быуат ҡоролмаларын, йөмләнән Баб әл-Футух, Баб эн-Наф, Баб әз-Зүвәйлә ҡапҡаларын ҡарап әйләнеүҙе иртәгәһе көнгә ҡалдырҙы.

Ә боронғо Мысыр фирғәүендәренең әһрамдарын[6] тамаша ҡылыу тураһында хәҙергә уйларға ла ярамай әле уға. Тәүҙә, баш-күҙ алып, берәй хеҙмәткә урынлашырға, көн итмеш хәстәрен теүәлләргә кәрәк ине. Юғиһә Дәмәшеҡ — әл-Искәндәриә юлында саҡтағы танышы Аурелоның һүҙенә ҡарағанда, ул әһрамдар борон ер йөҙөндәге ете мөғжизәнең иң беренсеһе иҫәпләнгән икән бит. Форсат килеп сығыу менән мотлаҡ барып күрермен, тип үҙенә һүҙ биргәйне Сәйф.

Йоҡоһо туйғансы йоҡлап, унан сәғәттәр буйы ҡала урамдарын ҡыҙырып, ул ваҡыттың уҙғанын тоймай ҙа ҡалды. Өс көн үтеүгә уны шәйхтең йомошсоһо килеп саҡырҙы.

[6]Әһрам – өс йә дүрт ҡырлы пирамида рәүешендә төҙөлгән ҙур кәшәнә.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 126 29.07.02, 17:42

Сәфәрҙән ҡайтҡан Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди шәйехтең һүҙен йыҡмаған, Сәйф Сараиҙы саҡырырға бойорған. Шағир иһә уның янына һағайыбыраҡ барҙы, сөнки тыуған илендә саҡта түрә-ҡаранан бары тик йәбер-золом күреүе үҙәгенә үткән. Әгәр ҙә Ғилметдин әмир, шулар кеүек үк, унан выжданы ҡушмағанды талап итһә, был осрашыуҙан ни мәғәнә, тип икеләнде ул.

Ғилметдин Санжар әл-Башҡордиҙың биниһая ҙур йорто ҡаланың иң йәмле, аулаҡ ерендә Нил ярында урынлашҡан. Ихата эсенә мотлаҡ ҡарауылхана аша инергә кәрәк икән. Ҡоралды яугирҙәр һаҡлай әмир һарайын.

Исрафил шәйех менән шағирҙы урта йәштәрҙәге кеше, әмир һарайының өлкән хеҙмәтсеһе, ҡаршыланы. Уларҙы иҙәнгә, асыҡ урынын ҡалдырмайынса йомшаҡ келәмдәр түшәлгән, ишек-тәҙрә баштарына Ҡөрьән аяттары ырып яҙылған мәрмәр таҡталар беркетеүле, бай йыһазлы ғәйәт ҙур ханаға индергәс, ултырып торорға ҡушты ла эске ишектән инеп китте.

Күп тә үтмәне, ҡап-ҡара ҡыҫҡа һаҡал-мыйыҡлы, уртанан ҡалҡыу буйлы, ҡырҡ йәштәрҙәге мөһабәт кеше килеп сыҡты. Ҡунаҡтарҙың баш эйеп сәләмләүенә:

— Вәғәләйкүм әссәләм! Хуш килдегеҙ, хөрмәтле аҫыл заттар! — тине лә тәүҙә шәйех менән күреште, унан, алсаҡ йылмайып, шағирҙы ҡосаҡлап алды. — Һаумы, һаумы, яҡташ! Иҫән-аман Ҡаһирәгә килеп етеүең ҡәлбемде ҡыуаныҫҡа тултырҙы, рәхим ит! — тип уны күпереп торған көрсигә[7] ултыртты.

— Ваҡыт табып, йортоңа саҡырыуың өсөн рәхмәт, әмир! Һине күрергә теләүемдең сәбәбен мөхтәрәм шәйех әйткәндер. Үҙеңә мәғлүм, ят ерҙә бәндә таяныҫҡа, ярҙамға мохтаж...

Әмир уның һүҙен күтәреп алды:

— Иманым камил, хөрмәтле аға, ғилемеңә лайыҡлы, теләгеңә ярашлы хеҙмәт урыны ла табырһың, йорт-ерең дә булыр.

Әңгәмә ғәрәп телендә башланып, артабан төркисә дауам итте. Өҫтәүенә, Ғилметдин Санжар яҙма төркиҙән йыш-йыш башҡорт ҡыпсаҡтары һөйләшенә күсте. Үҫмерлегенән үк ғәрәптәр араһында йәшәүенә ҡарамаҫтан, үҙ телен онотмаған, әйтәгүр.

Шағирҙың ошо хаҡта әйтеп:

— Афарин, әмир! — тип хуплауынан Ғилметдин Санжарҙың күҙҙәре осҡонланып китте.

— Эй, ағай, — тине һағышланыбыраҡ, — туған тел — әсә теле бит, онотолмай! Балаларым да, әсәләре ғәрәптәрҙән булһа ла, башҡортсаны ла һәйбәт беләләр...

Бығаса яҡташтарҙың ихлас әңгәмәһен тыңлап, һүҙҙәрен баш ҡағып ҡына хуплап, өндәшмәй ултырған шәйех Исрафил:

— Тел белмәк — ил белмәктер. Нисә тел белһәң, зиһенең шул бәрәбәр байыға, — тип изаһ биреп ҡуйҙы. — Мәғлүм ки, бында һеҙҙең яҡтарҙан килеп төпләнгән шағирҙар, төркисә ижад итеү менән бергә, ғәрәп, фарсы телдәрен камил белә. Шуға күрә күптәре дәүләт хеҙмәтендәләр. Алла бойорһа, һин дә юғалып ҡалмаҫһың! — Шәйех Сәйфтең ҡулын ҡыҫты. Ғилметдин әмиргә баш эйеп: — Бының кеүек ҡөҙрәтле заттар кеше ҡәҙерен белә. Тап үҙеңдең шиғырыңда әйтелгәнсә инде, — тине лә Сәйф Сараиҙың бер шиғырын ятҡа әйтеп бирҙе: “Дәгел ирлек ағыҙға йомроҡ ормаҡ. Ир исәң, ҡой ағыҙға бал вә ҡаймаҡ!..”

— “Бал вә ҡаймаҡ” тигәндән кешегә яҡшылыҡ ҡылыуҙы аңларға кәрәктер. Дөрөҫмө, Сәйф аға? Һин дә шуны күҙ уңында тотаһыңмы, тәҡсир? — Уларҙың әле береһенә, әле икенсеһенә һораулы ҡараш ташланы әмир.

— Эйе, эйе, өҫтөнә баҫтың. Бәрәкалла! — тип бер тауыштан яуап бирҙе ҡунаҡтар.

— Хәлдән килгәнсә мин шул ҡағиҙәгә тоғролоҡ һаҡлайым, — тине Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди. — Ғәли йәнәп солтаныбыҙ (Аллаһы тәғәлә уға оҙон ғүмер бирһен!) мәмләкәтебеҙҙең мәҙәни

[7]Көрси – урындыҡ, кресло.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 127 29.07.02, 17:42

тәрәҡҡиәтен даим ҡайғыртып тора. Донъяуи ғилемдәрҙең үҫешенә, ғалим-ғөләмәгә, дин әһелдәренә, әҙиптәргә иғтибарлы. Кем ки илебеҙ мәнфәғәтенә тоғро хеҙмәт итһә, уның ҡайһы ҡәүем кешеһе булыуына ҡарамаҫтан, мәсьүлиәтле вазифаға үрләтелә.

— Һүҙең хаҡ, хөрмәтле әмир! Мысыр мәмләкәтенең көскә кереүе, гөрләп сәскә атыуы — ана шул сәйәсәттең емеше бит инде ул, — тип шәйех ҡыуаныс белдерҙе. — Бына һин, юғары мансаблы сардар булһаң да, ғәскәр мәшәҡәттәренән тыш иҡтисад, мәҙәниәт өлкәләрен хәстәрләргә лә ваҡыт табаһың. Быны һәр кем раҫлар...

— Рәхмәт, остаз! — Әмир, ултырған урынынан торҙо, ҡулы менән киң хәрәкәт яһап, ҡунаҡтарҙы эске ханаларҙың береһендә яраштырылған табынға саҡырҙы. Ашап-эскән арала Сәйф Сараиҙан Алтын Урҙаның хәле, күрше илдәр менән мөнәсәбәте тураһында һорашты. Бигерәк тә Сарай ҡалаһындағы төҙөлөш эштәренең барышына ҡыҙыҡһыныу белдерҙе.

— Афсус, мөхтәрәм әмир, — тине Сәйф, үкенеүен йәшерә алмайынса, — Сарай ҡалаһын сәфәр ваҡытында күргән ҡалаларҙың береһе менән дә сағыштырырлыҡ түгел. Ҙур-ҙур ғимараттар, мәсеттәр, каруанһарайҙар бар-барлыҡҡа, әммә иҫкергән инде улар, ә яңылары һирәк төҙөлә. Урҙа, башлыса, ғәскәрҙе ҙурайтыу, ил сиктәрен нығытыу менән мәшғүл. Аҡһаҡ Тимурҙан, урыҫтарҙан хәүефләнә хан...

— Хәбәрем бар. Тарҡаулыҡ йонсота Алтын Урҙаны. Былай дауам итһә, йә Тимур, йә урыҫтар Урҙаның билен һындырасаҡ. Өҫтәүенә, Иҙеүкәй ҙә тындырмай икән ханығыҙҙы.

Сәйф ғәжәпләнеп баш сайҡаны:

— Беҙҙең ил хәлдәрен минән яҡшыраҡ беләһең икән! Әйтерһең, яңыраҡ шул яҡтарҙа йөрөп ҡайтҡанһың.

— Быны миңә хеҙмәтем ҡуша, ағай, — тип яуапланы әмир. — Үҙ мәмләкәтеңдең именлеген ҡайғыртаһың икән, тирә-яҡтарҙа ниндәй елдәр иҫеүен мотлаҡ белеп тороу фарыз. Әйткәнең раҫ, ләкин мин түгел, ә илселәребеҙ... йәнә йөргөнсөләребеҙ Алтын Урҙаға барып тора...

Ошо осрашыуҙан өс көн уҙғас, Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди шағирҙы дәүләт идараһы йортона алып барҙы.

Мөһабәт һарайҙың уң ҡанатын биләгән биш-алты иркен хананың береһендә уларҙы өҫтөнә йәшкелт йөббә, башына бейек аммам кейгән үткер ҡарашлы кеше ҡаршыланы. Әмир ҙә, шағир ҙа баш эйеп тәғзим ҡылдылар.

— Рәхим итеп, түргә уҙығыҙ, — тине хужа, йомшаҡ көрсиҙәргә ымлап. Ап-аҡ айырса һаҡалын һыйпаны.

— Бына, мөхтәрәм хәҙрәт, алдан һөйләшеүгә бинаән, һинең хозурыңа Алтын Урҙанан килгән шағир Сараиҙы алып килдем, — тип тағы баш эйҙе Ғилметдин әмир. — Зиһене асыҡ, ғилеме камил, диндар кеше кәрәк, тигәйнең. Ал уны үҙ яныңа, һына. Яраҡлы тапһаң, хеҙмәтеңдә булыр...

Шулай итеп, Сәйф Сараи диванда дин эштәре идараһын етәкләүсе мөфтиҙең баш сәркәтибе вазифаһына тәғәйенләнде. Был хеҙмәтте ул ғүмеренең ахырынаса тиерлек атҡарасаҡ.

Уға яҡшы йыһазлы, иркен йорт бирелде, өйөн ҡарарға, аш-һыу хәстәрләргә ирле-ҡатынлы хеҙмәтселәр ҡуйылды. Һуңлап булһа ла тормошо, көнитмеше ҡалыпҡа керҙе.

Ул үҙен дауыллы-шауҡымлы диңгеҙ тулҡындары менән айҡашаайҡаша тыныс ярға иҫән-һау килеп сыҡҡан диңгеҙсе кеүегерәк хис итте. Ысынлап та, уның бығаса йәшәгән ғүмере юғалтыу-юҡһыныуҙар, үкенестәр даръяһына оҡшаш ине. Бауырмал әсәһе, хәстәрсән атаһы йортонда ғәм-хәсрәтһеҙ үткән бала сағы, елбәҙәк үҫмерлек йылдары һағынып хәтерләргә генә ҡалды.

Йәшлегендә иң гүзәл ҡыҙға ғашиҡ булып, йөрәгенән ҡайнап сыҡҡан ярһыулы һөйөү хистәрен шиғыр юлдарына һалыуҙан ул кинәнес таба торғайны. Күп ваҡыт мохтажлыҡта көн итеүенә, түрә-ҡаранан әр-хур ишетеүенә ҡарамаҫтан, донъя иҫ киткес матур ине. Үке-

нескә, йәнде гәлсәр күктәргә үрләтер тылсымлы, яҡты ҡояшлы көндәр оҙаҡҡа барманы. Уға күңел ҡуйған ун ете йәшлек Гөләндәмде, ҡан илатып, үҙенән өс бәрәбәр тиерлек өлкән бай кешегә бирҙеләр.

Аҙаҡ, күп йылдарҙан һуң ҡауышыу өмөтө яңырғас, уларҙы тағы айырҙылар. Шағир, бар ихтыярын усҡа йомарлап, мәшәҡәтле оҙон юлдан атлаусы яңғыҙ юлсы хәлендә ҡалды. Һөйөнөстән көйөнөстәре күберәк шиғриәт уның берҙән-бер таянысы, йөрәк яраларының дауаһы ине...

Мөфти идараһындағы хеҙмәте ауыр түгел шағирҙың, сөнки уның ҡул аҫтында хаттатлыҡ һөнәренә өйрәтелгән оҫта ҡуллы йәш сәркәтиптәр эшләй. Дини мәҙһәбтәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен яйлауға, фиҡһ, вакуф, хәйриә эштәренә бәйле рәсми ҡағыҙҙарҙы шулар күсереп яҙа. Илдә ҡабул ителгән тәртип-ҡанунға, ыҙан-йолаларға таянып, Сәйф уларҙы уҡый, төҙәтә, яңынан күсертә лә хәҙрәткә күрһәтә. Әҙер күрһәтмәләр барса мөхафазаларҙағы имамдарға, ҡазыйҙарға, мәҙһәб шәйехтәренә таратыла. Ҡағыҙҙарҙың тейешле ергә, тәғәйен кешеһенә тапшырылыуын тикшереү ҙә Сәйф өҫтөндә.

Идарала ул төшкәсә ултыра. Ҡалған ваҡыты үҙ ихтыярында. Мөфти тәүҙән үк, уның йөгөнә кереп: “Һин — шағир, беҙҙең көндәлек эштәргә ҡарағанда, шиғриәткә күберәк ваҡыт бирергә тейешһең”, — тигәйне.

Юҡ, вазифаһын илке-һалҡы башҡарманы Сәйф, ихлас эшләне. Шуның менән бергә иркенләп яҙышыу мөмкинлеге табыуына ҡәнәғәтлек кисерерлеге бар ине уның. Каруансы Мансур ауыҙынан ишеткән Чин шағиры Ли Бо һүҙҙәрен хәтерләп: “Ысынлап та, эргәләге — алыҫ, йыраҡтағы яҡын булып сыҡты. Тыуған илемдән нисәмә меҙ саҡырымдарҙа ятҡан Мысыр иле маҡсатыма яҡынайтты ла баһа!” — тип ҡыуанды.

Ҡыуанмаҫлыҡмы ни! Ул үҙ өйөндә, яҡты, аулаҡ ханала яҙышып ултыра. Күптән хыял иткән эшенә — Мөслихиддин Сәғдиҙең “Гөлстан”-ын төркисәгә әйләндерергә тотона алыуы яҙмыштың яҡты йөҙ күрһәтеүе ине.

Шулай илһамланып эшләгәндә, тәҙрәнән тышҡа һирпелеп ҡараны ла шағир, урамдан яй ғына үтеп барған дөйә каруанына иғтибар итте. Йөктәренең ауырлығын тоймағандай, дөйәләр, баштарын юғары тотоп, ғорур төҫтә атлай. Ниндәй сыҙамлы, мөһабәт һынлы хайуан инде дөйә! Шәйех Сәғдиҙең дә уға һоҡланырлығы булған шул. Бына бит хатта “Гөлстан”да уны сыҙамлыҡтың, олпатлыҡтың миҫалы итеп кинәйәләгән:

Ҡом сүлендә етеҙ арғымаҡ та
Ни барыһы ике һыуһын сабыр.
Дөйә иһә ҡабаланмай ғына
Тәүлек буйы ялһыҙ-ялһыҙ барыр...

Шағир быны кешеләрҙең эшкә мөнәсәбәтен күҙ уңында тотоп яҙған, әлбиттә. Уйлаған ниәт-маҡсатыңа ашыҡ-бошоҡ түгел, яйлап, абайлап барырға кәрәк, тип иҫкәртә лә баһа ул!

Шунда уҡ Сәғди шиғырына нәзирә рәүешендә Сәйфтең күңелендә ошондай мисралар ялды:

Уҙып китте бик ашыҡҡан
һыбайлы ир
Дөйә менеп әкрен барған
юламанды.
Әммә дөйә көнө-төнө алға барҙы,
Ярһыу толпар иһә
арып туҡтап ҡалды.

Сәйфтең үҙ әҫәре, яңынан-яңы ботаҡтар ебәргән, бөрөгә тумалып ултырған ағас кеүек, тармаҡлана, шул уҡ ваҡытта бер бөтөн булып ойоша барҙы. Урыны менән ул төп нөсхәгә тоғролоҡ һаҡланы. Асылда иһә яңы заман фекерҙәрен алға һөргән, мөғәллифтең үҙ халҡының тормошона, тел хазинаһына нигеҙләнгән төрки дастан ине был. Шағир уны “Гөлстан бит-төрки” тип исемләргә ҡарар итте. “Гөлстан бит-төрки” — йәғни төркисә Гөлстан.

“... Тәңрегә тәүәккәл ҡылып, тырышлыҡ билен дәрт билбауы менән быуып, иншалла, тамамлармын тип, башлап ебәрҙем эшемде...” — тигән сәсмә изаһ булды дастандың тәүге юлдарында...

Әҙәми зат ғүмере сикһеҙ түгел. Шуны уйлап, алтмыш йәшкә етеп килгән шағир ваҡыт ҡәҙерен белеп йәшәне, уны фани донъя йыуаныс-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 129 29.07.02, 17:42

тарына тәләфләмәҫкә тырышты. Шулайын шулай, әммә Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди йортонда ай һайын яҡташтар ҡоронда осрашыуҙан ситтә ҡалманы.

Был мәжлестәрҙә улар көтөп ала, тыуған илдәрен хәтерләп йыуаныс таба торғайны. Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди йыш ҡына: “Эй, ғәзиздәрем, һеҙҙең аҡыллы әңгәмәгеҙҙе тыңлап ултырыу күңелемде күтәреп ебәрә”, — тип ҡыуаныр ине.

Һөйләшеү ултырҙаштарҙың бөтөнөһө өсөн уртаҡ төркиҙә бара ла, онотолоп китеп, һәр кем үҙенең әсә теленә күсә. Арала ҡыпсаҡтар ҙа, һарттар ҙа, уйғыр йә Иҙел буйының үҙҙәрен “булғар” тип исемләгәндәре лә бар. Шуға ҡарамаҫтан, улар бер-береһен яҡшы аңлай, сөнки телдәре яҡын: әйтерһең, бер ҙур ағастың тармаҡтары.

Мосафир шағирҙар башлыса яҙма төркисә ижад итә ине. Шиғыр уҡыу, бер-береһенең ғәзәлдәренә, ҡасидәләренә нәзирә яҙыу, изаһ биреү — уларҙың яратҡан шөғөлө. Ҡайһы саҡта әңгәмә шиғри әйтешкә әйләнеп киткеләй, уйынлы-ысынлы бәхәс булып ала. Мәжлес төнгәсә дауам итә лә мул зыяфәт[8] табыны менән тамамлана.

Үкенескә, Мысырға күсеп килгән төрки шағирҙарҙың байтағы, Насриддин ән-Насыри кеүек үк, гүр эйәһе ине инде. Әмир өйөндә осрашыуҙарҙа табындаштар уларҙы хөрмәт менән иҫкә төшөрә, шиғырҙарын һоҡланып ятҡа уҡый.

Өлкән йәштәге әҙиптәрҙең исәндәренән айырыуса Туғлы Хужа менән мәүләнә[9] Исхаҡты үҙ итте Сәйф Сараи.

Бер көн икәүҙән-икәү генә әңгәмә ҡороп ултырғанда, Исхаҡ уҙаман шундайыраҡ һүҙ асты:

— Эй, Сәйф, каруансыларҙан, йөргөнсө сәйяхтарҙан ишетеүебеҙсә, үҙ илеңдең танылған шағиры инең. Афсус, беҙгә оҡшап, һин дә мосафирлыҡҡа дусар булдың. Сәбәбе ни бының?

Тыуған илен хәтерләүҙән Сәйф тамағын ҡыҫып көрһөнөп ҡуйҙы. Ҡаһирәгә килеп урынлашҡас, ул ят мөхиткә, бындағы тәртип-низамға тиҙ үк өйрәнде. Абруйлы хеҙмәте лә, иркенләп яҙышыу мөмкинлеге лә бар. Ә барыбер тыуған илен онота алмай. Төндәрен, йоҡоға китеп өлгөрөр-өлгөрмәҫ, төшләнеп уяна ла, Иҙел буйының бойоҡ талдарын, бөҙрә ҡайындарын, дала иңләп йөрөгән мал көтөүҙәрен күҙ алдына килтереп, таңғаса уйланып ята. Йәнә шуныһы ғәжәп, көндәр буйы уны әскелтем-татлы әрем еҫе эҙәрлекләй. Дала еҫе. Бала саҡтың хуш еҫе...

Иртән, йөрәге дарҫлап тибеүҙән тертләп уянғас, ул күҙ йәшенә мансылған мендәрен, йорт ҡараусы ҡатынға күрһәтмәҫ өсөн, йәшереп ҡуя.

“Эй, дәриғ! — тип уйға ҡалды шағир. — Бәндәнең иң татлы, иң әрнеүле һөйөү хисе тыуған иленә тамырлана шул...”

Быны мәүләнә Исхаҡҡа әйтә алмай ул. Был хисте һәр кем үҙе генә кисерергә тейештер. Ҡуйылған һорауға иһә ул икенсе төрлө итеп, донъя хәлен уйлап, яуап биреүҙе мәғҡул күрҙе.

— Сәбәбе... Сәбәбе... — тине шым ғына. — Унда, мәүләнә, бәндәләрҙең тәнен дә, йәнен дә аяуһыҙ ҡоршау ҡыҫып торғандай. Тын алыр әмәл юҡ... Ғәҙелһеҙлек, баш-баштаҡлыҡ атлаған һайын... Хөкөм эйәләре, хатта хан үҙҙәренең аяуһыҙ сәйәсәтенә минән хуплау ишетергә теләнеләр, мин иһә уларҙың һәр ғәмәленә йә ризаһыҙлыҡ белдерҙем, йә икеләнеп ҡараным.

Мәүләнә Исхаҡтың башы эйелде.

— Шулайҙыр тигәйнем дә! — тине уйсан төҫтә. — Әҙәми зат яратылғандан бирле бер үк хәл. Хәбәрең барҙыр, боронғо Юнан иленең көллө ғәләмгә билдәле данышман фәйләсуфы Сократ та: “Мин һәр эште, һәр фекерҙе зиһенем бизмәнендә үлсәп ҡарайым, сөнки ышаныуҙан алда икеләнеүем йөрөй”, — тигән икән. Шуға күрә, баяғы, хөкөм эйәләре унан ҡурҡандар ҙа

[8]Зыяфәт – һый, һыйлау.
[9]Мәүләнә – ғалимдарға, күренекле әҙиптәргә олоҡлап өндәшеү һүҙе.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 130 29.07.02, 17:42

инде. Йәнәһе, халыҡ күңеленә ҡотҡо һала!

— Эйе, үҙ ҡумыҙҙарына бейетә алмағастар, ағыу эсереп үлтергәндәр уны... — тип Сәйф Сараи унының һүҙен ҡеүәтләне. — Рухи азатлыҡҡа ынтылған күпме аҡыл эйәһе, күпме бөйөк шағир ҡанһыҙ батшаларҙың ҡәһәренә юлыҡҡан...

## 7

Дивандағы хеҙмәте дин, иманәхлаҡ даирәһенә бәйле булғанлыҡтан, Сәйф Сараи мөфти идараһындағы рәсми кәңәшмәләрҙә лә, төрлө әңгәмәләрҙә лә ҡатнашырға тейеш ине. “Изге динебеҙҙең абруйлы ғалим-ғөләмәһе менән гәп-зәнәм[10] ҡылып, уларҙың дана һүҙен тыңлап, иманыңа ҡеүәт табырһың”, — тип хәҙрәт быны ипләп кенә талап итә ине хатта.

Дин әһелдәренең әңгәмәһе үҙенә башҡа. Ҡайҙа бында шағирҙар ҡорондағы иркенлек, алсаҡлыҡ, ғибрәтле ҡиссалар, көләмәстәр һөйләп көлөшөү, ихлас өлфәтселек. Ислам белгестәре, бер-береһенән шикләнгән һымаҡ, сиселеп бармайҙар, олпатлыҡ һаҡлайҙар.

Улай ҙа Ҡөрьән Кәримдең айырым сүрәләре йәки хәдистәр тураһында мөхәкәмә[11] ҡылғанда бәхәс тә ҡубып алғылай. Ни өсөн тигәндә, динселәрҙең һәр ҡайһыһы үҙ мәҙһәбенең ҡараштарын алға һөрә.

Мөфти идараһы эшмәкәрлегенең мөһим өлөшөн фикх мәсьәләләре биләй. Уларҙы сөннә[12] нигеҙендә хәл итеү, тайпылыштарға юл ҡуймау фарыз булғанлыҡтан, был осрашыуҙарҙа факихтар[13] күберәк һөйләй.

Ҡөрьәндә, сөннәлә билдәләнгән ҡәтғи фарыздарҙы аңлау-аңлатыу фекер айырымлығы тыуҙыра ла инде. Фикх күрһәтмәләренең нисек үтәлеүе, мосолман кешеһенең әҙәпәхлаҡ ҡағиҙәләренә тоғролоғо, вакуф милкенең ниндәй маҡсаттарҙа сарыфланыуы кеүек мәсьәләләрҙе һәр мәҙһәб үҙенсәрәк изаһлай.

Теге йәки был төшөнсә буйынса килеп тыуған ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы дөйөм ҡағиҙә кимәленә еткереү — мөфти идараһының төп бурысы. Был вазифаны хәҙрәт үҙе атҡара. Баш сәркәтиб булараҡ, Сәйф Сараи әңгәмә барышында әйтелгән фекерҙәрҙе, яҙып алып, бергә туплай, шулар нигеҙендә, дәүләт ойошмаларына, мәсет имамдарына, ҡазыйҙарға, мәҙһәп шәйехтәренә таратыласаҡ фәтүәнең[14] тәүге нөсхәһен әҙерләй. Мөфти хәҙрәт уҡып, төҙәтәһе ерен төҙәтеп хуплағас, фәтүә ҡанун көсөнә керә.

Башҡарған вазифаһына бәйле мәғлүмәттәрҙе үҙләштереүҙән тыш, шағир бындай һөйләшеүҙәр ваҡытында күренекле кешеләр менән танышыу мөмкинлегенә ирешә.

Уны, айырыуса, Шәреҡ илдәренең барса мәғлүмәтле мосолман әһеленә билдәле, Аурупаның арҙаҡлы ғалимдары хөрмәт иткән Ибн Һалдун менән осрашыу ҡыуандырҙы.

Дәмәшеҡтән әл-Искәндәриәгә юл тотҡанда танышып, дуҫтарса мөнәсәбәткә ингән илгиҙәр ғалим Аурелоның: “Һин уны, бәлки, күрерһең әле. Ҡаһирәгә йыш килеп йөрөй ул, — тигәне ысынға сыҡты ла баһа!” — тип бер ғәжәпләнде, бер кинәнде шағир.

Данлыҡлы ғалимдың “Ғәрәп, фарсы, бербер һ.б. халыҡтар тарихынан ғибрәтле миҫалдар” тигән китабын, ҡарт дәрүиштән алып тороп, Сарайҙа саҡта уҡ уҡығайны инде ул. Ә Ҡаһирәгә килеп урынлашҡас, Ибн Һалдундың тағы бер ғәжәйеп әҫәрен уҡыу бәхетенә ирешә.

Был китап аҙна буйы кистәрен унның ҡулынан төшмәне.

“Әл-Мөҡәддимә” — йәғни инеш. Эш былай икән. Төп әҫәрҙә бәйән

---

[10]Гәп-зәнәм – әңгәмә, һөйләшеү.

[11]Мөхәкәмә – тикшереү, фекер алышыу.

[12]Сөннә (ғәр. юл, миҫал, үрнәк) – Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең эшмәкәрлегенә, әйткән һүҙҙәренә нигеҙләнеп, барса мосолмандар өсөн үрнәк итеп ҡабул ҡылынған төшөнсәләр. Улар хәдистәрҙә беркетелгән.

[13]Факих – фикх нигеҙендә хөкөм эштәрен алып барыусы белгес, мосолман юрисы.

[14]Фәтүә – фикх талаптарына, шәриғәт ҡанундарына бәйле мәсьәлә буйынса мөфти йәки факихтар тарафынан яһалмыш йомғаҡлау, күрһәтмә.



**Р. Хәнәфин һүрәте**



04.2002 2 ÷àñòü.p65 132 29.07.02, 17:42

ителгән тарихи ваҡиғаларҙы ентекле тикшереп, изаһлап, ғалим бында донъя хәлдәренең, күренекле шәхестәр эшмәкәрлегенең ижтимағи айышын, фәлсәфи нигеҙен юллай. Ерле — ерендә тигәндәй, ул төрлө ҡәүемдәрҙең йәшәйеш рәүешен, ыҙан-йолаларын тәбиғи мөхит йоғонтоһона бәйләп аңлата. Ә теге йәки был илдәге дәүләт төҙөлөшөнөң үҙенсәлектәрен, мәҙәниәттәге үҫеш кимәлен йәмғиәттә ҡабул ителгән хеҙмәт бүленешендә, иҡтисади алыш-биреш хосусиятында күрә.

Ибн Һалдундың мәғриб илдәре тарихына бәйле фекерҙәре айырыуса ҡыҙыҡлы күренде Сәйф Сараиға. Улар Африка ҡитғаһының төньяғында йәшәүсе ғәрәп халҡының ислам динен ҡабул иткәнгә тиклемге үк бер нисә быуатлыҡ үтмешен күҙ алдына баҫтыра.

Шағирҙың үҙ халҡының ошондай яҙма тарихы юҡ ине әле. Ул башлыса дастандар, хикәйәт-риүәйәттәр, парсалар рәүешендә һаҡланған.

Дөрөҫ, халыҡ хәтере күпте һыйҙыра, ләкин ул ҡайҙалыр яңғыраған тауыштың үҙенә түгел, шаңдауына ғына оҡшаған.

Ҡана инде булған сығанаҡтарҙы ентекле өйрәнеп, бергә туплап, төркиҙәр тарихын яҙырлыҡ уҡымышлы кеше табылһа? Юғиһә, быуат артынан быуат үтеп, боронғо ваҡиғаларҙың, илде иңенә күтәргән күренекле шәхестәрҙең онотолоуы бар. Ә оноторға ярамай. Тарих — изгелек менән яуызлыҡтың, хаҡ менән ялғандың мәңгелек көрәшен сағылдырыусы көҙгө, тиҙәр бит.

Ҡытай шағиры Ли Боның “Алыҫтағы яҡын”, тигән хикмәтле һүҙе бында ла мас! Алыҫ ата-бабаларыбыҙҙың нимәгә инаныуын, ҡыуаныуын, ниндәй фажиғәләр кисереүен белеү — бөгөнгө көн өсөн әһәмиәтле. Уларҙың тормош тәжрибәһе киләсәк быуындарға һабаҡ та, киҫәтеү ҙә... Шулай фекер йөрөттө Сәйф Сараи, Ибн Һалдунға көнләшә биреп.

Фәлсәфә мәсьәләләре менән махсус рәүештә шөғөлләнгәне юҡ ине Сәйфтең. Улай ҙа мәҙрәсәлә уҡыған йылдарҙа ла, аҙаҡ Сарай ҡалаһының уҡымышлылары ҡорондағы әңгәмәләр барышында ла бөтә донъяға билдәле бөйөк фәйләсуфтар тураһында ишеткәйне инде. Йөмләнән, боронғо Юнан иленең мәшһүр аҡыл эйәләренән Сократ, Аристу, Әфләтун[15] исемдәре уға таныш ине. Уларҙың иң мөһим хеҙмәттәре уҙған быуаттарҙа уҡ ғәрәп теленә тәржемә ителгән булған. Шуларҙың ҡайһы берҙәрен уҡығайны ла инде ул.

Ә шәреҡ фәйләсуфтарынан әл-Фараби, Ибн Сина[16], Ибн Рушд унын иғтибарын йәлеп итте. Ул, айырыуса ҡыҙыҡһынып, Ибн Синаның “Табиблыҡ фәненең ҡануны” тигән китабын уҡып сыҡты. Әммә был ике ғалимдың дин менән донъяуи ғилемдәрҙе бәйләргә ынтылыуына сәйерһенеп ҡараны. Әл-Фараби хеҙмәттәренән иһә, мөкиббән китеп, бөтә яҡлап камил йәмғиәт тураһындағы китапты уҡыны.

Әл-Фараби фекеренә эйәреп, йәшлегендә ул, илдә уҡымышлы фәйләсуф-хөкөмдар идара итһә, ғәҙелһеҙлек, баш-баштаҡлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ хөкөм һөрмәҫ ине, тип уйлай торғайны. Бер ҡатлы булған инде, боронғо ғалимдың хыял итеп яҙғандарын ысынға алған, наҙан батшаларҙы, халыҡты талаусы иманһыҙ түрәләрҙе кинәйәләп тәнҡитләүен аңламаған.

Байтаҡ ваҡыт уҙғас ҡына, донъяға ҡарашы үткерләнеп, ул әл-Фараби фекерҙәренең ғибрәтле ҡиссаларға йомолған хәҡики мәғәнәһен төшөнә алды. Быға, берҙән, илдең елеген ҡоротоусы баш-баштаҡлыҡты, халыҡ тормошоноң мөшкөллөгөн күреү сәбәп булһа, икенсе яҡлап, үҙ яҙмышындағы һиңкеткес боролоштар шағирҙың күҙен асты. Унын, ғәзиз ватанынан айырылып, “үҙгә йорт”ҡа сығып китеүе лә ана шул ауыр кисерештәрҙең һөҙөмтәһе түгел инеме ни?..

---

[15]Аристу, Әфләтун – Аристотель, Платон – Шәреҡтә шулай аталғандар.

[16]Ибн Сина (Әбу Али әл-Хөсәйен Ибн Абдаллаһ Ибн Сина; европаса Авиценна, 980-1037) – мәшһүр табиб, философ, шағир.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 133 29.07.02, 17:42

һағыныу-һарғайыуҙары ни тиклем көслө булмаһын, сараһыҙҙан Ҡаһирәгә килеүенә, юғары мансабҡа ирешеп, мәғрифәтле, күренекле кешеләр даирәһендә урын табыуына ҡәнәғәтлек кисерерлеге бар ине шағирҙың. Өйләнгән һайын Аллаһы тәғәләгә рәхмәт уҡып, ул: “Фәрештәләрҙең амин тотҡан ваҡытында юлға сыҡҡанмын”, — тип ҡыуанды. Әле бына Мәғрибитәге Тунисия иленән илсе булып килгән бөйөк ғалим Ибн Һалдун унаң менән яҡындан танышыу теләге белдерҙе.

Йомошсо килеп саҡырғас, ысынмы был тигәндәй, Сәйф бер мәлгә аҙап ҡалды. Ябай кеше түгел бит инде Ибн Һалдун. Данлыҡлы аҡыл эйәһе булыу өҫтөнә, ул төрлө илдәрҙең батшаларына, солтандарына яҡын тороусы, уларҙың үҙ-ара элемтәһенә булышлыҡ итеүсе дәүләтсәйәсәт эшмәкәре лә. Мөфти идараһындағы бер мәжлестә танышҡайнылар танышыуын, әммә шағир ҡабат осрашыуға иҫәп тотмағайны.

Дәрәжәһенә күрә, Ибн Һалдунға иң мәртәбәле ҡунаҡтар туҡтала торған ҙур, зиннәтле һарай бирелгән. Илселектең бөтөн ағзалары шул бинала урынлашҡан. Улар йәмғеһе иллеләп кеше икән. Илселәр каруанын юлда йөҙ яугирҙән торған һайланма алай ҡурыҡлап йөрөүе лә билдәле ине.

Ҡапҡа төбөндәге ҡоралы һаҡсылар янынан үтеп, болдорға аяҡ ҡуйып өлгөрмәне Сәйф Сараи, ишектән Ибн Һалдун үҙе килеп сыҡты ла:

— Хуш килдең, хөрмәтле шағир! — тип йылмайып, уны ҡыуанып ҡаршы алды.

Сәйф унаң “шағир” тип өндәшеүенә ғәжәпләнеп ҡуйҙы, сөнки мөфти уны Ибн Һалдун менән идараның баш сәркәтибе, йәғни дин хеҙмәтендәге кеше сифатында таныштырғайны. Кейеме лә бүтән руханиҙарҙың өҫ-башына оҡшаш, әңгәмә барышында һөйләгән һүҙҙәре лә шәриғәт ҡанундарына бәйле. Сәйфтең төп шөғөлө шиғриәт булыуын Ибн Һалдун аҙаҡ белеп алғандыр. Тимәк, битараф түгел уға, ҡыҙыҡһынған.

— Һинең төрки ҡәүемдәрҙән икәнлегеңде ишеткәс, ғәрәп телен камил белеүеңә таң ҡалдым! Ә мөфти хәҙрәт диванындағы әңгәмәлә һөйләгән һүҙҙәрең, айыҡ фекерҙәрең һиңә хөрмәтемде арттырҙы, — тип Ибн Һалдун уны маҡтап бөтә алманы.

— Кисерә күр, тәҡсир, белеүеңсә, мин дин кешеһе түгел, ни бары дивандың сәркәтибемен, — тине Сәйф, ғалимдың ни әйтергә теләүен аңларға тырышып.

— Миңә, һинең унда һөйләгән һүҙҙәреңдең ҡарамаҡҡа ябайлығы, шул уҡ ваҡытта урыны менән кинәйәле, хикмәтле булыуы оҡшаны. Ә бүтәндәрегеҙҙең теле үтә ҡоро, һутһыҙ...

— Һуң бит, тәҡсир, диванда сөннә, шәриғәт, фикһ мәсьәләләре тикшерелә, улар ябайлаштырып һөйләүгә бигүк юл ҡуймай. Мәғлүм ки, һәр төшөнсәнең дин ғилемендә ҡабул ителгән аныҡ мәғәнәһе, үҙ даираһы-сиге бар.

— Шулай, шулай, дөрөҫ әйтәһең. Ә һин ул сиктәрҙә бикләнмәйһең шикелле, ә? Телмәреңде ҡыҫҡа-ҡыҫҡа мәҫәлдәр, ҡиссалар менән йәнләндереп ебәрәһең. Ғөләмә быны нисек ҡабул итә?

— Нисек тип... Моғайын, минең үҙҙәре кеүек ғалим түгеллегемә ташлама яһайҙарҙыр. Ризаһыҙлыҡ белдергәндәре юҡ.

— Ташлама түгел был! — тип Ибн Һалдун ҡәнәғәт төҫтә һаҡалын һыйпаны. Улар һинең шағирлығың алдында баш эйәләр. Шулай булырға тейеш тә! Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәлиәссәләм дә — исеме мөбәрәк булһын унаң! — шиғри һүҙҙе хөрмәт иткән.

— Ғәфү ит, мәүләнә, һин бит минең ниндәй шағир икәнлегемде белмәйһең. Быға дәғүәм дә юҡ, сөнки мин төркисә яҙышам, — тине Сәйф тыйнаҡ ҡына.

— Яңылышаһың! Беләм! Төрки телендә уҡый алмайым, унаһы хаҡ. Мәгәр бер нисә ғәзәл-ҡасидәңде ғәрәпсәгә тәржемә яһатып алғайным. Танышмаҡ өсөн... Һоҡланғыс шиғырҙар! Бынауһын ғына уҡып ҡарайыҡ, — тине лә Ибн Һалдун, өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙҙарҙан береһен алып, көр тауыш менән илһамланып уҡырға кереште.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 134 29.07.02, 17:42

Сэйф иһә үҙ шиғырының ғәрәп телендә матур яңғырауына һоҡланыуын йәшермәне:

— Һәйбәт тәржемә ителгән, — тип ҡуйҙы.

— Мөфти хәҙрәт диванында һөйләгән һүҙҙәреңә бүтәндәрҙең илтифаты тураһында тип тә аңлайым мин был мисраларҙы. Ә һин ташлама тиһең! Ғөмүмән, кем менәндер әңгәмә ҡораһың икән, уны бүлдермәйенсә тыңлау лазым. Был фекерең миңә бик тә оҡшай. Юғиһә белеме һай, зиһене бикле ҡайһы бер бәндәләр мин инанған, алға һөргән тәғлиматтең мәғәнәһен аңламайынса, тәнҡитләп маташа... Ҡана, ошо шиғырыңды үҙ телеңдә уҡып күрһәт әле. Нисек яңғырауын ишеткем килә, — тип үтенде ғалим.

— Рәхим ит, мәүләнә! — тине Сэйф тауышын баҫыбыраҡ, шул уҡ ваҡытта һәр һүҙҙе асыҡ итеп, уҡырға кереште:

Мәжлестә ултырған ир һүҙенең,
Бел, башы булғас, аҙағы ла бар.
Һүҙ башлаһа әңгәмәлә бер ир,
Уны бүлеп һүҙ ҡыҫтырма, зинһар.
Һүҙен әйтһен унда һәр белекле,
Шым ултырһын шул саҡ
барса көфтар[17].

Һүҙҙәрҙең, мисраларҙың, бер-береһен ҡеүәтләп, алҡынып ағышына, ҡафияларҙың яңғырашына һоҡланып тыңланы ла Ибн Һалдун, харап теремекләнеп:

— Ниндәй яғымлы, матур тел! — тип һүҙгә мауығып китте. — Минең тәғлимәт күҙлегенән ҡарағанда, моғайын, был тел тыуған илеңдең тәбиғәтенә, халҡыңдың уйлау-фекерләү рәүешенә тамырлана бит инде. Үкенес, йәшлектә өйрәнмәгәнмен, ә хәҙер һуң инде...

— Аңлайым, хөрмәтле ғалим, һин, ысынлап та, "Әл-Мөҡәддимә" аталмыш китабыңда яҙғандарыңды раҫларҙай тағы бер миҫал күрһәң төркиҙәр телендә, дөрөҫмө?

— Рәхмәт, шағир, уҡыған икәнһең ул китапты! — Ибн Һалдун уға түбәнселек менән баш эйҙе. — Йәл, миңә мәғлүм түгел, һеҙҙең яҡтарға барып еттеме, юҡмы минең әҫәрҙәр?

— Етмәй буламы! Бынан нисәмә тиҫтә йыл элек, Сарай ҡалаһында мәҙрәсәлә шәкерт сағымда уҡ, мин һинең ғәрәптәр тарихына арналған китабыңды уҡығайным. "Әл-Мөҡәддимә"не иһә Ҡаһирәгә килгәс уҡып сыҡтым. Күп нәмәгә күҙем асылды. Әммә, йәшермәйем, ҡайһы бер фекерҙәрең йә бигүк аңлашылманы, йә икеләнергә мәжбүр итте. Ҡабат осрашырға насип булһа, уртаға һалып асыҡларбыҙ, бәлки бәхәсләшербеҙ ҙә әле, — тип Сэйф көлөп ебәрҙе.

— Мин әҙер! — тине ғалим да, ихлас йылмайып.

— Бына һин, мәүләнә: "Дәүләт — өй түгел, ағас ул. Уны төҙөргә түгел, үҫтерергә кәрәк. Ә дәүләт башлығы, йәғни батша, хан, ташсы булыуҙан бигерәк, баҡсасы булырға тейеш", — тигәнһең. Минеңсә, был фекерең бәхәслерәк кеүек.

— Ни әйтәйем... Уйлай-уйлай, бәлки, уның кинәйәһен аңларһың әле, ә?

— Тырышып ҡарармын, — тине Сэйф Сараи ғалимдың кәйефен боҙмаҫ өсөн.

Осрашыуҙан икеһе лә ҡәнәғәт булып, йылы хис менән хушлаштылар.

Ләкин ҡабат күрешергә яҙманы уларға. Аранан өс көн уҙғанда, Ибн Һалдундың ашығыс рәүештә үҙ иленә ҡайтып китеүе мәғлүм булды.

Сэйфтең аҙаҡ, дәүләт-сәйәсәт эшендәге таныштарынан ишетеүенсә, Тунисия хөкөмдары Ибн Һалдунға шикләнеп ҡарай башлаған. Хыянатсылыҡта ғәйепләнеп, язаға тарттырылыу хәүефе лә бар икән.

Был хәбәрҙән башы шаңҡып, шағир мотлаҡ Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди әмирҙе күреп һөйләшергә ҡарар итте.

— Тынысһан, хөрмәтле аға! Башынан бер бөртөк сәсе лә төшмәҫ ғалимдың,— тине Ғилметдин әмир, шағирҙың борсоулы хәбәрен сабырлыҡ менән тыңлап бөткәс. — Тунисиялағы боларыш беҙгә билдәле. Унда фетнә ҡубырға тора, солтанға ҡаршы төркөмдәр баш ҡалҡыта башлаған. Ибн Һалдунды шулар яҡлы тиҙәр икән.

---

[17]Көфтар – әңгәмәлә ҡатнашыусы кеше.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 135 29.07.02, 17:42

— Тимәк?..

— Кем яҡлы булһа ла, ул ғәҙеллеккә хыянат итмәҫ! Шуны күҙ уңында тотоп, беҙҙең солтан бойороғо менән Тунисияға илселәр китте. Ғалимды Ҡаһирәгә ебәреүҙәрен талап иттек. Яҡшылыҡ менән күнмәһәләр, эште ҡорал көсө хәл ҡылыр! — тип Сәйфте оҙатып ҡалды әмир...

Ләкин Мысыр солтанының илселәре һуңлаған булып сыҡты. Ибн Һалдундың ышаныслы тарафдарҙары, эштең хәтәр йүнәлеш алыуын күреп, уны йәшерен рәүештә әл-Жизаир[18] тарафтарына күсерергә ҡарар иткәндәр.

Күп йылдар уҙғас, Ҡаһирәгә килеп, ул ғүмеренең ахырынаса ошонда йәшәйәсәк, фән-ғилем юлында яңы үрҙәрҙе яулау менән бергә, дәүләт эштәрендә лә юғары вазифалар биләп, тағы ла ҙурыраҡ абруй ҡаҙанасаҡ әле.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Сәйф белмәҫ инде быларҙы. Белмәҫ, сөнки донъянан үткән булыр...

* * *

Тыуған иле менән элемтәһе өҙөлгәйне шағирҙың. Һирәкләп Мысырға килеп сыҡҡан ҡасаҡ мосафирҙар ауыҙынан ишетелгән хәбәрҙәр һөйөнөстән бигерәк көйөнөс өҫтәй. Шуларҙың һүҙенән Сәйф Сараи ҡотолғоһоҙ һығымта яһаны: Алтын Урҙаның хәле мөшкөл. Күпме ваҡыттан бирле алыҫ-яҡын илдәрҙе ҡан ҡалтыратып торған ҡеүәтле мәмләкәттең ҡояшы байып бара. Тарҡаулыҡ, уҙамталлыҡ, улустарҙың хан хакимлығынан ҡотолоп, ситкә һибелергә хәрәкәт ҡылыуы дәүләттең иҡтисадын ҡаҡшата, халыҡты бөлгөнлөк упҡынына этәрә.

Бының өҫтөнә, Урҙаға Аҡһаҡ Тимурҙың баҫымы көсәйгәндән-көсәйә икән. Хәбәрҙәрҙең иң дәһшәтлеһе — гөрләп ултырған Хажитархан ҡалаһы баҫып алынып, ер менән тигеҙләнгән, халҡы ҡырылған, иҫән ҡалғаны ҡоллоҡҡа дусар ителгән.

Күренеп тора, үҙен "Ислам ҡылысы" тип иҫәпләүсе айбарлы яугир Тимур бының менән генә сикләнмәйәсәк. "Алтын Урҙаны тамам ҡыйратырға, ер йөҙөнән юҡ итергә бил быуған ул. Беҙҙең Сәмәрҡәндтән ҡайтҡан йәшерен йөргөнсөләрҙең һөйләүенә ҡарағанда, Тимур Туҡтамышҡа ҡаршы һуғышҡа әҙерләнә", — тип Ғилметдин әмир ҙә борсолдо.

Тыуған иленең өҫтөнә ябырыласаҡ ғәрәсәтле дауыл шағирҙың ҡайғыларын яңыртып ебәрҙе. Таланған, тамам көрсөккә терәлгән бәхетһеҙ халыҡтың ҡара яҙмышын уйлап һуғылды ул. Ҡарт шәйех Абрар, уның тоғро мөриттәре ни күрә? Гөләндәм бикә имен-һау ҡотолормо дәһшәтле ваҡиғалар бөтөн ил менән бергә Сарай ҡалаһын да аймап алһа?..

Ҡаһирәгә килгәне бирле ул әллә нисә хат яҙҙы Гөләндәмгә, ләкин бер-икеһен генә ебәрә алды, сөнки Мысырҙан Иҙел буйҙарына уҡ төбәп китәһе каруандар юҡ. Улар, башлыса, Дәмәшеҡкә, Таһранға, хатта Һиндостанға йөрөй. Әгәр ҙә шулар алып киткән хаттар караптарҙа Хазар диңгеҙе аша Иҙелгә сығаһы сауҙагәрҙәр ҡулына эләкһә, Сарайға ла барып етерҙәр ине лә бит, быға ла ышаныс әҙ. Яу ҡубырға торған илгә каруандар әллә йөрөй, әллә юҡ.

Ни ҡылһын шағир. Хаттарҙың елгә осҡан япраҡ кеүек булыуын белһә лә, өмөтләнә. Улар ҡарт шәйехкә исемләнә. Барып юлыҡһалар, ул Гөләндәм бикәгә тапшырыу әмәлен табыр, иншалла.

Хаттар китә торҙо, ләкин береһенә лә яуап булманы. Уның ҡарауы, алама хәбәрҙәр йыш ишетелде. Ураү-ураү юлдар үтеп, Ҡаһирәгә килеп сыҡҡан илгиҙәр дәрүиштәр, тынғыһыҙ йөргөнсөләр, Урҙалағы боларыштар тураһында уны-быны һөйләп, шағирҙы утҡа һалды.

Ул йыш ҡына: "Ҡартайған көнөмдә үҙ илемдә йәшәһәм, һис юғы, тыуған тупрағым ҡуйынына ерләрҙәр ине..." — тип уйлап ҡуя. Боронғо Чин шағиры дөрөҫ әйткән: "Йыраҡтағы — яҡын..." Йәнгә яҡын! Ләкин ҡайта алмаҫ инде, баҡый донъяға ошонан китер. Берҙән-

[18]Әл-Жизаир – Алжир.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 136 29.07.02, 17:42

бер йыуанысы шул: йәне тыуған илдән айырылмаҫ. Йөрәгенән ҡайнап сыҡҡан һағыныу хистәре, шиғырҙары ғәзиз халҡына әйләнеп ҡайтһа, бөтәнен хыял итеү мөмкин дә түгел. Ошоһона шөкөр...

Улай ҙа бер хат килеп юлыҡты уға, ниһайәт. Уны Сарайҙағы ҡарт шәйехтең мөрите килтереп тапшырҙы.

Хаттың: “Хөрмәтле шағир, был мәктүбте Таһран ҡалаһынан яҙам...” — тигән тәүге юлдарын уҡыны ла Сәйф, йөрәге урынынан ҡубып, хатты ҡуйынына тыға һалды.

“Ниңә Таһрандан, Сарайҙан түгел?!” тигән һорауы яуапһыҙ ҡалды, сөнки хат килтергән дәрүиш сығып киткәйне инде.

Шәйехтең Таһранға килеүе Сәйфтең күңелен шомландырҙы. Ирекленән алыҫ юлға сығып китәме ни һикһәнгә етеп килгән ҡарт? Иң тәүҙә ошоно белергә кәрәк...

Абрар шәйехтең хаты ҡыҫҡа ине. Юлдарҙың, хәрефтәрҙең бигүк тигеҙ түгеллегенән уның ашығыс яҙылыуы күренеп тора. Быны шәйех үҙе лә иҫкәрткән: “Хатты һиңә ирештерәсәк хәбәрсем бына-бына юлға сығасаҡ каруанға барып ҡушылырға тейеш. Яҙып өлгөрмәгән һүҙҙәремде ул телдән әйтеп бирер...”

Сарай һанаттарының яман күҙенә эләгеүе, ханаҡа тирәһендә шымсылар өҙлөкһөҙ йөрөп тороуы арҡаһында сит илгә китергә мәжбүр булыуын белдергән шәйех. Бүтән хәбәре юҡ. Тимәк, юламан дәрүиште ҡабат күреп һөйләшергә кәрәк.

Исрафил шәйехтең мөриттәре уны бик тиҙ эҙләп тапты. Дәрүиш ханаҡала урынлашҡайны.

Шағир янына килгәс, ул аяғын бөкләп ишек төбөндәрәк ултырҙы ла:

— Мөхтәрәм аға, һин ишетергә теләгән хәбәрҙәр үҙеңә мәғлүм пирем[19] шәйех Абрарҙың мәктүбендә бәйән ителгәндер, — тип күҙен ситкә күсерҙе.

— Улай ҙа... ҡыйынһынмаһаң, ил хәлдәрен, шәйехтең ни сәбәптән Сарайҙан китеүен ентекләберәк һөйләп бир инде, энем. Юғиһә хаты үтә ҡыҫҡа уның. Бөтәнен төпсөнмәм.

Дәрүиштең башы эйелде.

— Ни ҡылайым, — тине икеләнеберәк, — һүҙ башлағас, үҙең әйткәнсә, бөтәнен дә һүтергә тура килер инде... Илдең хәле үтә сетеркле, ағай. Бола-фетнә ҡуйыра. Хан әмере менән бер-ике улустың башлыҡтары язалап үлтерелде, ләкин бынан тыныслыҡ килмәне. Киреһенсә, боларыш көсәйҙе генә... Ә иң ҡурҡынысльһы — Алтын Урҙаны бына-бына Тимур батша ғәскәре баҫып аласаҡ, тигән хәбәр таралды. Бәлки ишеткәнһеңдер, былтыр ҡыш ул Хажитархан ҡалаһын тармар итте.

— Ишеттем, ишеттем, — тине Сәйф ҡайғылы төҫтә баш сайҡап. — Ниндәй күркәм ҡала ине!

— Эйе. Бигерәк тә ундағы мәшһүр мәҙрәсә йәл. Уның данлыҡлы хужаһы, мөдәррисе Сәләхетдин хәҙрәт тә вафат икән.

— Миңә уны күрергә яҙманы. Ә атаһы хәтеремдә. Мин уҡып йөрөгән йылдарҙа Сарай мәҙрәсәһен ана шул хөрмәтле ғалим тота ине. Донъяуи ғилемдәрҙе уҡытыуға артыҡ күп иғтибар итә, тип тындырмай башлағастар, Хажитарханға күсеп киткәйне... Хәҙер шуныһын әйт, яҡташ... Хәбәрең булһа инде... Минең бынан ебәргән хаттарым шәйех хәҙрәткә етеп юлыҡты микән?

— Берҙән-бер хатыңды алды ул. Бик ҡыуанды һинең Ҡаһирә күренеклеләре ҡоронда урын табыуыңа. Ә, кисерә күр, шул төргәктәге икенсе хатты тейешле кешеһенә ирештерергә һуңланыҡ...

— Нисек һуңланығыҙ? Сәбәбе барҙыр бит инде быны? — тип Сәйфтең ағарынып китеүенән дәрүиштең тыны ҡыҫылғандай булды.

— Уф, Алла, — тине башын күтәрергә ҡыймайынса. — Был вазифаны өҫтөмә алмаҫҡа инем дә бит, ни ҡылайым... Ул кеше... эйе... мөхтәрәм бикә донъянан үткән булып сыҡты шул, мәүләнә. Аҙаҡ ҡына белдек.

[19]Пир – дини мәҙһәб етәксеһе.



04.2002 2 ÷àñòü.p65 137 29.07.02, 17:42

Өҫтөнә тау ишелеп төштөмө ни шағирҙың. Башы шаңҡып, күҙ алды ҡараңғыланыуҙан ул баҫҡан урынында сайҡалып торҙо ла йығылып китте. Әлдә дәрүиш йылдам булып сыҡты, уны биленән ҡосаҡлап өлгөрҙө...

Иҫенә килгәндә Сәйф түшәктә ята ине. Янында хеҙмәтсе менән тағы бер ят кеше ултыра.

Был кеше, шағирҙың урынынан торорға ынтылыуын күреп, уны ипләберәк ятҡырҙы ла мөләйем тауыш менән:

— Хәҙергә һиңә ҡуҙғалырға иртәрәк әле, мәүләнә, — тип ҡулын уның уттай эҫе маңлайына ҡуйҙы. — Мин табибмын, Ғилметдин әмир ебәрҙе... Дарыуҙар эсерҙем. Иншалла, үтеп китер сирең, күпкә барһа, бер-ике көндән аяҡҡа баҫырһың, — тине хушлашҡанда.

Табиб көн һайын килеп, ауырыуҙың хәлен белеп торҙо, дарыуҙарҙың төрлөһөн эсерҙе. Башы ебәрҙе-ебәреүен шағирҙың, ләкин ул тороп йөрөрлөк хәлдә түгел ине әле. Табибтың бер-ике көн тигәне аҙнаға һуҙылды. "Сир ботлап керә, мыҫҡаллап сыға", тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр икән.

Дарыуҙарҙың шифаһы тейҙе улай ҙа. Сәйф тәүҙә өй эсендә генә йөрөштөрҙө, әкренләп тышҡа сыға башланы.

Мысырҙың тәбиғәте йомшаҡ. Хатта ҡыш айҙарында ябалаҡлап яуған ҡар ҙа, үҙәккә үтерҙәй һыуыҡтар ҙа юҡ. Килеп-килеп, ямғыр һибәләп уҙа ла, күк йөҙө болоттарҙан әрселә, йылытып ебәрә.

Быҙдай көндәрҙә Сәйф Нил буйында йөрөп әйләнә. Өҫтөндә йоҡа ғына аҡ бурнус, аяғында еңел кәүеш. Сағыу ҡояштан күҙҙәрен усы менән күләгәләп, ул салт-зәңгәр күктән төньяҡҡа осҡан ҡош туптарын эҙләй. Улар, бәлки, шағирҙың тыуған иленә лә барып ҡунырҙар. "Юҡ, барып түгел, ҡайтып..." — тип йылмая ул. Торналар, ҡыр ҡаҙҙары, сыйырсыҡтар, тағы әллә күпмеһе — бөтөнөһө дала киңлектәрендәге ерҙе-ваҡлы йылға-күлдәрҙә тыуып, ҡанат яҙған бит инде. Тимәк, ватандары шунда. "Минең яҡташтар... — ти Сәйф, сылбыр булып осҡан ҡоштарға ҡул болғап. — Улар бәхетле. Үҙ еребеҙҙә оя ҡороп, бала сығарырҙар, үрсерҙәр, түл йыйырҙар...»

Кешеләрҙең ҡанаты юҡ шул. Ни ҡылһын мосафир. Һағына-һарғая, ләкин түҙә, башына төшкәнде күтәрә. Ул инде толҡаһыҙ эсе бошоуға ла күнекте, ахырыһы. Күңеле тулышып, күҙенә йәш эркелеүгә иғтибарһыҙ ҡалып, етмеш йылға яҡын ғүмерендә күргән-кисергән хәлдәрҙе хәтерләй.

"Ҡисмәт... Маңлайға яҙылғанды юйып булмайҙыр. Һәр кем тәҡдир ихтыярында..." — тип үҙен тынысландыра шағир. Гөләндәм менән осрашыуҙарын иҫкә төшөрөп, бер ҡыуана, бер һағышлана. Аяныслы, үкенесле булды уларҙың мөхәббәт байрамы. "Ә бит булды ул, булды! Уның тылсымлы нуры әлегәсә күңелем асманын яҡтырта..." — тип йылмая Сәйф.

Бына, ниһайәт, илһамланып яҙған дастандың иң аҙаҡҡы мисралары ҡағыҙ битенә төшә башланы. Әҫәрҙең уға ярҙам ҡулы һуҙған, илтифат күрһәткән күренекле дәүләтйәмәғәт эшмәкәрҙәренә арналыуын әйтеп, шулар араһында, исемен атамайынса ғына, Ғилметдин Санжар әл-Башҡордиҙы ла күҙ уңында тотто ул: "Кемдән ике исем йәдкәр ҡалһа, үлмәҫ ул ир — унда ошо сифат булһа. Ундай ирҙең эше мулмул емеш бирҙе: Иҫкә алам Мысырҙағы уҡымышлы әмирҙе".

Ә иң аҙаҡта ул, үҙен гөл баҡсаһы үҫтергән баҡсасыға тиңләп, исементәхәллусын белдереп ҡуйҙы: "Бу "Гөлстан" бағбани — ул әдип, Кем Сараи Сәйф ирер, назми ғәрип".

Бер нисә йылға һуҙылған эшен тамамлағас, шағирҙың иңенән тауҙай йөк төшкәндәй булды. Үҙенә тел аҫҡысы биргән Мөслихиддин Сәғди рухына хөрмәт менән мөрәжәғәт итеп, ул шулай фекер йөрөттө: "Йәнең тыныс булһын, бөйөк шағир! Мин һинең дастаныңдан илһам алдым, ләкин уны тәржемә итеп кенә сикләнмәнем, уға үҙ фекерҙәремде лә һалдым, үҙ халҡымдың тел хазинаһы ынйылары менән нағышланым. Мәшһүр "Гөлстан"ың кеүек үк, "Гөлстан бит-төрки" дастаны ла ғүмерле булһын, тип доға ҡылмаҡтамын. Һазаран шөкөр, әҫәрем тамам..."

Ҡулъяҙманы ҡат-ҡат уҡып, төҙәтәһе урындарын төҙәтеп сыҡҡас, Сәйф уны ҡулы оҫта төрки хаттатҡа күсерергә тапшырҙы. Нөсхәләр бер нисә булырға тейеш, сөнки улар кәм тигәндә өс-дүрт кешегә һәҙиә ителәсәк...

## 8

Ҡыш үтә һалҡын, ҡар ҡалын булғанлыҡтан, Урҙа ғәскәренең төп көстәре Иҙел менән Тын йылғаһы арауығындағы киң даланы иңләп ҡышланы. Бында Сарай тирәһендәгенән йылыраҡ, ҡар йоҡа ине. Егерме ике төмәндең аттарын, иҫәпһеҙ-һанһыҙ һуғым малын тибенгелә утлатырға бынан да ҡулай урын юҡ ине. Башҡалаға яҡын ерҙәрҙә иһә ун һигеҙ төмән тоторолдо.

Ҡыш ни тиклем оҙон булмаһын, миҙгелдәрҙең ҡәҙимгесә сиратлашыу тәртибенә ҡаршы тора алманы, яҙ килеп етте. Сағыу ҡояшта ҡар тиҙ үк эреп бөттө, көндәр йылынды, ваҡыт-ваҡыт ҡойма ямғырҙар яуа башланы. Донъя яңғыратып күк күкрәй, һауаны сафландырып йәшен йәшнәй. Күп тә үтмәне, Иҙелдең түбән ағымындағы ерҙәр генә түгел, Сарай ҡалаһының көнсығышында йәйрәп ятҡан уйпат дала киңлектәре лә йәшеллеккә күмелде, мал ауыҙына эләгерлек үлән күтәрелде.

Урҙа тотҡалары быны яҡшыға юраны. Һуғыш ҡуба ҡалһа, яу аттарын көрәйтеп өлгөрөргә, ғәскәр ихтыяжына тотоноласаҡ һуғым малын һимертергә кәрәк ине.

Илдең көньяҡ сиктәренә айырыуса ныҡ иғтибар итте хан. Күпселек ғәскәрҙең Тын далаһында тупланыуы шунан да ине. Хажитархан ҡәлғәһе ҡыйратылғаны бирле, Хазар диңгеҙенең төньяғын күҙ яҙҙырмай күҙәтеп торолдо. Хандың тоҫмалынса, Аҡһаҡ Тимер яуы тап ана шул тарафтарҙан ябырыласаҡ. Күҙәтселәрҙең хәбәренә ҡарағанда, дошмандың эреле-ваҡлы алайҙары ил сиктәренә йыш-йыш килеп сыға икән. Урҙаныҡылар менән бәрелешмәйҙәр, уларҙы күреү менән, кирегә тороп сабалар. Тимәк, күҙәтәләр, сер эҙләйҙәр.

Улай ҙа, менгеһе һөрлөгөп, эйәрҙән ҡолап ҡалған бер сарбазды тоторға ирешә Урҙа күҙәтселәре. Әсирҙең ярлыҡау һорап, ялбарып биргән яуабынан шуныһы мәғлүм булды. Хазар диңгеҙенең көнбайыш ярын яғалап, әмир Тимурҙың бишалты төмәне Иҙел үренә үтмәксе икән. Был алғасҡы ғәскәр генә. Ул Тимер Ҡапҡаны биләп ныҡығас, төп ғәскәр ҙә килеп етәсәк. Йәй баштарында ул һөжүм итергә йыйына шикелле, тип хәбәр итте әсир.

Унын һүҙен ил гиҙеп йөрөгән теләнсе байғоштар ҙа раҫланы. “Ҙур яу килә! Ат тояҡтары аҫтында ҡалмаҫ өсөн, ҡурҡышыбыҙҙан көнөтөнө юлда булдыҡ. Аллаға шөкөр, ҡасып ҡотолдоҡ...” — тип һөйләне улар.

Төмән әмирҙәре ашығыс кәңәшмәгә йыйылып, һиҙгерлекте икеләтә-өсләтә арттырырға, Тимер ғәскәренең юлын киҫергә ҡарар иттеләр. Был сараны хан да хуп күрҙе.

Әсир сарбаздың да, илгиҙәр теләнселәрҙең дә, асылда, Тимурҙың ысын ниәтенән күҙ яҙҙырыу маҡсатында Урҙаға ебәрелгән шымсылар булыуы аҙаҡ беленде-беленеүен, ләкин эш уҙғайны инде. Дәһшәтле йәшен көтөлмәгән тарафтан килтереп һуҡты...

Был хәлдәр алда ине әле. Хан, утарҙан башҡалаға ҡайтып, Иҙел үрендәге, Сулман бөгөлөндә ҡышлаған төмәндәрҙе Сарай тирәһендә туплау, хәрби уйындар үткәреү менән мәшғүл булды. Тап ошо мәлдә Литва кенәзе Витовттың илселәре килеп төштө.

Хәйләгә оҫта Витовт кенәздең ниәте сер түгел ине ханға: ул Мәскәү менән Урҙа араһына шына ҡағырға тырыша. Илселәр, бик белделекле булып: “Урыҫтар һеҙгә ҡаршы һуғышҡа әҙерләнә. Әгәр ҙә был яуыҙлыҡтың алдын алмаһаң, аҙаҡ үкенерһең, бөйөк хан! Кенәз һиңә Литва менән бер төптән эш йөрөтөргә, тиҙ арала Мәскәүҙе тар-мар итергә кәрәклеген иҫкәртә. Урҙа төмәндәре юлға сығыу менән беҙҙең ғәскәр ҙә ҡуҙғаласаҡ”, — тинеләр.

— Көтөгөҙ, ҡунаҡ булығыҙ! Ике көндән яуап бирермен, — тине хан, ишеккә ымлап.

Ҡабат осрашҡанда ул Витовтың тәҡдимен ҡабул итеүен, әгәр ҙә Аллаһы тәғәлә юл ҡуйһа, ошо йәйҙә үк Урҙа ғәскәренең яу башлаясағын әйтеп, илселәрҙе ҡыуандырҙы. Быға өҫтәп:

— Бөйөк кенәзгә минең дә тәҡдимем бар, — тип тегеләр көтмәгәнерәк яҡтан һүҙ асты. — Эш былай, хөрмәтле ҡунаҡтар... Һуңғы бер-ике йылда әмир Тимур менән беҙҙең ара боҙолоп тора. Ышаныслы күҙәтселәр уның Алтын Урҙаға ғына түгел, һеҙгә лә теш ҡайрауы тураһында хәбәр итә.

— Тимәк, бында ла бергә эш итергә тура килә инде, бөйөк хан! Ошо хәлде күҙ уңында тотоп, кенәз беҙгә уның исеменән шулай яуап бирергә бойорҙо ла. Ике мәмләкәттең берләшкән көсөнә ҡаршы тора алмаҫ аҡһаҡ юлбаҫар! — тип илселәр уның күңелен күтәреп, өмөтөн яңыртып китте.

Ә ваҡиғалар айышы хан тоҫмалына тап килмәне. Хәйер, Литва кенәзе Витовт менән осрашасаҡ әле ул. Ләкин Тимурға ҡаршы яуға түгел. Бер йыл да үтмәҫ, хан, вәғәҙәһен боҙған кенәз ҡаршыһында түбәнселек менән баш эйеп, ярҙам һорап баҫып торасаҡ...

* * *

Ҡыш бөтөп барған көндәрҙә, ғәскәрен Ташкент тирәһендә туплап, әмир Тимур Кураган, ғәҙәттәгесә, ҡоролтай үткәрҙе. Һүҙ алдағы барымтаға әҙерлек, уның юҫығын билдәләү тураһында ине. Ғәскәр башлыҡтары төрлө йүнәлеште тәҡдим итеп ҡараны, ләкин Тимур, Дәште-Ҡыпсаҡ далаһын айҡап сыҡҡан йөргөнсөләрҙең хәбәренә таянып, төптө көтөлмәгән юлды һайланы. Сөнки оҙаҡҡа һуҙыласаҡ сәфәрҙә яу аттарын, һуғымға тәғәйенләнгән мал көтөүҙәрен утлатырлыҡ киң туғайлы, мул һыулы йылға-күлдәре күп, ирәүән ерҙәр кәрәк ине.

Яҙ уртаһында ғәскәр алыҫ юлға әҙер ине. Ике аҙнанан йөрөш башланасаҡ. Хәҙергә иһә шымсылар аша тирә-яҡ илдәрҙә: “Бөйөк йыһангир әмир Тимур Кураган Ширван, Гуржистан илдәренә барымтаға юллана. Унан Иҙел һыуының үренә табан хәрәкәт итәсәк”, — тигән ялған хәбәр таратырға бойороҡ бирелде.

Төп көстәр Алтын Урҙа сардарҙары көткәнсә Хазар диңгеҙен яғалап түгел, ә Балхаш күленең көнбайышы аша мең саҡырымдағы Иртыштың һул ярына барып сыҡты. Ашыҡманы Тимур, ҡулай урындарҙа хәрби уйындар үткәрҙе, аттарҙың, мал көтөүҙәренең үләнгә туйыныуын хәстәрләне.

Иртыштан ҡырҡа боролош яһап, Тимур Тубыл йылғаһы үҙәненә етте. Бынан һуң, башҡорт иленең көньяҡ биләмәләрен киҫеп үтеп, Йайыҡты кискәс, Урҙаның башҡалаһы Сарайға тура юл асылды.

Бығаса көнөнә егерме-егерме биш саҡырым атлаған ғәскәрҙең йөрөшө тиҙләтелде, ял, ҡуналҡа сәғәттәре ҡыҫҡартылды.

Дошман яуының көтөлмәгән тарафтан ябырылып килеүен хан һуңлап белде. Шунда уҡ ғәскәрҙе Ҡондорса тигән йылға үҙәнендә тупларға бойороҡ бирелде. Был урын яу ҡайтарырға ла, һөжүмгә күсергә лә бик ҡулай күренде уға.

Хандың үкенесенә, Иҙел түбәнендәге ғәскәр һуғыш башланыуға килеп өлгөрмәҫ ине. Тимурға ҡаршы ошондағы ун һигеҙ төмән ҡуйылды. Был да әҙ түгел. Ләкин Аҡһаҡ әмирҙең әллә нисәмә һуғышта ҡатнашып сыныҡҡан, яҡшы ҡоралланған, сигенеүҙе белмәҫ ғәскәрен һындырыу өсөн, унығынан ике бәрәбәр артыҡ көс кәрәклеге Урҙа сардарҙарына билдәле ине, әлбиттә. Юҡ Сарай тирәһендә ул хәтле ғәскәр.

Тын йылғаһы буйында ҡышлаған төмәндәрҙе ашығыс рәүештә хан урдуғаһына күсерергә бойороҡ алып киткән сапҡындарҙы дошман алайҙары, Иҙел кисеүендә үк аңдып тороп, ҡылыстан үткәрҙе. Тимәк, ярҙам килмәйәсәк. Бының өҫтөнә, тап ошо көсөргәнешле мәлдә, Кесе Сарайҙа оялап ултырған Иҙеүкәйҙең ике төмән менән Тимур ғәскәренә килеп ҡушылыуы мәғлүм булды.

— Ҡәһәр! Тоторға ине ул йыланды! Тоторға! — тип туҙынды хан. — Ҡарауыл төмәнә әмиренә ҡәтғи бойороҡ бирҙе: — Йәшерен шымсылар ебәр аҡһаҡ юлбаҫар ғәскәренә! Кем

ки һатлыҡ Иҙеүкәйҙе тотоп килтереп, алдымда теҙ сүктерһә, сарбаз — йөҙбашы, йөҙбашы — меңбашы дәрәжәһенә үрләтелер. Тиҙләт был эште, әмир!..

Урҙа ғәскәренең Ҡондорса йылғаһы буйында тупланыуын белеү менән, хәл иткес һуғыштың ошо төбәктә буласағын самалап, әмир Тимур үҙ төмәндәренә ике көнлөк ял бирҙе.

Улар бер-береһенән ун биш-егерме саҡырым алыҫлыҡта, өс ташҡын булып, йәнәш килгәйнеләр. Хәҙер иһә был ара ҡыҫылды, ике саҡырымға ҡалдырылды. Ғәскәр күнегелгән тәртиптә алдағы һөжүм йүнәлешендә теҙелгәс, киң даланы иңенә-буйына биләп, меңләгән усаҡтар яна башланы. Бер айға һуҙылған йөрөштән һуң сарбаздар ял итергә, туйғансы ашап-эсергә тейеш ине. Аттар утлауға ебәрелде. Иркенләп йоҡоға талған төмәндәр тирәһендә ҡарауыл ҡушындары ғына йөрөп торҙо.

Ике яҡ та һуғышты башларға ашыҡманы. Хан Тын буйындағы ғәскәрҙең килеүен көттө. Тимер иһә үҙ төмәндәренең әҙерлеген ҡат-ҡат тикшереү менән мәшғүл булды. Бынан тыш ул хандың, түҙемен юғалтып, һөжүмгә күсеүенә, берәй хата ҡылыуына иҫәп тотто.

Ике төн үткәндә тап шулай килеп сыҡты ла: таң мәлендә Урҙа ғәскәренең уң ҡанаты алға ташланды. Шул кәрәк ине лә инде Тимурға. Йәнәһе, ҡойон кеүек ябырылған дошманға ҡаршы тора алмайынса, уның һул ҡанаты сигенә башланы. Урҙаның ике төмәне, ҡасып барған Тимур ғәскәрен уратып алыр өсөн, йылға яғалап ат ҡуйҙы.

Ҡондорсаның һыуы ҡайтһа ла, үҙәне һаман кипшенмәгән һаҙамыҡ ине әле. Урҙа төмәндәренең шунда барып инеүе булды, аттары, ҡорһаҡ аҫтарына тиклем батып, ни алға, ни артҡа китә алмайынса, тыбырсынып ҡалды. Һыбайлы яугирҙәр, ҡыйҡыу-һөрән күтәреп, ҡамсы һелтәп, һәләкәтле ерҙән сығырға күпме тырышмаһын, аттары тағы ла нығыраҡ батты, күбеһе йығылып, баштарын батҡаҡҡа төрттө.

Тимурҙың хәйләле ниәте ғәмәлгә ашты. Ҡорораҡ ергә ынтылған урҙа ҡушындары өҫтөнә уҡ яуа башланы. Был мәхшәрҙән күпмеһе ҡотолғандыр уларҙың.

Тап ошо ваҡыт ҡапыл иҫәпһеҙһанһыҙ дөңгөрҙәр гөрһөлдәүенән донъяның аҫты өҫкә әйләнгәндәй булды. Был дәһшәтле тауышҡа карнайҙар сыйнауы өҫтәлде. Тимур ғәскәре һөжүмгә күсте, тип тағы алданды хан.

Үҙ-ара тынышмаусы яусыл ике батша араһында туҡтауһыҙ дауам иткән бәрелештәрҙең иң дәһшәтлеһе булды был һуғыш. Тарихҡа ул “Ҡондорса һуғышы” тигән исем менән инеп ҡаласаҡ. Ошонда Алтын Урҙаның яҙмышы хәл ителде лә...

Тимур ғәскәренең үҙәк өлөшөндәге йәйәүле ҡушындары ҡабаланмай ғына алға атланы. Урҙа ханы, уларҙы бер ынтылыуҙа тураҡлап ташларға әмер биреп, атлы төмәнде ҡаршы ебәрҙе. Меңләгән аттың тояҡ дөбөрөнә һыбайлы һуғышсыларҙың тамаҡ ярып һөрәнләүе, асы һыҙғырыуы ҡушылды.

Атлы ғәскәр, ҡылыс болғап, дошман сафтарына барып етеү менән, ҡаршыға биш-алты аршынлы һөңгөләр һонолдо. Икенсе рәттәге йәйәүлеләр, алға йүгереп сығып, шундай уҡ оҙон һаплы ырғаҡтар менән урҙа атлыларын эйәрҙәренән һөйрәп төшөрөргә тотондо. Йығылып ҡалғандарын арттан йән-фарман дөрөп килгән яуҙаштарының аттары тапап уҙҙы. Һөңгө ҡаҙалып яраланған, эйәләрен юғалтҡан аттар, ҡайҙа һуғылырға белмәйенсә, аяныслы кешнәшеп, тырым-тырағай тарала башланы. Урҙа төмәненең сафтары боҙолдо. Улар ни алға, ни артҡа китә алманы, күбеһен уҡсылар атып йыҡты.

Йәйәүле ҡушындарҙың алға хәрәкәте Тимурҙың тағы бер хәйләһе ине. Һөжүм кире ҡағылыу менән, дөңгөрҙәрҙең ҡолаҡ тондороп тағы ла дәһшәтлерәк даңғырҙауына буйһоноп, уның һәр ике ҡанаты хан ғәскәрен уратып ала башланы. Урҙа атлылары айбарланып ҡылыс һелтәне, бер нисә урында хатта дошман сафтарына бәреп керҙе. Хандың улы, баш сардары Йәләлетдин хանзада, быны уңышҡа һанап, яңынан-яңы төмәндәрҙе алға эйҙәне. Ҡылыс һуғышы ҡыҙғандан

ҡыҙҙы. Бығаса тынып ятҡан һил даланы яу аттарының тояҡ дөбөрө, ярһып кешнәүе, яраланып йығылған һуғышсыларҙың үҙәк өҙгөс тауыш менән ҡысҡырыуы тетрәтте.

Һаҡлыҡта тотолған ғәскәрҙе һуғышҡа индерергә ашыҡманы Тимур. Улдары-ейәндәре, йәшлектәренә барып, был хаҡта ауыҙ асып өлгөрөүгә уның ялбыр ҡаштары урталай һына. "Иртә!.." — тип екереп, тегеләрҙе шымырға мәжбүр итә тәжрибәле, данлыҡлы әмир. Уға тәүҙә хан төмәндәрен бер-береһенән айырырға, тарҡатырға кәрәк ине. Ана шунда инде өс-дүрт саҡырым артта торған һаҡлыҡ ғәскәр алға ташланыр. Ә үҙәктәге төмәндәр һуғыштың хәл иткес мәлендә генә хәрәкәткә килер.

Тимур ҡалҡыу ерҙә бейек йомшаҡ ултырғыста ултыра. Уның тирәһенә, өс түңәрәк яһап, мең кешелек арсыйҙар алайы баҫҡан. Былар әмирҙең үҙ ырыуҙаштары, барластар. Киң яурынлы, буйсан егеттәр. Ҡоралдары, кейемдәре ялтлап тора. Бөтөнөһөнөң менгеләре — оҙон тороҡло, ҡеүәтле ерән сапҡырҙар.

Ете-һигеҙ саҡырым аралыҡты биләгән яу яланының әле бер, әле икенсе тармағынан туҡтауһыҙ килеп торған сапҡындарҙың хәбәрен тыңлап, әмир Тимур йә хуплау белдерә, йә, асыуын эскә йомоп, ҡәтғи бойороҡ бирә. Ә дөйөм алғанда, ул һуғыштың, тап үҙе тоҫмаллаған тәртиптән тайшанмайынса, дауам итеүенә ҡәнәғәт ине.

Ниһайәт, һәр ике ҡанатта Урҙа төмәндәренең тар-мар ителеүе мәғлүм булды. Тимур иһә хан урдуғаһынан күҙен алманы, ниҙер көттө. Ә унда ниндәйҙер буталыш башланыуын күрергә мөмкин ине. Тарҡалған, сафтары бик ныҡ һирәкләнгән ғәскәр ҡалдыҡтары төрлө яҡтан үҙәккә тартыла. Тимәк, хан, аҙаҡҡы көстәрен бер йомғаҡҡа туплап, хәл иткес бәрелешкә әҙерләнә.

Тимурҙың ҡул болғауына һаҡлыҡтағы алты төмән, икегә бүленеп, хан ғәскәренең үҙәгенә табан ат ҡуйҙы. Һөжүмгә күскән ғәскәр сафында Иҙеүкәй төмәндәре лә бар ине. "Көнөң бөттө, ҡарт юлбаҫар! — тине Тимур, күҙенән ут сәсеп. — Тоторға ине ханды!.."

Бығаса төш еткәнсе ял иткән, аттары арымаған ғәскәргә урҙаныҡылар ҡаршылыҡ күрһәтә алманы, Ҡондорса кисеүенә табан сигенде. Ана шунда инде Тимур үҙәктәге төмәндәрен һуғышҡа индерҙе. Улдары, ейәндәре, айбарланып ҡылыс һелтәп, алға ташландылар.

Көн кисәүләгән мәлдә күк йөҙөн болот ҡаплап алды. Ул да булманы, ялт-йолт йәшен йәшнәп, күк күкрәп, ямғыр яуа башланы.

Хан ғәскәренең ҡалдыҡтары, Ҡондорсаны мең бәлә менән кисеп, Иҙел ярына барып сыҡты. Рухы һынған, ҡото осҡан һуғышсылар далаға һибелде. Күбеһе йәйәүлегә ҡалғайны, байтағы яралы ине.

Даланы аяуһыҙ ҡамсылаған йәшен Алтын Урҙаның биле һындырылыуға ишара иткәндәй ине.

Ғәрәсәтле һуғышта ҡыйратылған ғәскәренән яҙғас, хандың янында бары тик улдары ла, өс меңгә яҡын иң тоғро арсыйҙары ғына ҡалды. Унан-бынан кәмәләр табып, Иҙелдең уң ярына сыҡты Туҡтамыш. Ниәте Тын далаһына етеп, ундағы төмәндәрҙе тиҙ арала Ҡара диңгеҙ буйына күсереү, уларҙы яңы һуғышҡа әҙерләү ине.

"Юҡ, аҡһаҡ илбаҫар, һабағыңды уҡытасаҡмын әле мин һинең!" — тип үҙен ярһытты хан...

Тимурҙың иҫәбе иһә Алтын Урҙаны бөтөнләй үк юҡ итеү түгел, ә үҙ дәүләтенең сураһына әйләндереп, һалым сығанаһы яһау ине. Шуны уйлап, ул Урҙа ғәскәренең далаға һибелеп таралған ҡалдыҡтарын бер урында туплау хәстәрен күрҙе. Йәрәхәтле сарбаздарҙы табибтар дауаларға кереште, һауҙарының ҡоралдары ҡайтарып бирелде.

Ошолай тупланған йыйылма ғәскәр дүрт төмән булып сыҡты, уға баш сардар итеп Иҙеүкәй баһадир ҡуйылды. "Хеҙмәтеңде онотмам, мырҙа! Киләсәктә лә тоғролоҡ һаҡлаһаң, урыҫ кенәздәрен ауыҙлыҡлап, диңгеҙгә үткәрмәһәң, ярҙамһыҙ ҡалдырмам һине! — тип вәғәҙә бирҙе Тимур. — Ә Сарай ҡалаһы — динһеҙҙәр, ҡараҡтар ояһы. Ул ер менән тигеҙләнәсәк! Ә һин үҙеңә... йәғни яңы ханығыҙға бүтән пайтәхет төҙөрһөң..!"

Төп көстәрен ул көньяҡҡа йүнәлтте. Өс төмән, Сарайҙы ҡурыҡлаусы аҙ һанлы ғәскәрҙе тар-мар итергә, ҡаланы емерергә, үртәргә тотондо.

* * *

Һуғыш бизмәненең ҡайһы яҡҡа ауышыуын белгәс, Аҡъял хажи Сарайҙы ҡурыҡлауҙы үҙ иңенә алды. Ә ғаиләһен Сулман буйына оҙатты. Унда ғәйнәләр араһында дуҫ-ише байтаҡ. Йәнә ырыу башлыҡтарынан береһе байбисәнең яҡын ғына ҡустыһы. Ят итмәҫтәр, ҡанат аҫтына алырҙар, тип ышанды Олуғ әмир.

Егерме кешелек кенә алай һағында ылауҙар юлға сығыу менән, ул аҙ һанлы ғәскәрҙе ҡала диуарының төрлө еренә урынлаштырҙы. Көсө, ысынлап та, дошманға ҡаршы торорлоҡ түгел ине башҡаланың. Ҡарауыл төмәне лә, унан-бынан йыйылған сарбаздар. Йәмғеһе ун биш мең самаһы.

Ҡондорса һуғышындағы еңеүҙән оторо илһамланған дошманды туҡтатыу мөмкин булманы. Көн буйы ҡәлғә ватҡыс ҡоролмаларҙан таш яуҙырып, ҡаланы ныҡ ҡына емерткәс, Тимур төмәндәре тынып ҡалды. Һөжүм иртән яңырҙы.

Аҡъял ябай һуғышсылар рәтендә ҡылыс болғаны, уҡ атты, хәүеф көсәйгән урындарҙың әле береһенә, әле икенсеһенә ташланды.

Хәле сетерекле ине ҡамауҙағы ҡаланың. Ғәскәр кәмегәндән-кәмене, ҡәлғәнең күп ерендә диуарҙар емерелде. Бер нисә көн элек кенә балҡып ултырған башҡала Аҡъял хажиҙың күҙ алдында вайран ителә башланы.

Үҙе лә һаҡлана алманы Олуғ әмир. Күкрәгенә уҡ килеп ҡаҙалды. Янындағы йән һаҡсылары, ҡараңғы төшөүҙән файҙаланып, уны ҡаланан алып сыҡтылар.

Байтаҡ барғас, ул ауырлыҡ менән һулап:

— Егеттәр... Зинһар... туҡтағыҙ, эйәрҙән төшөрөгөҙ! — тип үтенде.

Йәш ҡулҡы ситендә туҡтап, хажиҙы күпереп үҫкән үләнгә салҡын ятҡырҙылар.

Нөгәрҙәрҙең береһе уның ейәне ине. Ҡартатаһын йәлләүҙән, ни ҡылырға белмәүҙән ул, үкһеүен баҫырға серәшеп:

— Ҡайҙа барабыҙ? Ҡайҙа... — тип бышылданы.

— Ҡайҙа тип... Ғәйнәләргә... Оләсәйең, әсәйеңләр артынан... — тине хажи, ейәнен ҡосаҡларға үрелеп. Ҡосаҡлай алманы, ҡулдары, быуынһыҙланып, үләнгә төшөп ятты. Үҙ хәлен аңлағайны ул. Шуға күрә әйтер һүҙен осларға ашыҡты. — Иҫән йөрөп... һау ҡайтһа... атайың да шунда барыр... һөйләшкәйнек... Ә һин ... терәк бул уларға... Ярай, балам... йыбанма... Сап!

— Эйе, ҡартатай, китәбеҙ. Аттар һыуынды. Ҡана, эйәргә ултыртайыҡ һине!

— Хәҙер, хәҙер... Әҙ генә... ятам да... — Аҡъял хажиҙың тыны ҡыҫылды. Өҙөм-йортом һүҙе өҙөлдө, ҡалғандары уйына күсте.

Ҡараһыу-зәңгәр күккә ҡарап ятҡан килеш ул: “Бынағайыш... — тине, ғәжәпләнгән һымаҡ. — Донъя һаман ҡәҙимгесә... Йондоҙҙар баҙлап яна. Ай офоҡҡа тәгәрәп бара... Ер еҫе шундай татлы!.. Бигерәк тә әрем еҫе көслө... Рәхәт... Ер үҙенә яҙҙың тылсымлы ҡеүәтен туплаған шул ул... Уны, ер көсөн, бер ни еңә алмай... Мәмләкәттәр ҡыйрала, бәндәләр ҡырыла.. Бына мин дә... Ә ер йәшәй, яҙ һайын терелә... Эй, мәрхәмәтле Алла!.. Гонаһтарым күп... ярлыҡай күр... Күбеһен сараһыҙҙан ҡылдым... сөнки миңә бит йәшәү менән үлем ыҙанынан атларға тура килде, быны үҙең беләһең... Улай ҙа... Абрар шәйех, уның мөриттәре... Сәйф Сараи... нисәмә-нисә байғош — ғыуаһ, улар минән яманлыҡ күрмәнеләр...”

Аҡъял хажиҙың уйы ошонда өҙөлдө. “Аһ!..” тип ыңғырашыуға, аңы һүнде, күҙҙәре йомолдо. Таң мәлендә айҙы, йондоҙҙарҙы ауыр болоттар ҡаплауын да, дәһшәтле йәшен йәшнәүен дә күрмәне, донъя яңғыратып күк күкрәүен ишетмәне инде ул.

Ҡойоп яуған ямғырға иғтибар итмәйенсә, ейәне, ҡартатаһының һыуынып өлгөрмәгән кәүҙәһен

эйәргә арҡыры һалып, алға сапты. Болоттар йоҡарып, көнсығышта күкте тоноҡ ҡына алһыулыҡ яҡтырта башлаған мәл ине...

## 9

Иҙеүкәйҙең үҙ ниәте, үҙ тоҫмалы. Алтын Урҙаны ҡабат аяҡҡа баҫтырырға хыялланды ул. Туҡтамыштың ҡояшы байыны инде. Үҙе лә, иғлан ителмеш вариҫы алабарман Йәләлетдин дә — билдәре һынған януарҙар. Серәшерҙәр, тағы ҡоралға тотоноп ҡарарҙар, ләкин хан тәхетенә юлдары бикле.

Үҙе хан булырға дәғүә итмәне Иҙеүкәй мырҙа. Быға уның хоҡуғы ла юҡ, сөнки ул Сыңғыҙхан бөркөттәре ояһының балапаны түгел, ә хандар нәсәбенән алыҫ аҡ манғыттар ырыуынан. Тамыры таҙа, ныҡлы уның. Ата-бабаһы үҙ улустарында эшлекле идарасы, һуғыш ҡупҡанда ҡурҡыуһыҙ яугирҙәр булған. Кәмһенергә сәбәбе юҡ ғорур мырҙаның.

Бик теләһә, ул хан була алыр ине. Ләкин Урҙа түрәләре лә, сит мәмләкәттәрҙең батшалары ла уға һырт бирәсәк, “дәғи хан” тип мыҫҡыллаясаҡ. Шуны күҙ уңында тотоп, ул тамырҙарына хандар ҡаны ҡатнашҡан Тимер Ҡотлоҡто аҡ кейеҙҙә күтәрергә фекер төйнәне. Әйҙә, тәхеттә шул һәлкәү ултырһын, ә идара эштәрен Иҙеүкәй үҙ усына йомарлар. Дәүләт-сәйәсәт, сит илдәр менән элемтә, ғәскәр, ҡаҙна эштәрен — бөтәһен дә! Донъя мәшәҡәте менән баш ауырттырыуға ҡарағанда, кәйеф-сафаны, уйынкөлкөнө, һунарҙы артыҡ күреүсе Тимер Ҡотлоҡ иһә быға шатланып риза буласаҡ. Урҙаның һәммә ғәмәле хан исеменән ҡылынғас, тәхет һағында ҡаты ҡуллы, егәрле баш сардар Иҙеүкәй торғас, ул нисек теләһә, шулай хозурлыҡта йәшәр.

Был эштәрҙе ашығыслыҡ менән юлға һалғас, Иҙеүкәй бөтә хәстәрен ғәскәрҙе нығытыуға күсерҙе. Шунһыҙ ярамай ине. Берҙән, Туҡтамыштың ҡасыуынан файҙаланып, улустар ситкә һибелергә, үҙаллы дәүләт төҙөргә хәрәкәт итә башланы. Икенсенән, урыҫ кенәздәре, Мәскәү хөкөмдары тирәһенә тупла765нып, Урҙа баҫымынан ҡотолорға ынтыла. Унан килеп торған яһаҡтың кимәле кәмегәндән-кәмей, баҫҡаҡтар йә ҡыуып ҡайтарыла, ә ҡайһы берҙә хатта үлтереп ташлана. Сарай ҡалаһы ҡыйратылғаны бирле, кенәздәр ҡәҙимгесә ҡунаҡҡа килеүҙән, улдарын аманатлыҡҡа биреүҙән баш тартты.

“Күрмәгәнегеҙҙе күрһәтермен әле мин һеҙҙең!” — тип күпме ярһымаһын, ҡулы ҡыҫҡа Иҙеүкәйҙең. Илдәге эске уҙамталыҡҡа сик ҡуйып, ғәскәрҙе, һис юғы, йөҙ меңгә еткермәй тороп, урыҫтарҙы, әмир Тимур әйткәнсә, ауыҙлыҡлау мөмкин түгел. Мәскәүҙе баҫып алып ҡыйратыу өсөн ун йылдан артыҡ әҙерлек кәрәк буласағын белмәй ине әле ул.

Тимур менән мөнәсәбәтте иһә ҡапыл өҙөргә ярамай. “Ярҙамымдан ташламам”, тигән вәғәҙәһе буш һүҙ булмаһа, Иҙеүкәй уға илтифат күрһәтер, түбәнселек менән баш эйер. Ләкин был ваҡытлы хәл. Асылда ул, тар-мар ителгән илде аяҡҡа баҫтырғас, үҙаллы сәйәсәт үткәрә башлаясаҡ. Тимур атының ҡойроғона төртөлөп йөрөмәҫ...

Шулайын шулай, ләкин был ниәткә ирешеү юлының һикәлтәһе күп. Уйламаған ерҙә абыныуың бар. Тимур билдәләгән юҫыҡтан әҙ генә ситкә тайпылһаң да, ярҙам көтөп һонолған ҡулыңды ҡылыс сабып өҙәсәк. Тамам көскә кергәнсе, ике ил араһында көйрәгән иҫке низағтарҙы онотоп торорға, тышҡа сығармаҫҡа тура килә.

Ә бына Туҡтамыштан һис тә күҙ яҙҙырырға ярамай. Тын буйындағы ғәскәрҙе бергә тупларға, йоҙроҡҡа йомарларға хәрәкәт ҡыла ул. Бының алдын алырға кәрәк.

Кесе Сарайҙан ебәрелгән күҙәтселәрҙең хәбәренә ҡарағанда, ни бары дүрт төмән эйәргән Туҡтамышҡа. Ә ҡалған ғәскәр туптарының һәр береһе үҙ улустарына ҡайта башлаған.

Ваҡыт бик тә ҡулай ине. Иң яҡын ярандары менән кәңәш иткәс, Иҙеүкәй хан янына инде.

— Әһә! — тине Тимер Ҡотлоҡ, ҡулдарын ыуғалап. — Баш бар инде үҙеңдә... Улайһа, бөгөн үк төмән әмирҙәренә сапҡындар китһен!

— Мин һинең хеҙмәтеңдәмен, ғәли йәнәп! — тине Иҙеүкәй, баш



04.2002 2 ÷àñòü.p65 144 29.07.02, 17:42

эйеп. — Төмән әмирҙәренә, бер аҙнанан ҡалмайынса, үҙҙәре менән мең баштарын да алып, Кесе Сарайға килеп етергә һинең исемдән фарман әҙерләнем...

— Ҡана, ҡана, бир тиҙерәк! Имза ҡуяйым. — Хан харап теремекләнеп, ишекле-түрле йөрөп әйләнде. Иҙеүкәй иһә уның тура атларға, тәнтерәкләүен белдермәҫкә тырышыуын күҙәтеп, аҫтан ғына көлөп ҡуйҙы. Хан йомшаҡ көрсигә ултырғас, ҡулындағы ҡағыҙҙарҙы өҫтәлгә йәйеп һалды ла, хандың кәпәренергә, үҙен ҙур хөкөмдар итеп күрһәтергә тырышыуын иҫәпкә алып:

— Мисәт тә кәрәк, падишаһ! — тип өҫтәне.

Үҙенә күрә бер мәрәкә кеүегерәк ине был эш. Төптән уйлағанда, баш сардар Иҙеүкәй төмән әмирҙәрен хан фарманынан башҡа ла саҡыра ала. Саҡырыу ғына түгел, хатта ҡәтғи бойороҡ бирергә хоҡуғы бар уның. Ләкин ул хандың абруйын күтәреүҙе хәстәрләне. Уны, ысынлап, ҡаты ҡуллы, айыҡ фекерле хөкөмдар итеп күрһәтергә кәрәк. Ә үҙе, йәнәһе, бары тик хан ихтыярын ғәмәлгә ашыра. "Тәхет тирәһендәге һанаттар, ғәскәр башлыҡтары, сарбаздар — һәммәһе минән үрнәк алып, ханға тоғролоҡ белдерергә тейеш", — тип уйланы Иҙеүкәй.

Ғәскәр башлыҡтары килеүгә хан һарайының йыйнаҡлығына, таҙалығына, арсыйҙарҙың өҫ-башы, ҡорал-ярағы ялт итеп тороуына айырыуса иғтибар бирелде. Күрһен ҡунаҡтар: Туҡтамыш ҡасҡан менән Урҙа тар-мар ителмәгән әле; уның ханы ла, башҡалаһы ла, ғәскәре лә бар. Хәрбиҙәрҙең ғәҙәте билдәле, улар дәүләт идараһының ныҡлығын хөрмәт итә, көс алдында баш эйә.

Үҙ ҡарамағындағы төмәндәрҙе ҡаты тикшереүҙән үткәреп, әмирҙәрен ҡәтғи киҫәтеп, ғәскәрҙе алдағы осрашыуға әҙерләне Иҙеүкәй. Һарай алдындағы киң майҙанды биләп баҫыр ҙа һыбайлы төмәндәр, хандың ҡул болғауына дөңгөрҙәр гөрһөлдәп, карнай-сорнайҙар гөжләп туҡтағас, ғәскәр икегә айырылыр, яу уйыны башланыр.

Иҙеүкәйҙең тағы бер хәстәре — ханды оҙайлы эскелектән сығарыу ине. Ул өҫтөнә аҫыл таштар менән биҙәтелгән, аҫ яғалы йәшел бәрхәт елән, башына ап-аҡ аммам кейеп, ҡунаҡтарҙы тәхеттә ултырған килеш ҡаршылар. Сырайы асыҡ, күңеле көр булырға тейеш.

— Үтенеп һорайым, бөйөк хан, аҙна буйы ауыҙыңа бер йотом шарап ҡапма! Йәнең теләгән тәғәмдәрҙе аша, йоҡоң туйғансы йоҡла... — тип теҙҙе Иҙеүкәй. — Хәрәмханаға инмәй тороуың да лазым. Ниәтләгән мәшәҡәттән ҡотолғас, теләгәненде ҡылырһың...

— Аб-ба, сардар! Һин мине суфыйға әйләндерергә уйлағанһың, ахырыһы? — тине Тимер Ҡотлоҡ, ҡулындағы шараплы кәсәне ситкә быраҡтырып. — Урҙала кем хан? Һинме, минме? Артыҡ уҙынып киттең түгелме, кем?.. — Ултырған урынынан ырғып тороп, ул, асыуынан шарт-шорт баҫып, ишеккә табан атланы ла, һаһылдап көлөп ебәрҙе. — Һин үпкәләмә, мырҙа. Мин шаярттым ғына... Бына күрерһең, бөтөнөһө әйткәненсә булыр.

— Шулай кәрәк, хан. Кешене, ә хөкөмдарҙы бигерәк тә, тәүҙә тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап баһалайҙар. Урҙа ханы күркәкле булырға тейеш! Йыйында ни һөйләреңде асыҡларбыҙ әле, ә табында өндәшмәүең хәйерле. Әмирҙәрҙең һүҙен хуплап ым-ишара яһап ҡуйһаң, етеп ашҡан. Әлхасил, быларын кәминәгә ҡалдыр...

Башҡала аяҡҡа баҫты. Хеҙмәтселәр иртәнән кискәсә хан һарайын йыуып таҙартыу, юлдарҙы тигеҙләү, баҡсалағы ағастарҙың ҡороған ботаҡтарын ҡырҡыу менән мәшғүл булды. Ҡала әһеленә лә эш етерлек ине. Урамдарға, йорттарға, мөмкин булғанса, байрам төҫө индерелде.

Кесе Сарай, дөрөҫөндә, ҡыйратылған башҡаланың тоноҡ шәүләһе тиерлек кенә. Бында хәҙергә ҙур-ҙур мөһабәт ғимараттар ҙа, шау-шыулы баҙарҙар ҙа, бай дөкәндәр ҙә юҡ. "Булырҙар ваҡыты еткәс!.." — тине Иҙеүкәй, тиҙ арала төҙөлөш эштәрен йәйелдереп ебәрергә уй төйнәп.

Башҡалаға төмән әмирҙәренән ни бары биш кеше, утыҙлап мең башы килде. "Эш башлап ебәреү өсөн тап-таман, — тип ҡәнәғәт-



04.2002 2 ÷àñòü.p65 145 29.07.02, 17:42

ләнде Иҙеүкәй. — Бүтәндәре аҙаҡ саҡырылыр...”

Ғәскәр башлыҡтары, хөрмәтле ҡунаҡтар булараҡ, ҡаланың яҡшыраҡ йорттарына урынлаштырылып, хужалар ҡарамағына тапшырылды. Иҙеүкәй быға айырыуса ҙур иғтибар бирҙе: үпкә-рыяға урын ҡалмаһын. Даланың йола-ҡануны ҡәтғи: ҡунаҡ — үҙеңдән оло. Ә был осраҡта бигерәк тә, сөнки бәйҙән ысҡынған әмирҙәрҙе көслөк менән түгел, яҡшылыҡ менән генә буйһондороу мөмкин ине.

Тәүҙә һәр береһенең ҡылын тартып ҡарарға, уй-ниәтен белергә кәрәк ине. Тимәк, йыйынға тиклем улар менән айырым-айырым осрашып һөйләшергә тура килә.

Төмән әмирҙәрен Ҡондорса һуғышында еңелеү, балҡып ултырған Сарайҙың ҡыйратылыуы бик ныҡ үкендерә, кәмһендерә икән. Ҡанһыҙ Тимурға ҡарғыш яуҙырған кеүек, Туҡтамышты ла ҡәһәрләйҙәр. Ә яңы ханға баш эйергә әҙерҙәр. Араларында хатта: “Уға ҡарағанда ла, һиңә нығыраҡ ышанам мин!” — тип тура ярҙырыусылар ҙа булды. Иҙеүкәй быға ҡул һелтәне. Ярамһаҡланыуҙы яратмай, йәнәһе. Шуныһы мөһим: ғәскәр башлыҡтары Урҙаны ҡабат аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәштән тайшанмаҫтар.

Эште ҡоро тотто Иҙеүкәй. Ике көн үтеүгә, ҡунаҡтар хан һарайы алдында ҡоролған бейек баҫмаға саҡырылды. Уларҙы Алтын Урҙаның йәшәүенә, йәшәйәсәгенә ышандырасаҡ иң мөһим тамаша ваҡыты етте.

Майҙан аша уҙған ғәскәрҙең күплеге, яугирҙәрҙең ҡорал-ярағы, аттарының көрлөгө, сафтарҙың ныҡлығы саҡырылған әмирҙәрҙең, меңбаштарының кәйефен уғата күтәреп ебәрҙе. Улар: “Афарин, афарин!” — тип туҡтауһыҙ ҡысҡырып, ҡул болғап, ғәскәрҙе алҡышланылар.

“Эйе, эйе, — тип мыйыҡ аҫтынан көлөмһөрәне Иҙеүкәй. — Ханға йола буйынса буйһонаһығыҙ, мәгәр бары тик көслө хөкөмдарҙы ғына хөрмәт итәһегеҙ. Борондан шулай килә...”

Төш ауғанда юғары мансаблы хәрбиҙәр кәңәшмәгә йыйылды. Бында ла алдан уйланылған тәртип хөкөм һөрҙө.

Оҙон һөңгөләрҙе сатрашлап тотоп, тораташтай ҡымшанмай баҫып торған һаҡсыларҙың артында ишек асылып китте. Яй ғына атлап килеп сыҡҡан ханды күреүгә, бөтә кеше теҙ сүкте, баштар эйелде.

Рәсми осрашыуҙар үткәреү өсөн күптән түгел генә төҙөлөп бөтөп, күркәм итеп йыһазланған, биҙәтелгән ҙур бүлмәгә күҙ йөрөтөп, Иҙеүкәй ғорурланып ҡуйҙы. Бүлмә, ысынлап та, һоҡланырлыҡ ине. Бында сит мәмләкәттәрҙең илселәрен ҡабул итергә лә мөмкин буласаҡ. “Урҙа көскә керһен әле, улары ла килер...” — тип күңелен бөтәйтте баш сардар.

— Хөрмәтле ҡунаҡтар!.. Данлыҡлы яугирҙәр!.. Һеҙҙе күреүемә сикһеҙ шатмын... Ҡана, аяғүрә баҫығыҙ! Ил тояуҙарының тубыҡланып тороуы килешмәҫ, ултырышығыҙ!.. — тип хандың тантаналы төҫтә өндәшеп ҡул болғауына төмән әмирҙәре, меңбаштары, ҡулдарын күкрәктәренә баҫып, баш эйә-эйә, диуар буйлап теҙелгән көрсиҙәргә ултырышты. — Һеҙҙең дәүләт алдындағы хеҙмәтегеҙҙе беләмен, — тине Тимер Ҡотлоҡ, һүҙен дауам итеп. — Шуға күрә, миңә тоғролоҡ белдереүегеҙҙе мәмләкәтебеҙҙең ҡеүәтен күтәрергә әҙерлек анты итеп һанаясаҡмын!..

Бөтөнөһө ырғып торҙо.

— Баш өҫтө, падишаһ!..

— Йәшәһен бөйөк илебеҙ!..

— Ханыбыҙға дан! — тигән тауыштарҙан тәҙрәләр зыңғырлап китте.

Иҙеүкәй мырҙаның ишараһын күреп, хан тәхеткә ултырҙы. Ғәскәр башлыҡтары бер-бер артлы уның алдына барып баш эйҙе.

— Әңгәмәне минең исемдән баш сардар Иҙеүкәй мырҙа дауам итер. Ул минең тоғро ярҙамсым, ышаныслы арҡаҙашым. Һеҙҙең дә һәр берегеҙ уның менән уртаҡ тел табыр, тип өмөтләнәм... Хушлашмайым, кисен табында осрашырбыҙ... — тип хан бүлмәнән сығып китте.

Иҙеүкәйҙең үткер, һынсыл ҡарашынан әмирҙәрҙең баштары иңдәренә тартылды. Аңлайҙар Урҙа теҙ-

гененең ошо ҡырыҫ холоҡло, яусыл кеше ҡулында булыуын. Хан әйткәнсә, уның менән уртаҡ тел табыуҙың сараһы ла сер түгел уларға. Тәжрибәле идарасы, ҡаты ҡуллы сардар булараҡ, мәмләкәтте аяҡҡа баҫтырыу, илдә тәртип урынлаштырыу юлында ул хәрби көскә, тимәк, ғәскәр башлыҡтарына таянасаҡ. Һүҙҙе шунан башланы ла Иҙеүкәй мырҙа:

— Илебеҙҙең хәле үҙегеҙгә мәғлүм, хөрмәтле әмирҙәр... Әгәр ҙә уның Алтын Урҙа тигән исеменә лайыҡлы ҡеүәтен, боронғо данын тергеҙергә иҫәп тотабыҙ икән, иң тәүҙә бына ниндәй саралар күрелергә тейеш... Беренсенән, үҙәк менән улустарҙың элемтәһен яңыртырға, нығытырға! Ҡайтыу менән төмәндәрегеҙҙе, уларҙы ғына түгел, ә ҡул аҫтығыҙҙағы халайыҡты ла ханыбыҙға ант иттерегеҙ...

— Дөрөҫ, дөрөҫ, мырҙа!..

— Хан — мәмләкәттең терәге ул!.. — тип әмирҙәр уның һүҙен күтәреп алды.

— Һуғыштан һуң һәр берегеҙ ғәскәрҙе үҙ төбәктәрегеҙгә ҡайтарҙы. Был хатаны кисекмәҫтән төҙәтегеҙ! Төмәндәрҙең ҡайҙа торасағы билдәләнде. Шунда күсегеҙ, сиктәрҙе нығытығыҙ, яу уйындары, оҙайлы ҡамау һунарҙары үткәрегеҙ! — Иҙеүкәйҙең тоноғораҡ тауышы күтәрелде, сыңлап китте. — Был кәңәш тә, бойороҡ та!

Аранан бер әмир, тотлоғораҡ:

— Беҙ ғәскәр менән һин әйткән төбәккә күскәс ни... үҙ улусыбыҙҙа кем идара ҡыласаҡ? — тип һорау ҡуйҙы.

— Әһә! Үҙем баш, үҙем түш, тип йәшәргә теләнеңме? — Иҙеүкәйҙең йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, күҙҙәре йылтырап китте. — Һин ғәскәр башлығы, туған! Ә идара эштәренә, хан фарманына бинаән, бейҙәр тәғәйенләнде. Һәр улусҡа! Алдағы аҙнала улар башҡалаға кәңәш мәжлесенә киләсәк. Ғәскәреңде хәстәрлә!..

Улай ҙа Иҙеүкәй иҡтисад, хужалыҡ эштәренең иң мөһимдәренә лә туҡталыуҙы кәрәк тапты. Йөмләнән: малдың иҫәбен алыу, көньяҡтағы уңдырышлы ерҙәрҙә сәсеү майҙандарын киңәйтеү, ҡалым йыйыуҙы тәртипкә килтереү, ҡалаларҙа һөнәрселекте йәнләндереү кеүек эштәр телгә алынды...

Табынға йөҙгә яҡын кеше саҡырылған. Көндөҙгө тамаша ваҡытында ҡунаҡтар хан ғәскәрен ҡурҡыу ҡатыш һоҡланыу менән күҙәтеп торғайнылар. Әле иһә Урҙа һанаттарының олпатлығы, затлы кейем-һалымы, һыйҙың муллығы уларҙы тамам тынысландырҙы. “Илебеҙ йәшәй былай булғас!” — тип бер-береһенә мәғәнәле төҫтә эйәк ҡағыуҙары ошоно аңлата ине.

Ҡунаҡ әмирҙәрҙе юлда һаҡлап оҙатып йөрөгән алайҙар өсөн баҡсала айырым табын ярашты рылды. Бындағы ғәскәрҙе улар ҙа күргәйне. Шау-гөр килеп һыйланғанда һүҙ шул хаҡта барҙы. Үҙ төмәндәренә ҡайтҡас, яуҙаштарына Урҙаның ныҡлығын, башҡаланың тәртип-низамын маҡтап һөйләрҙәр. Иҙеүкәй мырҙа, бүтән сараларҙан тыш, ошоно ла күҙ уңында тотто...

Осрашыу, һый-тамаша мәшәҡәттәренән арынғас, хан, Иҙеүкәйҙе саҡырып, күптәнге теләген белдерҙе.

— Һүҙеңде йыҡманым, хөрмәтле мырҙа, әйткәнеңде ҡылдым. Ҡәнәғәтһеңме?.. Ярай, улайһа...Баш сатнап бара, аяҡтар ойой. Бер яҙылып алмай булмаҫ. Һунарға сығып әйләнәм!

— Бик ваҡытлы уйлағанһың, бөйөк хан! — тине Иҙеүкәй, уға баш эйеп. — Далаға күҙәтселәр ебәргәйнем. Шалҡар күле тирәһендә ҡолан көтөүе күренгән. Ҡамау һунары өсөн бынан да ҡулай форсат булмаҫ. Һинең менән китәсәк ғәскәр әҙер. Төмән әмире бойороғондо көтә...

— Һай, ирҙәрҙең аҫылы! Мин уйлап өлгөргәнсе, эште яйға һалып та ҡуйғанһың, рәхмәт төшкөрө. Ҡана, кем бар унда? — тип хандың ҡысҡырыуына, ишек-аға килеп инеп, уның алдында тубыҡланды. — Ҡарауыл төмәне сардарын саҡырт!..

Ә Иҙеүкәйҙең үҙ ниәте. Башҡаланы ҡурыҡларға ҡарауыл төмәненән өс меңлек ғәскәр ҡалдырып, бындағы дүрт төмәнде, һис кисекмәҫтән, көнбайыш сиктәргә яҡыныраҡ урынлаштырырға кәрәк ине. Береһе Сулман тамағында,

икенсеһе ҡыйратылған Сарай ҡалаһынан түбәндә Иҙел ярында торасаҡ. Тағы икеһе Иҙеүкәй мырҙаның үҙ ҡарамағында булыр. Хәрби урдуға Йайыҡ буйында текләнәсәк...

Хан һунарға, ғәскәр берекмәләре үҙҙәренә тәғәйен ителгән урындарға китте. Уларҙы оҙатыу менән, баш сардарҙың ғаиләһе лә, йөк артмаҡлаған дөйә каруанына ҡушылып, ике йөҙ кешелек алай һағында юлға сыҡты. Ул үҙе иһә, бында ҡалаһы ғәскәр башлыҡтарына, идара хадимдарына иң һуңғы бойороҡтарҙы биргәс, кисләтеп, каруан артынан сабыр. Ял юҡ уға. Ҡылаһы ғәмәлдәре башланып ҡына тора. Күпме ихтыяр, түҙем кәрәк алдағы ҡаршылыҡтарҙы еңеү, Урҙаны усҡа туплау өсөн.

Был кистә ул юлға сыға алманы. Ҡаланың көнбайыш ҡапҡаһын һаҡлаусы алайҙың меңбашы, уның алдында менгеһен үрәпсетеп, ергә һикереп төштө.

— Атыңдан нығыраҡ үҙең тиргә батҡанһың, — тип көләмһерәне Иҙеүкәй. — Былай ашығыуың сәбәпһеҙҙән түгелдер? Һөйлә!

— Ғәфү ит, бөйөк мырҙа, юлыңды бүлдем шикелле, — тине меңбашы ҡулдарын күкрәгенә баҫып. — Ҡапҡа тышында Туҡтамыш хандың сапҡындары көтөп тора. Егерме һыбайлы. Ҡалаға индерергәме, юҡмы?..

— Быны вәли хәл итергә тейеш. Ҡалаға ул хужа... Ә Туҡтамышты хан тип ололауың хата! Һинең... бөтәбеҙҙең ханы — данлыҡлы Тимер Ҡотлоҡ!

— Анау сапҡындарға эйәреп, “хан” тип ысҡындырҙым, мырҙа. Зинһар, асыуланма!

— Ярай, ярай, тыныслан. Кем хеҙмәтендә булыуыңды онотма, сардар!

— Онотоу ҡайҙа! Һинең хеҙмәтеңдәмен, — тип меңбашы ҙур ҡолъяулыҡ менән битен, муйынын һөрттө. Ысынлап та, бышлыҡҡайны ул.

— Тағы яңылыштың. Һин, туған, хан хеҙмәтендә! Илебеҙҙең йәшеҡарты, ғәскәрҙең түбән әмирҙәренән башлап, сарбаздарынаса, дәүләт идараһының иң юғары түрәләренән түбәндәренәсә — бөтөнөһө, бөтөнөбөҙ — хан хеҙмәтендә!..

— Аңланым, бөйөк мырҙа... Ә теге сапҡындар менән ни ҡылырға? Әллә, мәйтәм...

— Ҡуй, башыңды ватма! Иҙеүкәй уның һүҙен ауыҙынан алды. — Башлыҡтарын ҡарауыл аҫтында һарайға оҙат. Мин дә, вәли ҙә шунда булырбыҙ... Ә бүтәндәренә тирмә бир. Ашат-эсер. Үҙ мосолмандарыбыҙ бит...

Сәфәрҙе иртәнгә ҡалдырырға тура килде. Бына-бына ел уйнатып каруан артынан сабырға ашҡынып, аттарын көскә тыйып торған һыбайлы яугирҙәрҙе улы Нуртдин ҡарамағына тапшырып, баш сардар үҙе Туҡтамыш сапҡыны менән һөйләшергә уйланы. Ҡана, ниндәй хәбәрҙәр ебәрҙе икән ҡарт төлкө? Моғайын, берәй хәйләһе барҙыр, анау тиклем алыҫтан йомошсолар ебәрер булғас...

Егерме йыл инде Иҙеүкәйҙең Туҡтамыш менән танышлығына. Танышлыҡ ҡынамы әле! Тәү тапҡыр осрашып, ҡул ҡыҫышҡандан бирле, улар бер юлдан атланылар, бер маҡсатҡа ынтылдылар.

Аҡ Урҙа ханы Туҡтамыш йылдан-йыл көсәйеп килгән Аҡһаҡ Тимур менән өҙөштө, ләкин уны тармар итерлек ҡеүәте юҡ ине әле. Шуға күрә, ул тәүҙә Алтын Урҙа тәхетен яуларға бил быуҙы. Ошо ниәт Иҙеүкәйҙе хандың иң яҡын ярҙамсыһына әйләндерҙе.

Иҙеүкәй түмән әмире, аҙаҡ хан ғәскәренең уң ҡанатында сардар ине. Ә Алтын Урҙаны яулап алғас, Туҡтамыш уны баш сардар итеп ҡуйырға вәғәҙә бирҙе. Йәш ине Иҙеүкәй. Һәләтле ғәскәр башлығы, мин-минлекле, ғорур тәбиғәтле кеше булараҡ, ул киләсәктәге даншөһрәтте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа ҡарар итте.

Уның атаһы ла хан хеҙмәтендә ҙур вазифала ине. Дәүләт-сәйәсәт өлкәһендә тотҡан ерҙән һындырмау, алдағы һөҙөмтәләрҙе күҙ уңында тотоп, аҡыл менән эш итеүҙе хәстәрләне ул. Йөмләнән, Тимур менән ҡарыулашыуҙы туҡтатырға, ике ил араһында дуҫлыҡ урынлаштырырға, сауҙаға юл асырға хәрәкәт ҡылды.

Үҙ һүҙле, алабарман-тупаҫ холоҡло хан быға ризалашманы. “Минең ҡан дошманымдың ҡулын тотаһың! Хыянат юлына баҫҡанһың!” — тип туҙынып, абруйлы ҡарт һанатты, ҡарайҙан һөрөп, үҙ улусына ҡайтып китергә мәжбүр итте. Ә уның биләмәһе Тимур ерҙәренә сиктәш ине.

Был ваҡиғанан аҙаҡ, билдәле, Иҙеүкәй ҙә күҙҙән төштө. Туҡтамыш уны ҡанат сардарлығынан бушатып, түбән әмире дәрәжәһенә төшөрҙө, һәр аҙымын күҙәтеп торорға бойороҡ бирҙе.

Хан ғәскәренең уң ҡанаты тарафынан Тимур төмәндәре быға са бер-ике тапҡыр туҡмалғайны. Иҙеүкәйҙең исеме Аҡ Урҙала ғына түгел, Аҡһаҡ әмиргә лә билгеле ине.

Бер мәл атаһынан Иҙеүкәйгә шундай хәбәр килде: “Әмир Тимур Кураган минең дә, һинең дә Алланы онотҡан, иманһыҙ Туҡтамыштан ниндәй йәбер-золом күреүебеҙҙе белә икән. Беҙҙе үҙ иленә саҡырып сапҡын ебәрҙе. Мин ҡарт инде, улым. Ә һин икеләнмә, күс Тимур хеҙмәтенә!..”

Оҙаҡ уйланды Иҙеүкәй. Кереүендән алда сығыуынды тоҫмалла, тигән әйтемде хәтерләп, күпме баш ватмаһын, бер фекергә лә килә алманы. Шымсылар күҙәтеүендә булыуын белә ине инде ул. Тимәк, яңылыш ҡына яҙа баҫтыңмы, шик уятырҙай һүҙ ысҡындырҙыңмы — көнөң бөттө...

Үҙе төйнәгән хәтәр төйөн хандың да маҙаһына тейҙе, күрәһең. Уны тиҙерәк сисергә ниәтләп, ашыҡты. Ашыҡҡан — ашҡа, тигәнде онотоп, хата ҡылды хан.

— Һин минең иң тоғро арҡаҙашым, мырҙа, — тине Иҙеүкәйҙе үҙ алдына саҡырып. — Аҡылыңа, һәләтеңә тиң вазифаға ҡуям һине. Гел минең янымда булырһың. Кәңәштәреңә мохтажмын. Ә төмәнеңде бүтән кешегә бирербеҙ...

— Баш өҫтө, бөйөк хан! — тип яуапланы Иҙеүкәй. — Мин һинең ихтыярҙа.

Ошоноң менән Туҡтамыш үҙе үк Иҙеүкәйҙең икеләнеүен юйып ташланы. Аңлашылып тора, бынан аҙаҡ хан уның һәр аҙымын ғына түгел, тын алышын да күҙәтәсәк. Бындай кәмһетеүҙе нисек күтәрмәк кәрәк?

“Ҡарап ҡарарбыҙ...” — тине лә мырҙа, аҫтыртын көлөп, мәкерайғаҡ, баш-баштаҡлыҡ ояһына әүерелгән хан һарайынан ҡотолоу әмәленә үҙерләнергә кереште.

Ҡулай форсат тиҙ үк килеп тыуҙы.

Хандың ҡатындарынан береһе ул тапҡайны. Ошо айҡанлы һарайҙа һый мәжлесе үткәрелгән кис ине.

Үҙенең тоғро йән һаҡсыһы Ҡаратайҙы киҫәтеп ҡуйғайны инде Иҙеүкәй. Табындың иң ныҡ ҡыҙған мәлендә ул, һарай тирәһендәге ҡарауыл алайын тикшереү һылтауы менән, тышҡа сыҡты. Ҡаратай менән икәүләп һаҡсыларҙың, мәжлескә саҡырылған ҡунаҡтарҙың аттарының эйәр айылдарын ҡырҡтылар. Үҙҙәренең аттары ҡойма тышында тора ине.

Күҙгә төртһәң күренмәҫлек ҡараңғыға, ҡойоп яуған ямғырға ҡарамай, ҡасҡындар төн буйы саптылар. Таң һыҙылған сәғәттәрҙә улар Тимур ғәскәренең сик һаҡлауҙсыларына юлыҡтылар...

Ярандары “Хакими Ғәләм” тип ярамһаҡланған, үҙен-үҙе иһә “Ислам Ҡылысы” тип иҫәпләгән Тимур Кураган Иҙеүкәйҙе ҙурлап ҡаршыланы, ләкин хеҙмәткә алманы. “Мин Туҡтамыш хандың Алтын Урҙаны буйһондороуына ризамын, ләкин мәмләкәтем менән дуҫлыҡ мөнәсәбәте урынлаштырыуына иҫәп тотам. Сарай ҡалаһына юл тот, мырҙа. Ундағы ғәскәрҙе Туҡтамыш тарафына ауҙарырға хәрәкәт ҡыл. Ул онотмаҫ был ярҙамыңды!..” — тине Тимур уны сәфәргә оҙатҡанда.

Шулай килеп сыҡты ла. Хан тәхетен яулап, теләгенә ирешкәс, Туҡтамыш элекке низағты онотҡандай ине. Иҙеүкәйҙе Урҙа ғәскәренең баш сардары итеп тәғәйенләне.

Ләкин һуңғы ике-өс йылда хан уға яңынан ҡаҙала башланы. Иҙеүкәйҙең абруйына көнләште. Ҡурҡты ла, ахырыһы. Уны баш сардар вазифаһынан бушатып, ике төмән ғәскәр менән Йайыҡ буйына сик һаҡларға оҙатты. Был сараның үҙ башына булыуын аҙаҡ аңланы-аңлауын Туҡтамыш, ләкин эш



04.2002 2 ÷àñòü.p65 149 29.07.02, 17:42

уҙғайны инде. Иҙеүкәй Кесе Сарайҙы биләп, ханға ҡаршы сәйәсәт үткәрергә кереште. Тимурҙан уға ҡорал, аҙыҡ-түлек каруандары, төҙөлөш оҫталары килеүе иһә хандың һушын алды...

Туҡтамыштың сапҡыны, асылда иһә илсеһе, Иҙеүкәйҙең аяғына йығылып, уға оҙон ғүмер, шанлы ғәскәренә яңынан-яңы еңеүҙәр теләне.

— Тор, хөрмәтле ҡунаҡ, көрсигә ултыр! Ә тубыҡланып сәләмләүең урынһыҙ, мин хан түгел, — тине Иҙеүкәй тауышын баҫыбыраҡ. — Кемһең? Ниндәй йомош килтерҙе һине Урҙаның башҡалаһына?

— Мин, бөйөк әмир, Туҡтамыш хан ғәскәрендә меңбашы...

Уның һүҙен бүлеп:

— Ундай хан юҡ. Алтын Урҙаның бөтөн ил таныған ханы — хөрмәтле Тимер Ҡотлоҡ! — тип Иҙеүкәйҙең ҡатыраҡ өндәшеүенән илсе, ағарынып, башын иңенә тартты, ләкин һүҙен дауам итте:

— Кисерә күр... Туҡтамыш үҙен һаман да Урҙа ханы тип иҫәпләй бит. Тимер Ҡотлоҡто танымай хан итеп... Шуға күрә, мине уға түгел, ә һиңә ебәрҙе... Аҫаһың-киҫәһеңме, ярлыҡайһыңмы — ихтыяр үҙеңдә.

— Мин йәлләд түгел, һине язаларға... Йомошоңдо әйт! Бәлки хат килтергәнһеңдер?

— Хат юҡ, ağа. Хандың... ғәфү ит, Туҡтамыштың... хәбәре минең телемдә... Бойорһаң... бер һүҙен дә үҙгәртмәйенсә, әйтеп бирермен... — Илсе, ҡаушауын еңеп, мырҙаның күҙенә ҡараны, тамағын ҡырып ҡуйҙы.

— Тыңлайым, — тине Иҙеүкәй, сабырлығын туплап.

— Хәбәр ҡыҫҡа ғына... "Иҙеүкәй баһадирҙың аҡылы үткер, әйткәнеңдән ҡалғанын тел төбөңдән аңлар", — тине Туҡтамыш.

— Сурытма улайһа!

— Эйе, эйе... Ул һине үҙенең хәҙерге урдуғаһына, Аҙаҡ ҡалаһына, саҡырҙы. "Элекке дошманлыҡты онотоп, Урҙала бергәләп идара итербеҙ", — тине. Һине беренсе вәзир ҙә, баш сардар ҙа итеп ҡуймаҡсы. Бығаса күрмәгән хөрмәткә ирешәсәкһең, мал-мөлкәтең сикһеҙ буласаҡ икән...

— Шунының да әйт... — Көлөп ебәрмәҫ өсөн, Иҙеүкәй иренен тешләне. — Был тиклем ҙур мәрхәмәттең хаҡы ла бәләкәй түгелдер, ә? Минән ниндәй түләү көтә хөкөмдарың?..

— Һис тә аяғым тартмағайны был сәфәргә... Ҡурҡышымдан... "Ҡарышһаң, ғаиләң, туған-тыумасаң юҡ ителәсәк!" — тигәстәр.... ирекһеҙҙән килдем һинең ҡаршыңа... — тип иламһырап, һүҙҙе кисектерергә һылтау эҙләне меңбашы.

— Ҡабатлайым: минән ниндәй түләү көтә Туҡтамыш? Яуап бир!

Гөрҫ итеп тубыҡланып:

— Тимер Ҡотлоҡтоң башын... — тип шыбырҙаны ла илсе илап ебәрҙе. — Уф, Алла... Ниндәй гонаһтарым өсөн миңә был яза?!.

— Минән зыян-зарат күрмәҫһең. Илсегә үлем юҡ, тиҙәр ҙә баһа!.. Үҙең дә, юлдаштарың да ял итегеҙ. Иртәгә төш ауғанда ҡайтып китерһегеҙ. Юлығыҙға етерлек ризыҡ бирелер... Ә Туҡтамышҡа: "Иҙеүкәй мырҙа уйланырға, саҡырыуға яуабы әҙер булғас, сапҡын аша хәбәр итергә ризалашты", — тиерһең... Быны мин һине ҡараҡ хөкөмдарыңдың ҡәһәренән ҡурсалау өсөн әйтәм. Асылда иһә... Туҡтамыштың көнө һанаулы. Ерҙә урын юҡ уға! Ҡалғанын үҙең уйла.

— Баш өҫтө, бөйөк әмир! — тип һыңҡылданы илсе. — Ижазат бирһәң, хеҙмәтеңә күсер инем дә бит... бер яғы... Балаларымдың яҙмышы Туҡтамыш ҡулында.

— Кәрәгенән күп һөйләйһең!.. Ҡайт, яйын табып, сер һыйырҙай дуҫ-ишең менән һөйләш... Тимер Ҡотлоҡ хеҙмәтенә күсергә теләгән ғәскәр башлыҡтарын, әгәр ҙә үҙ төмәндәре, меңдәре менән хан тарафын алһалар, ул бөтәгеҙҙе ҡолас йәйеп ҡаршылар... Һүҙ тамам, яугир, уҙаҡтарың янына бар!..

Был осрашыуға, уның эҙемтәләренә бәйле дәһшәтле ваҡиғалар алда ине әле. Үҙенең еңелеүенән, хан тәхетен юғалтыуынан төңөлөргә, тыныс ҡына йәшәргә теләмәгән мәкерле Туҡтамыш менән иҫәпте өҙөргә әҙерләнде айбарлы яугир Иҙеүкәй...



04.2002 2 ÷àñòü.p65 150 29.07.02, 17:42

## 10

Яман хәбәрҙең аяғы еңел. Ҡондорса һуғышында Урҙа ғәскәренең еңелеүе, хандың ҡасыуы, Сарай ҡалаһының емерелеүе тиҙ арала Чиндан, Һиндостандан алып мәғриб илдәренә тиклем билдәле булды. Ғәрәсәтле йәшендең тағы ҡайҙа ялтлаясағы, Тимурҙың ҡайһы илде баҫып алырға йыйыныуы тураһында төрлөсә фараз ҡылып, халыҡтар ҡурҡыуға төштө.

Был ваҡытта Сәйф Сараи, ҡапма-ҡаршы ике хистән арына алмайынса, көндәр буйы йә асыҡ тәҙрә төбөндә уйланып ултырыуҙы, йә Нил ярындағы баҡсала аяҡтары талғансы йөрөүҙе ғәҙәт иткәйне.

Күңелендә ҡәнәғәтлек менән һағыш көрәшә, әле береһе, әле икенсеһе өҫтөнлөк ала. Илһамланып яҙған дастандың тамамланыуын, алдан ниәтләнгәнсә, арҙаҡлы кешеләргә, шулар рәтендә яҡташы Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди әмиргә һәҙиә ителеүен ул яҡшыға юраны. “Төрлө ҡулда булғас, дастандың, һис юғы, бер-ике нөсхәһе һаҡланыр, бәлки Иҙел буйҙарына барып етер”, — тип өмөтләнде шағир.

Был хаҡта уйланмай мөмкин түгел ине. Тыуған иленә үҙе ҡайта алмаҫ инде. Ни тиклем һағынмаһын, ҡайҙа ул ундай алыҫ сәфәргә баҙнатланып сығыу! Һаулығы айҙан-айға насарлана, йәше лә етмеш өҫтөндә. “Эйе, фани донъялағы мәнзилем ҡыҫҡарҙы шул. Уны оҙайтыу минең ихтыярҙа түгел”, — тип аһ орҙо шағир.

Яҙмыштан уҙмыш юҡ. Сәйфтең яҡташтары ла әҙәйҙе инде. Һарттарҙан Туғлы Хужа, ҡыпсаҡтарҙан Исхаҡ уҙаман, тағы бер нисә төрки шағир һуңғы йылда гүр эйәһе булдылар. Ауыр тупраҡтары еңел булһын.

Ә иҫәндәре, бигерәк тә йәшерәктәр, Сәйф Сараиҙы үҙҙәренең остазы итеп хөрмәтләй. Уның дастан яҙып тамамлауын, әллә күпме шиғырҙан диван туплауын белгәс: “Эй, мәүләнә! Беҙгә лә уҡып ишеттерһәңсе уларҙы”, — тип үтенде яҡташтары. Ә Ғилметдин әмир быға байрам төҫө бирергә уйланы, үҙ йортонда мәжлес ойошторҙо.

Сәйф дастанды уҡығанда тыңлаусылар, тын алырға ла ҡурҡҡан һымаҡ, өнһөҙ ултырҙылар, бары тик бер-береһенә мәғәнәле ҡараш ташлап, йылмайып, һоҡланыу белдерҙеләр.

Мөғәллиф иһә, уҡып бөткәс, дастандың үҙендә әйтелгәнгә өҫтәп, ҡыҫҡа ғына изаһ биреүҙе кәрәк тапты:

— Бына шул инде, ғәзиз дуҫтарым, “Гөлстан бит-төрки” аталмыш яҙмам, — тине тыйнаҡ ҡына. — Ул бөйөк Сәғди дастанын төркисәгә ауҙарыуҙан башланды ла артабан тармаҡланып-суҡланып китте, үҙ халҡыбыҙҙың тормош тәжрибәһенә, ғөрөф-ғәҙәтенә, тел айышына тамырланды. Хилафлыҡ ҡылған булһам, әйтегеҙ, тартынмағыҙ!

Ҡайҙа ул! Тыңлаусылар бер тауыштан:

— Афарин, афарин, остаз!..

— Таң ҡалырлыҡ мөһабәт дастан яҙғанһың!..

— Эйе, үҙ еребеҙҙең саф шишмәләренән ауыҙ иткәндәй булдыҡ!.. — тиешеп хуплау белдерҙеләр. Ә өлкәндәрҙән береһе, күҙенә йәш алып:

— Эй, шағир, һағыныуҙарым яңырып китте! — тип уны ҡосаҡлап арҡаһынан ҡаҡты.

Сәйф үҙе лә күңеле тулыуҙан бер дәҡиҡә өндәшмәй ултырҙы. Тамағын ипләгәс, ҡәләмдәштәрен күҙҙән кисерҙе лә:

— Яҡшы һүҙегеҙгә мең рәхмәт, дуҫтар! Бар теләгем — был дастан халҡыбыҙҙың күңелен яҡтыртһын ине! — тип битен һыйпаны.

— Иншалла, шулай булыр, остаз! Үҙ ҡулыбыҙ менән ҡат-ҡат күсереп, тыуған илебеҙгә ирештереү сараһын күрербеҙ! — тине йәш шағирҙарҙың береһе. Бүтәндәре был фекерҙе күтәреп алды...

Белеп әйткән халыҡ: “Яҡшы һүҙ — йән аҙығы”. Айырыуса йәшерәк ҡәләмдәштәренең хуплауы ҡыуандырҙы ҡарт шағирҙы. Ҡасандыр Сарай ҡалаһында саҡта Абрар шәйех һөйләгән ғибрәтле ҡиссаны хәтерләп: “Бына мин дә, сәтләүек ағасы ултыртҡан аҡһаҡал кеүек, гөл баҡсаһы ултырттым. Сәскәләрем — талымлап, һайлап теҙгән һүҙҙәрем инде. Барып етһендәр ине

килер быуындарға!.. Быуаттар туҙанында күмелеп ҡалмаһаларсы!» — тип теләне Сэйф.

Унының донъялыҡта ҡалдырыр мөлкәте лә, булған хәтлемен тапшыраһы варисҭары ла юҡ. Гөләндәм бикәнән башҡа ҡатын-ҡыҙға күңел ҡуя алмауы арҡаһында, ғаилә ҡорорға, балалар үҫтерергә яҙманы уға. “Мираҫым — әҫәрҙәрем...” — тип уйлап, бер һөйөндө, бер көйөндө шағир.

Нил буйында яй ғына атлап сайранда йөрөгәндә, ул шау-гөр килеп йүгерешкән балаларҙы күҙәтеп торорға ярата. Был тамашаға, уларҙың үҙҙәренә ҡарағанда, атаәсәләре нығыраҡ шатлана түгелме икән әле. Шулайҙыр. Көнләшерлек инде. Ана бит ҡайһылай алсаҡ йылмайып, шаталаҡ малайҙарын шәберәк йүгерергә, уйында отҡор булырға дәртләндереп ебәрә аталары.

Оҙаҡ ҡына йөрөй Сэйф. Аяҡтары талһа, таш эскәмйәгә ултырып ял итә. Ә ҡайтырға кәрәк, сөнки күҙ бәйләнеп килә. Ауылда саҡта тап ошо мәлдә ул ат көтөргә китә торғайны. Иптәштәре яландалыр инде, һуңларға ярамай...

Үҙ ҡылығына шым ғына көлһә лә, бала сағын хәтерләү йәненә яҡтылыҡ өҫтәй. Күләгә төшөрмәҫкә ине уға. Таңғаса һаҡларға. Был ҡыуанысты ул яңғыҙы ғына кисерергә тейеш. Аулаҡта...

Ә яр буйында, йыш ҡына тап киске сәғәттәрҙә, сәйер хәрәкәт башлана. Ниндәйҙер күңелһеҙ йола буйынса, ахырыһы, махау сиренән ыҙа сигеүсе байғоштарҙы, кәмәләргә ултыртып, Нил аръяғына сығаралар. Унда шулар йәшәй торған әйләнә-тирәһе ҡоймалы ялан ер бар икән.

Аһ ороп, абына-һөрлөгә атлаған, йөҙҙәренә үлем күләгәһе һарылған бәхетһеҙ бәндәләрҙән бөтә кеше ситкә һибелә. Сыр-сыулап, йүгерешеп уйнаған балаларын етәкләп, ата-әсәләр өйҙәренә инеп бикләнә.

“Тере мәйеттәр... Дауаһы юҡ микән ни был сирҙең?.. — тип әсенә шағир, ҡаланан ҡыуылған ғәриптәрҙең ҡара яҙмышын күҙ алдына килтереп. — Уларға ярҙам итеп булмайҙыр шул инде. Нил һыуҙары аша сығыу — бер донъянан икенсеһенә күсеүҙең ишараһы ла баһа быларға. Аҙаҡҡы кисеүҙәре...”

Үҙе лә шул кисеүгә яҡынлашты ул. Юҡ, уны Нил аръяғына сығармаҫтар. Баҡый йорто әруахтарҙың хөрмәтләләре янында булыр. Ә барыбер үкенесле яҡты донъянан китеү. Күпме йәшәһәң дә танһығың ҡанмай. Уйлаған ниәттәрең, ҡылаһы эштәрең тороп ҡала.

Былай уйлауы ҡурҡыуҙан түгел, әлбиттә. Әгәр ҙә тормош юлында яҡшылыҡ менән яуызлыҡ, шатлыҡ менән ҡайғы, йәшәү менән үлем йәнәш атлайҙар икән, быны нисек үҙгәртәһең. Ғүмер — алҡынып аҡҡан даръя. Унын, башы булған кеүек, аҙағы ла бар...

... Сэйфтең уйы тағы бала саҡ хәтирәләре менән ҡуша үрелеп китте.

Йәйге кистәрҙең береһендә ул көтөүгә сыҡманы, аттар диуана Юлан ҡарамағына тапшырылды. Бының сәбәбе шул: иртән иртүк, көн эҫеткәнсе, ул атаһы менән бергә утыҙ-утыҙ биш саҡырымдағы баҙарға китергә тейеш ине.

“Иртә торорға бит, ятып ял ит”, — тип атаһының ҡыҫтауына Сәйфетдин ҡулбашын йыйырып: “Йоҡом килмәй минең”, — тине лә тышҡа сығып китте. Лапаҫ аҫтында юлға әҙерләнгән арба тора, өҫтөнә күпертеп йәшел бесән һалынған. Мендәр түшәгең дә кәрәкмәй.

Ысынлап та, йоҡоһо килмәй унын, сөнки төндәр буйы ат көтөп, уяулыҡҡа өйрәнеп бөткән. Көндөҙ серем итеп алыр әле...

Ә төн — тамаша! Аяҙ күктә, еҙ тас төҫлө ялтырап, тулған ай йөҙә, йондоҙҙар йымылдаша. Тимер ҡаҙыҡ урынында әле, Етегән дә байырға ашыҡмай. Зөһрә генә, күҙгә күренеп, офоҡҡа ауышҡан.

Ер, бөтөн донъя йоҡола. Ара-тирә ҡайҙалыр эт өргәне, йыраҡ аҡландан ат кешнәүе ишетелеп ҡуя ла, тағы тынлыҡ урынлаша.

Йомшаҡ ел ыңғайына даланан әскелтем-татлы әрем еҫе эркелеп килә. Ғәжәп, был еҫ айырыуса төнгө сәғәттәрҙә көсәйеүсән. Күп йылдар үтеп, тыуған иленән алыҫта йәшәгәндә, мосафир шағирҙың танауын ҡытыҡлаясаҡ әле ул. Дала еҫе. Һағыныу билгеһе...



04.2002 2 ÷àñòü.p65 152 29.07.02, 17:42

Хәҙергә иһә Сәйфетдин, тауышын баҫып ҡына, иртәгә егеләһе юртаҡ һары байталға өндәшеп ҡуя: “Аша, аша, Һарысай! Оҙаҡламай юлға...” Ә Һарысай, уның иркә һүҙен аңлаған кеүек, башын сайҡай ҙа, кинәнеп юшауын белә. Йылҡы малының теле генә юҡ, ләкин кешенең һәр хәрәкәтенә, һәр һүҙенә ҡолағын ҡайсылап тора ул...

Бындай йоҡоһоҙ, һил төндәрҙә кеше хыялға бирелеүсән. Әгәр ҙә ул ни бары ун ике-ун өс йәшлек үҫмер булһа инде, күңеле ҡанатланып оса, башында береһенән-береһе ҡыйыу уйҙар ҡайнаша. Тәғәйен исеме юҡ был уйҙарҙың. Тойғолары ла сыбар. Әммә шуныһы хаҡ: ни теләһәң дә, теләк-өмөттәрең ҡабул булыр, ғәмәлгә ашыр кеүек. Хәйер, теләктәре күп уның, ҡайһыһын алға ҡуйырға белмәйенсә: “Иртәгә, иртәгә...” — тип йылмая Сәйфетдин.

Әрем еҫенән рәхәт сигеп, йәшел бесән өҫтөндә салҡан төшөп ятҡан килеш, ул ҡараһыу-зәңгәр асманды күҙәтә. Әйтерһең, баҙлап янған йондоҙҙарҙа уға кәрәкле яуаптар.

Кем белә, бәлки шулайҙыр. Китаптарҙа әйтелгәнсә, йондоҙҙарҙың торошона, ҡайһы яҡҡа күсеүенә ҡарап, күрәҙәлек ҡылыусы мөнәжжәм аталмыш кешеләр була, имеш. Ҡыҙыҡ! Шуларҙан һорарға ине.

Ә Сәйфетдиндең әсәһе: “Күктә һәр кемдең үҙ йондоҙо бар, шуны табып, бисмилла әйтеп, теләк теләһәң, ҡабул булыр”, — тип уның күңелен уйнатып ебәрҙе бер мәл. Йондоҙ атылһа иһә, кемдеңдер ғүмере өҙөлә икән йәнә...

Ни уйлаһаң, алдыңа шул килер, ти ауыл халҡы. Был шомло юрауҙың ысынлығына тәү тапҡыр ошо төндә ышанырға мәжбүр булды Сәйфетдин.

Йоҡоһоҙ уйланып ятҡанда, ул йондоҙ атылыуын күреп, ғәжәпләнергә лә, ҡурҡырға ла белмәйенсә, күҙен сытырҙатып йомдо, хатта эстән генә афәттән һаҡлаусы доға уҡыны.

Ошо ваҡыт уның янына атаһы килеп баҫты ла, тауышы ҡалтырап:

— Тор инде, балам... Йоҡлап ятыр саҡ түгел... — тип өндәште.

— Китәбеҙме? — тине улы айбанып. — Мин йоҡламайым. Һарысайҙы егәйек улайһа!

— Эй, балаҡайым!.. — тине лә атаһы, тауышы өҙөлөп, Сәйфетдинде ҡосаҡлап алды. — Ни ҡылабыҙ?.. Һуң бит, улым... Әсәйең... — тип үкһене.

— Ҡабат ауырып киттеме ни? Кистән ҡайһылай теремек ине бит... Ҡуй, илама, атай! Һауығыр әле... — тиһә лә, күңеле шомланып, башын атаһының күкрәгенә төрттө улы, үҙе лә илап ебәрҙе. Йорттарына ҡара ҡайғы килеүен белмәй әле ул. Илауы иһә атаһын йәлләүҙән. Быгаса уның илауын күргәне юҡ ине шул.

— Аллаһы тәғәләнән ... түҙем һорайыҡ... — тине атаһы, үкһеүен баҫырға серәшеп. Ҡулдары улының башын һыйпаны. — Эй, балам... әсәйең юҡ бит инде... Донъянан үтте...

— Нисек үтте? Үҙең дә инде...

— Тәҡдир... Вафат булды әсәйең... — тип яуапланы атаһы, тамағы ҡарлығып. — Тыныслан, илама... Илашмайыҡ... Һин, йүгереп кенә барып... мулла бабайыңды уята һал... Үҙең менән бергә үк алып кил!..

Буҫығып илап, сәсәй-сәсәй, урам буйлап йүгереүен хәтерләүҙән әлегәсә тыны ҡыҫыла, күҙ алды ҡараңғыланып китә шағирҙың.

Кеше үҙ ғүмеренең ҡасан өҙөләһен белмәй. Был хаҡта уйламаҫҡа тырыша. Шунлыҡтан, ахырыһы, артыҡ ҡурҡып та бармай. Ер йөҙөндәге ҡыҫҡа мәнзилен берәүҙәр изгелеккә арнай, баҡый донъяға киткәндә үҙенән яҡты эҙ ҡалдырыуҙы хәстәрләй. Икенселәр иһә аҙғынлыҡты, ҡомһоҙлоҡто, кешеләргә ҡарата бәғерһеҙлекте ат итеп менә. Ундайҙарҙың, балаларына ҡалдыраһы мал-мөлкәте ни, тәҡүә ҡыланып, өләшкән хәйер-саҙаҡаһы ни — бөтәһе яҙыҡ.

Сәйфтең ата-әсәһе алсаҡ тәбиғәтле, ыңғай холоҡло, кешегә ярҙамсыл булдылар. Әсәһе үлгәс, ауылдаштарының: “Ҡуй инде, бигерәк тә иртә үтте донъянан. Ҡайһылай сибәр, ҡайһылай ғәҙел ҡатын ине бахырҡай. Урыны йәннәттә булһын инде!..” — тип ҡайғырышып һөйләүе хәҙергәсә иҫендә ҡарт шағирҙың.

Унының кешеләргә, айырыуса бәхетһеҙлеккә осраған байғоштарға аяулы булыуы ла ата-әсә тәрбиәһенән, ауыл тормошоноң әхлаҡ-иман һабаҡатарынан ине. Нил кисеүенә, асылда иһә ғүмерҙәренең күрсәгәнә ауа-түнә килеп еткән һауыҡмаҫ сирлеләрҙе йәлләүе лә шунан бит инде. Был сифат бала саҡтан уҡ ҡанына һеңгән унының...

* * *

Атаһының тырышлығы, әсәһенең бөтмөрлөгө, бәрәшәклеккә юл ҡуймауы арҡаһында тормошо, заманына күрә, ипле генә ине ғаиләнең. Артыҡ ишле булмаһа ла, мал аҫыранылар, иген иктеләр. Ләкин, хужа күпме һуғылмаһын, тапҡан-таянғанын яһаҡсылар тартып алғас, ҡайһы саҡта мохтажлыҡ кисерергә лә тура килде. Балаларын асыҡтырмаҫ өсөн, ул йә түрәләр менән алыш-бирешле, хәлле ауылдаштарының малын бағырға, йә ашлығын урырға яллана торғайны. Нисек итһә итте атай кеше, ике ҡыҙын никахлап, хәленә күрә туйлап кейәүгә бирҙе, улдарын ауыл мәҙрәсәһендә уҡытты. Сәйфетдиндә хатта Сарай мәҙрәсәһенә ебәреү әмәлен тапты. Бынан тыш ул етемеҫергә, ярҙамсылары юҡ ҡарттарға хәйер өләшеү, фытыр-саҙаҡа кеүек фарыздарҙан бер ваҡытта ла тайшанманы...

Иҙел буйҙарын Аҡһаҡ Тимур баҫып алғас, шағирҙың ауылы әллә имен ҡалды, әллә юҡ. Туған-тыумасаһының яҙмышы ла билдәһеҙ ине.

Ер ташһыҙ, ил башһыҙ булмаҫ, ти халыҡ. Ысынлап та, хан ҡасҡан менән, Урҙа идараһыҙ ҡалмағандыр бит инде. Әллә Тимур уны үҙ мәмләкәтенең улусына ғына әйләндерҙеме? Әгәр шулай булһа, былай ҙа ҡыйратылған, таланған илдең елеген ҡорота икән яуыз.

Шомло хәбәрҙәр йыш килде, ләкин улар Урҙаны тетрәтеп уҙған ғәрәсәтле дауылдың шаңдауы ғына ине. Ундағы хәлдәрҙе анығыраҡ белмәй тороп, йәненә тынғы тапмаясаҡ Сәйф. Ниндәй булһа ла, шул унын тыуған иле. Ата-әсәһен, әллә күпме яҡындарын үҙ ҡуйынына алған ер. Ғәзиз ватанының яҙмышына нисек битараф булһын кеше...

Уға яҡты йөҙ күрһәтмәгән, аҙғынлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ ояһына әйләнгән Сарай ҡалаһы ла йәл ине уға. Һуңғы йылдарҙа Үзбәк, Жанибәк хандар заманындағы мөһабәтлеген, данын юғалтҡайны инде башҡала. Ә барыбер Сәйф Сараи уны хәтеренән һыҙып ташлай алмай! Унын йәшлек таңы шунда атты. Ғилем донъяһына юлы шунда башланды. Үҫмерлегендә хыял иткәнсә, уға мөғәллим булырға тура килмәне, ул “шиғыр фидайына” әйләнде, шағир исеменә иң тәүҙә шунда иреште! Хәйер, мөғәллим ни, шағир ни — икеһе лә мәғрифәткә, кешеләрҙең аң-зиһенен ағартыуға хеҙмәт итә инде...

Ә бүтәнен, иң бәхетле мәлдәрен иҫкә төшөрһә, тамағына асы төйөр килеп тығыла. Шул ҡалала йәш шағирҙың яурынына мөхәббәт ҡошо ҡунды бит. “Эй, Гөләндәм! Йәнемдең параһы! Ҡырыҫ ҡала артыҡ күрҙе беҙҙең саф һөйөүебеҙҙе, ҡауышырға юл ҡуйманы”, — тип аһ орҙо Сәйф. Ошо күтәрмәҫлек ҡайғыға ҡарамаҫтан, ул йыш ҡына үҙҙәренең ҡанаттарын ҡайырған Сарай ҡалаһын ҡәһәрләүҙән туҡтала, әлегәсә күңелен яҡтыртҡан тылсымлы хистәрҙән йыуаныс таба...

Ә тыуған иленең яҙмышы тураһында донъя хәлдәрен ышаныслыраҡ сығанаҡтарҙан белгән кеше менән һөйләшергә кәрәк ине уға. Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди — бына кем унын борсоулы һорауҙарына яуап бирә алыр.

Әмир уны ҡыуанып ҡаршыланы, һаулығын, көнитмешен һорашып хәстәрләште, ниҙәр яҙыуы менән ҡыҙыҡһынды.

Күренекле дәүләт хадимының ваҡытын аяп, шағир һүҙгә күсергә ашыҡты:

— Алтын Урҙа тураһында ниндәйҙер хәбәрең барҙыр тип килдем, мөхтәрәм әмир. Юғиһә осраҡлы сәфәрселәрҙең һөйләүенән асыҡ ҡына һығымта яһау ҡыйын.

— Сәмәрҡәнд ҡалаһынан беҙҙең илселәр ҡайтты, хөрмәтле аға, — тине Ғилметдин әмир унын һорауына. — Туҡтамыш хан ғәскәрен тармар итеү шәрәфенә унда байрам

тантанаһы үткәрелгән... Һин ишеткән имеш-мимештең күбеһе дөрөҫ. Хандың Ҡара диңгеҙ буйына ҡасыуы, Сарай ҡалаһының ҡыйратылыуы раҫ...

— Тимәк, Урҙа йәшәүҙән туҡтаны тигән хәбәр ысын икән дә...

— Ысын да, түгел дә! — Әмир, икеләнгән төҫтәрәк баш сайҡап, уйға ҡалды. Фекерен барлай булыр.

— Аңлап еткермәйем, — тине шағир. Һүҙҙең дауамын көттө.

— Үҙеңә мәғлүм, мәүләнә. Урҙа ерҙәренең бер сигендә таң атҡанда, икенсеһендә ҡояш байый, — тип Ғилметдин Санжар алыҫтан уратты. — Ундай ҙур илдең ҡапыл ғына йәшәүҙән туҡтауы мөмкин түгел. Һунарын тамаҡлап туйынған арыҫландан ваҡ януарға һамтығы ҡала...

— Һүҙең хикмәтле, әмир, — тине Сәйф Сараи, көлөмһөрәп. — Ат аунаған ерҙә төк ҡала, тип тә өҫтәһәңсе!

— Өҫтәйек... Ай-һай, һинең аҡыл-зиһенең! Ептең осон тотоп та алдың... Баяғы илселәр Сәмәрҡәндтә әмир Тимур Курагандың иң күренекле арҡаҙаштарын күреп һөйләшкән. "Ҡарт юлбаҫар Туҡтамыштың көнө бөттө! Ҡасып ҡотолған менән, ҡабат хан була алмаҫ", — тип маҡтана икән улар.

— Эйе, башына ҡарышты ул. Ә ил ни хәлдә һуң? Был хаҡта тәғәйен хәбәр бармы илселәрегеҙ һүҙендә?

— Бар, ағай. Хәйер, беҙ бүтән сығанаҡтарға ла таянабыҙ. Эш былай... Әмир Тимурҙың ниәте — Алтын Урҙаны тамам юҡ итеү түгел, ә үҙенә тоғро мәмләкәткә әйләндереп, урыҫ кенәздәренә ҡаршы ҡуйыу.

— Ниндәй мәкер! — тип Сәйф Сараи баш сайҡаны.

— Мәкер... Сәйәсәт... Ә асылда һәр ил үҙ мәнфәғәтен күҙәтә... Хәҙерге мәлдә Урҙала Иҙеүкәй әмир идара ҡыла. Ҡондорса һуғышында күрһәткән ярҙамы өсөн Тимур уны шулай күтәргән дә. Иҙеүкәй хандар нәсәбенән түгел. Тимәк, тәхеткә дәғүә итә алмай.

— Шулай булғас, уны кем хөрмәт итһен?

— Быны үҙе лә аңлайҙыр. Тимер Ҡотлоҡ тигән берәүҙе, аҡ кейеҙгә баҫтырып, хан итеп күтәрергә йыйына икән. Ул кеше хандар нәҫеленән. Иҙеүкәй шуның исеменән хөкөм йөрөтәсәк.

— Хәйерлегә булһын. Тағы ниҙәр күрә инде илебеҙ...

— Көтәйек әле, хөрмәтле аға! Беҙ Урҙа хәлдәрен күҙҙән ысҡындырмайбыҙ. Белеүебеҙсә, Иҙеүкәй — аҡыллы, мәғлүмәтле кеше, арыуталыуҙы оноҡҡан, егәрле, ҡаты ҡуллы сәйәсмән, һәләтле сардар. Туҡтамыш заманында элекке ҡеүәтен, абруйын юғалтҡан илде шул аяҡҡа баҫтырһа баҫтырыр.

Сәйф тыныслана төштө. Ләкин тағы бер һорауы бар ине уның:

— Ҡара әле, Ғилметдин энем... Теге Аҡһаҡ Мысырға һөжүм итмәҫме? Юғиһә бында яҡын илдәрҙе, буйһондороп, атының ҡойроғона тағып бөттө бит инде.

— Борсолма, ағай, беҙгә ҡул күтәрмәҫ ул! — тип әмир аныҡ яуап бирҙе. — Берҙән, ике арала килешеү бар. Икенсенән иһә... быныһы бигерәк тә мөһим... Мысыр солтаны ер йөҙөндәге барлыҡ мосолман әһеленең иң юғары башлығы, терәге булып танылды. "Һәр ғәмәлемде Алла ихтыяры менән ҡылам. Ул миңә изге диндән яҙған халайыҡтарҙы тура юлға ҡайтарыу, баш бирмәгән гонаһлыларҙы аяуһыҙ әҙәрлекләү вазифаһын йөкмәтте!" — тип иғлан иткән Тимур ниңә Ислам үҙеге менән ҡарыулашһын?

— Һинең өмөтлө һүҙҙәрең күңелемдәге көҙөктәрҙе бер аҙ юйҙы ла бит, хөрмәтле әмир, тик бер яғы... — тине шағир, икеләнеү хисенән айырыла алмайынса.

— Аңлайым, аңлайым, ағай, үҙ илеңдең хәленә асынаһың...

— Асынмай буламы! Ҡасаҡтарҙың ҡан илап һөйләүенә ҡарағанда, әллә күпме ауыл яндырылған, сәсеүлектәр тапалған, бәндәләрҙең күҙ терәп торған барлы-юҡлы малғынаһы тартып алынған. Меңәрләп ҡырылған, ғәрипкә әйләнгән йәпйәш яугирҙәрҙе лә уйлаһам, үҙемә урын тапмай һуғылам...

— Эйе, һуғыш дәһшәтле дауылдарҙан, йәшендәрҙән һәләкәтлерәк. Яҙаһы эҫәрҙәрендә лә ошо хәлдәр сағылмай ҡалмаҫтыр әле, ә? Үҙеңә мәғлүм, бындай ғәрәсәтле ваҡиғалар ҡуйырғанда сәсеүлектәр генә түгел, кеше яҙмыштары ла тапала.

— Һай, афарин һүҙеңә! Һуңғы мәлдә уйлап йөрөгән дастаныма фекер асҡысы табып бирҙең дә баһа, рәхмәт яуғыры! — тине шағир, яҡташының ҡулын ҡыҫып.

— Уңыш теләйем һиңә! Аллаһы тәғәлә уйыңа асыҡлыҡ, йөрәгеңә дарман, ҡәләмеңә етеҙлек әйләһен! — тип уны оҙатып ҡалды Ғилметдин Санжар әл-Башҡорди...

* * *

Йәйҙең нәгеҙ уртаһы. Ҡояш көнсығыштағы тәпәш кенә тауҙар артынан күтәрелеүгә, ҡыҙҙыра башлай. Ә көн үҙәгендә дымһыҙ, эҫе һауа бына-бына гөлтләп тоҡаныр кеүек. Бындай мәлдә урамдарҙа һис кем күренмәй, хатта баҙарҙар бушап ҡала. Бөтә йән эйәһе күләгәле урындарға һырыға. Кискә табан еләҫ ел иҫеп ҡуя-ҡуйыуын, тик уның да хәсиәте аҙ, сөнки ул сүлдән ваҡ ҡына ҡом өйөрөп килтерә. Йыш иләктән иләнгән кеүек һибелгән ҡомдоң инмәгән тишек-тошоғо юҡ.

“Эй, мәрхәмәтле Алла, бынау томраны баҫырлыҡ ҡына ямғыр ебәрһәңсе сарсап ятҡан ергә!” — тип ялбара кешеләр, ҡулдарын күккә һоноп. Ләкин Мысырҙа йәй айҙарында ямғырҙар — һирәк ҡунаҡ. Яуһа ла, ашыҡҡан һымаҡ, ябырылып килеп ҡоя ла тиҙ үк туҡтай. Уның ҡарауы, йәшенләп-дауыллап ҡоттарҙы ала.

Шағир, ҡулына ҡәләм тотоп, яҙышырға ултырғайны инде. Йайыҡ буйҙарынан килеп сыҡҡан бер мосафирҙың ысынмы-бушмы хәбәрен нисегерәк бороп, дастан туҡымаһына индерергә, тип уйлана ине ул. Фекерен ослап өлгөрмәне, тәҙрәләрҙе баҙлатып гөлтләгән йәшен сатҡыһы бүлмәне яҡтыртып ебәрҙе, артынса уҡ ҡолаҡ тондорғос гөрһөлдәүҙән өйҙөң диуарҙары һелкенгәндәй булды. Ҡайҙа бындайҙа эшкә ултырыу! Шағир ҡағыҙ-ҡәләмен өҫтәл тартмаһына йәшерә һалды. “Лә-хәүле-үәлә...” — тип ирендәре доға һамаҡланы.

Ярай әле, дауыл оҙаҡҡа бармаһы, үтеп китте. Ҡойма ямғыр туҡтаны, күк йөҙө асыла төштө. “Бына Хоҙайҙың хикмәте...” — тине шағир, тәҙрәләрҙе асып. Тыштан бүлмәгә саф һауа эркелде.

Ҡояш төшлөктән уҙып барған мәл. Көн һүрелгән. Яй ғына атлап, Нил буйында баҡсала йөрөп әйләнергә тап-таман.

Әллә ни арала баҡсаға кеше тулып та өлгөргән. Ҡулдарын күкрәккә баҫып сәләмләгән өлкәндәргә яуап биреп, осраған балаларҙы баштарынан һыйпап, Сәйф Сараи ашыҡмай ғына атланы. Уға шаушыуһыҙ, аулағыраҡ ер кәрәк ине. Теге ҡасаҡтың хәбәре тынғыһын алғайны уның.

...Имештер, Аҡһаҡ Тимер Йайыҡ һыуына яҡынлашҡанда иң ҡулай кисеүҙе Үҫәргән иленең йөҙ-йөҙ илле һыбайлы ғына алайы ҡарауыллап тора икән. Яугирҙәрҙең башлығы шул ырыуҙың данлыҡлы йәш батыры була.

Тимур төмәндәренең күҙәтселәре кисеүгә етеү менән, үҫәргән егеттәре, ҡыйҡыу-һөрән күтәреп, ят яуға ҡаршы ташлана. Ҡылысҡа ҡылыс килеп, һөңгө һелтәп, бик ҡаты һуғышалар. Әллә ни саҡлы дошман ҡырыла. Ләкин тап ошо ваҡыт Тимурҙың алғасҡы төмәне яҡынлаша. Үҫәргәндәр, сафтары һирәгәйеүгә ҡарамаҫтан, сигенергә уйламайҙар ҙа. Ныҡ тормаҡсылар. Үләләрме, ҡалалармы, кисеүҙе ташлап китмәҫкә әмер бирелгән булған уларға.

Ҡайҙа инде болот кеүек ябырылып, даланы дер һелкетеп килгән иҫәпһеҙ-һанһыҙ ғәскәргә ҡаршы тороу! Егеттәр бер-бер артлы эйәрҙән ҡолай. Яралылары сабып ташлана. Үс ҡайтара дошман. Ә үҫәргән яугирҙәренең башлығын уратып алып, әсир итәләр. Ул Аҡһаҡ Тимур ҡаршыһына баҫтырыла. Ҡурҡыу белмәҫ, айбарлы йәш батырҙың артабанғы яҙмышы билдәһеҙ. “Язалап үлтергәндәрҙер”, — тип фараз ҡылды теге мосафир...

Йәнә бер хәбәр һөйләне әле ул. Тап ана шул кисеү мажараһы ваҡытында Аҡһаҡ Тимурҙың ҡарауыл төмәне уртаһында килгән ҡыҙы ниндәйҙер сирҙән ҡапыл вафат булған. Ә атаһы ҡайғыһын тышҡа сығармай. Йөрөштө туҡтатмаҫҡа, билдәләнгән юҫыҡтан тайшанмайынса, алға барырға бойора. Үҙе иһә, арсыйҙары менән артта ҡалып, ҙур

кәшәнә төҙөтә лә ҡыҙын шунда ерләп китә, имеш...

Был хәбәрҙәр ысынмы, түгелме — ҡайһылай булғанда ла, дастан яҙыр өсөн аҙ ине. Әммә шуныһы: улар ҙур һуғыштарҙа ил-көүемдәрҙең ҡырылыуына, бөлгөнлөккә төшөүенә, бәндә яҙмыштарының ҡыл өҫтөндә ҡалыуына ишара.

Ғәмәленә күрә әмәле. Уйланды-уйланды ла Сәйф Сараи, йәшлегендә ишеткән хикмәтле ҡиссалар, мажаралы хикәйәттәр миҫалына таянырға ҡарар итте. Дастандың үҙәгендә анау үҫәргән яугиренә оҡшағаныраҡ батыр егет менән ҡыйыулыҡта уға тиң, сибәр ҡыҙҙың ҡайнар мөхәббәте, фажиғәле яҙмышы торор. "Ләйлә менән Мәжнүн" кеүегерәк әҫәр булыр, моғайын. Ләкин ул Сәйф Сараиҙың үҙ заманы ваҡиғаларына тамырланыр, һәр битен, һәр мисраһын Гөләндәм бикәнең нурлы күҙҙәре яҡтыртыр.

Көн һайын, Нил һыуының талғын ағышын күҙәтеп, уйланып йөрөй торғас, шағирҙың күңелендә дастан тыуғайны инде. Ҡағыҙға күсерәһе ҡалды.

Әҫәрен "Сөһәил вә Гөлдөрсөн" тип атаны ул. Сөһәил Туҡтамыш хан ғәскәрендә, йәшлегенә ҡарамаҫтан, күренекле сардар, данлыҡлы батыр булыр. Гөлдөрсөн иһә — әмир Тимурҙың яратҡан ҡыҙы, тиңе юҡ сибәр.

Дастан — илһам емеше. Урҙала Сөһәил тигән ғәскәр башлығы, Тимурҙың Гөлдөрсөн исемле ҡыҙы булғанмы? Кем белә быны? Уларҙың ер йөҙөндә йәшәүе, бер-береһенә ғашиҡлығы, фажиғәле яҙмышы — бөтөнөһө мөғәллифтең хыялында тыуҙы.

"Туҡта, шағир, ысынмы һуң был хәлдәр?" — тип икеләнә бирҙе лә ул, кем менәндер бәхәсләшкән һымаҡ, ҡашын төйөп, шым ғына көлөп ҡуйҙы. Әҫәренең тәүарих түгеллеген уйлауҙан икеләнеүе юғалды.

Уға шуныһы мәғлүм: тәүарихта, ғәҙәттә, билдәле шәхестәрҙең тормошо, ҡылған яҡшы-яман эштәре, булып үткән ваҡиғалар бәйнә-бәйнә хәбәр ителә. Ғәрәп тарихсыһы Ибн Һалдун китаптары ғына ла быға миҫал.

Шағирҙың юлы бүтәнсәрәк. Әлбиттә, ул тарихты йәки үҙенең күҙ алдында йөҙ биргән ваҡиғаларҙы инҡар итмәй, ләкин уларҙың үҙ кисерештәренә ауаздаштарын һайлап ала.

Әгәр ҙә Сәйф Сараи Аҡһаҡ Тимур менән Туҡтамыштың туҡтауһыҙ өҙөшөүе арҡаһында ил-көүемдәрҙең ҡырылыуына, бөлгөнлөккә төшөүенә битараф ҡалһа, был дастанды яҙмаҫ та ине. Шуларҙың ҡанһыҙлығы, бәндә ғүмерҙәренә аяуһыҙлығы бит инде донъяны ҡорота. Һуғыштың ағыулы һулышынан кеше күңеленең иң нәфис, иң наҙлы хистәрен ҡырау ҡыуырып ала. Үҙенең аянысл тәжрибәһенән белә Сәйф Сараи: һөйөү сәғәтең һуҡтымы — ул, туң ерҙе тишеп сыҡҡан умырзая кеүек, һис нигә ҡарамай, үҫергә ҡырталаша, күккә үрләй...

Дастандың һуңғы бүлеген яҙыу айырыуса ҡыйын булды шағирға, сөнки бында Сөһәил менән Гөлдөрсөндөң ғүмерҙәре фажиғәле рәүештә өҙөлә.

Бына, бер мәл, ғашиҡ ҡыҙҙың тапҡырлығы, ҡыйыулығы арҡаһында, Сөһәил зиндандан ҡотола. Ҡасып киткәс улар, йөрөп-йөрөп, тере йән эйәһе юҡ сүлгә барып сығалар. Һыуһын ҡандырырға һыу ҙа, ашарға ризыҡтары ла булмай. Хәле бөтөп йығылған йәренә егет ярҙам күрһәтә алмай. Һөйгәне үлгәс, ул донъяла яңғыҙы ҡаңғырып йәшәүҙе күҙ алдына ла килтермәй. Сикһеҙ ҡайғынан аһ ороп, күкрәгенә хәнйәр ҡаҙай.

"Сөһәилдең аһынан ҡупты
шул саҡ буран,
Һынды гүйә ғәләм тәгәрмәсе бынан.
Ғашиҡтарҙың өҫтәренә
тупраҡ өйөлдө,
Әммә бары сәхрә генә белде
был хәлде..."

Шулай тамамлана ике йәш йөрәктең мөхәббәт тарихы. Ғашиҡтар бергә һәләк була, уларҙы хатта үлем айыра алмай. Ә күңелдәрендә тоҡанған илаһи хистең нуры мәңге һүнмәҫ. "Эй, Раббым, күҙ йәштәремде ҡушып яҙған әҫәремде уҡыған һәр кеше йәненә терәк тапһасы!.." — тип Сәйф Сараи дастандың һуңғы нөктәһен ҡуйҙы.

## Юлдың дауамы
## (“Йыраҡтағы — яҡын...”)

Шағир яр ситенә барып баҫты. Көн йылы булғанлыҡтан, өҫтөндә аяҡ йөҙләгөнә төшөп торған ап-аҡ ебәк елән. Башына шундай уҡ, ҡарҙай аҡ, салма уралған.

Күңеленән доға тәкрарлап, тиҫбе төймәләрен шыуҙыра-шыуҙыра, ул ҡарашын алҡынып аҡҡан йылғаға тоҫҡаны. Ҙур караптар, еңел кәмәләр Нил түбәненә ашыға. Берәүҙәре әл-Искәндәриәгә, икенселәре Дөмйәт ҡалаһына, сөнки диңгеҙгә етәрәк Нил һыуы икегә айырыла...

Үҫмерлегендә (Сәйф түгел, Сәйфетдин сағында) шағир Иҙел буйлап Хазар диңгеҙенә табан йөҙөп үткән караптарҙағы юлсыларға көнләшә торғайны. Шул мәлдәге ашҡыныуын хәтерләп, нисәнсе тапҡыр инде ул: “Эйе, эргәләге — алыҫ, йыраҡтағы яҡын булып сыҡты”, — тип бер һөйөндө, бер көйөндө.

Нил караптарының берәйһенә ултырһаң, бынан күп йылдар элек Сарай ҡалаһынан киткәндәге кеүек, диңгеҙгә барып етергә булыр ине. Әлбиттә, бүтән диңгеҙгә. Ә артабан йәйәүләп... Хәйер, быныһы — ғәмәлгә ашмаҫтай хыял ғына. Йәшең етмештән уҙғас, ундай сәфәргә баҙнатланыр көс ҡайҙа...

Мең-мең саҡырымдар айырып тора уны ғәзиз ватанынан. Тик ул барыбер күңеленә яҡын. Олоғайған һайын һағыныуы, юҡһыныуы һүрелмәй.

Ҡолағына нескә ҡыл сыңына оҡшаш ауаз ҡағылыуға, шағирҙың ҡарашы күккә үрләне. “Эйе, эйе, — тине баш ҡағып. Хатта ҡул болғап ҡуйҙы. — Яҙ етте бит. Тыуып-үҫкән, тәү тапҡыр ҡанат яҙған төйәктәренә ҡайта теҙелешеп оҫкан ҡоштар. Ҡайһы берҙәре ҡыпсаҡ далаһына, Уралға, Иҙел буйҙарына юл тоталыр әле. Яҡташтарым...”

Араларҙың алыҫлығына ҡарамайынса, ҡоштар юлға сыға. Ҡайһы саҡта уларға йәшенле болоттар, дауылдар аша осорға тура киләләр. Ләкин тыуған ерҙең тылсымлы тартыу көсөн бер ҡаршылыҡ та еңә алмай. Ҡайтып етә һалып, оя ҡороу, бала сығарыу, бәләкәс ҡошсоҡтарҙы һаҡлап үҫтереү, ҡанаттары нығына төшкәс, осорға өйрәтеү — бына ниндәй борсоулы ла, ҡыуаныслы ла мәшәҡәттәр саҡыра кейек ҡоштарҙы.

Сәйфетдин үҙҙәренең йорто тирәһенә эйәләшкән сыйырсыҡтарҙың ҡайтыуына иҫке ояны төҙәтә, кәрәкһә, яңыһын яһап ҡуя торғайны. Ҡоштар пыр-пыр оса, ояны йомортҡа баҫырға әҙерләй, унан, һайғау осона йә өй артындағы ҡараманың иң бейек ботағына ҡунып, һайрарға керешә.

Моғайын, хәҙерге малайҙар ҙа яҙҙы түҙемһеҙләнеп көтөп алалыр, ҡоштарҙы шулай ҡаршылайҙыр. Сыйырсыҡтың үҙ ерен, үҙ ояһын, үҙ күгеи онотмауын ауыл балаһы белмәй буламы. “Мин был ҡыуаныстан мәхрүммен инде. Ҡартайҙым, мосафирмын да...” — тип һағышланды шағир.

Тере сылбыр булып оҫкан ҡоштар уның былай ҙа уяу хәтерен уғата ҡурсытып ебәрҙе. Етмәһә ҡайҙандыр әрем еҫе килгәндәй.

Шуныһы ла иҫендә: ҡыш ни тиклем һыуыҡ, ни тиклем оҙон булмаһын, яҙ яҡынлап, көндәр әҙ генә имшендеме, өйөрөлөп-өйөрөлөп епшек ҡар яуып ебәрә.

Ҡар башына ҡар етә, ти халыҡ. Аҙна-ун көн буранлай ҙа, ел баҫылып, бөләңгерт күк йөҙө асылыуға, бейек-бейек һырынтылар күҙгә күренеп сүгә башлай. Улай ҙа ҡапыл ғына сигенергә теләмәй әле ҡыш. Төндәрен һыуытып та ала. Көндөҙ ҡар аҫтынан һарҡылып йыйылған һыу туңа, ләкин йоҡа ғына боҙ көн битендә тиҙ үк эреп бөтә. Ҡуләүектәр, ярмаланып ятҡан ҡарҙы өңөп, тәрәнәйә, йәйелә. Юлаҡ уйып, гөрләүектәр сылтырап аға, ҡаралты баштарынан тып-тып тамсы тама, ҡоштар сыр-сыу килә. Был тауыштарҙың бергә ҡушылыуынан яҙға ғына хас ғәжәйеп мусиҡа хасил була.

Яҙ айҙары — йылдың иң шауҡымлы миҙгеле. Ҡар эреп бөтөп, көндәр тамам йылыныу менән тәбиғәттә бөйөк яңырыу башлана. Йәшенләп-күкрәп ямғыр ҡойоп үттеме, ер ҡыртышын тишеп, йәш үлән баш ҡалҡыта. Бөрөгә тумалып ултырған ағастар бер-ике көн

томанһыу рәшәгә төрөнөп ултыра ла япраҡ яра. Ерҙе, әйтерһең, йәшел ялҡын сорнап ала. Тәбиғәттең мөғжизәле көсөнә нисек таң ҡалмайһың? Уның шифалы һауаһынан тындар иркенәйә, гүзәллегенә һоҡланып туймаҫһың...

"Эй, ғәзиз ватаным! Мин һине төштәремдә генә күреп йыуанам инде. Һиңә тоғролоғом, һүрелмәҫ һөйөүем үҙем менән бергә баҡый донъяға күсер..." — тип күҙен монарланып ятҡан офоҡҡа тоҫҡаны шағир. Өҫтөндәге еп-еңел еләне, талғын елдә елберҙәп, уны күккә күтәрергә талпына ине...

* * *

Төрки халыҡтарҙың уртаҡ шағиҙынан алты быуат аҙаҡ йәшәгән яҡташы булараҡ, шуны уйлайым. Ул беҙҙән юлдың оҙонлоғо менән дә, заман-ваҡыттар аралығының сикһеҙлеге йәһәтенән дә үтә алыҫ. Шуға ҡарамаҫтан, уның рухи донъяһы, ижади мираҫы беҙгә ят түгел.

Ҡыпсаҡ Сәйф Сараиҙың милләттәше, бөгөнгө әҙәбиәттең күренекле вәкиле үҙе тураһында: "Уралымдың зәңгәр монарына, моңдарына инеп уралам", — тигәнен боронғо шағирҙың яҙмышына күсерһәк, шиғриәттең милли мәҙәниәт, әхлаҡ-иман һауаһынан сафлыҡ туплауына тағы ла нығыраҡ ышанаһың.

Үҙ заманының ғәрәсәтле дауылдары, дәһшәтле йәшендәре аша, аҡ еләнен елберҙәтеп, атлай ҙа атлай тынғыһыҙ шағир. Уның илем тип һыҡтаған йәне, тетрәнеүҙәре, илһамлы өмөт-хыялдары, осар ҡоштар кеүек, беҙгә әйләнеп ҡайта. Һаумы, шағир!..

*28. XII. 2001.*





04.2002 2 ÷àñòü.p65 159 29.07.02, 17:42